ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# КискеӨфө
22-28 апрель (алағарай) 2017
№16 (746)
kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Үҙ ризығың - үҙәктә**


5

**Юрматылар -**
аҡҡоштар нәҫеленән

7

**"Тамыр" телеканалында үткән...**

оҙон-оҙаҡ бәхетле бала саҡ
8-9

**Милләтте - шәхестәр,**
ә шәхесте илһөйәрлеге күтәрә

11

**ТВ-программа** 14

***Инглиз короле пленға төшкән һалдаттан һорай икән: "Шулай итеп, һин аҡса өсөн һуғыштың инде, ә?" "Эйе, - ти һалдат, - аҡса өсөн һуғышырға ялландым, ә һеҙ ни өсөн һуғыштығыҙ һуң?" "Үҙ намыҫымды яҡлау өсөн", - ти икән король. "Шулай инде, - ти һалдат, - һәр кем үҙенә нимә етмәй, шуны ҡайғырта..."***

***(Эдуар Эррио).***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Башҡортостан халҡы тыуған ерен ташлап, күпләп ситкә китә. Был айырыуса һуңғы йылдарҙа нык күҙәтелә. Уның сәбәптәрен һәм мәсьәләне хәл итеү юлдарынниҙә күрәһегеҙ?

***Илшат РӘХМӘТУЛЛИН, БР Мәғарифты үҫтереү институты ҡарамағындағы Төбәк координация үҙәге етәксеһе:*** Республикабыҙҙы ташлап, ситкә китеүселәр араһында йәштәр ҙә бик күп. Уларҙың китеүенең объектив сәбәптәре бар, шуға ла улар адресына ниндәйҙер ғәйепләү ташлап булмай. Киреһенсә, йәштәрҙең был ынтылышын хупларға, дәртләндерергә кәрәк, тип уйлайым, сөнки уларҙың күпселеге Мәскәү, Санкт-Петербург һәм башҡа шундай эре ҡалаларға, хатта сит илдәргә белем алырға тип китә. Был йәһәттән мәктәпте тамамлаусыларға БДИ шарттары һәм һөҙөмтәләре бик ҙур мөмкинлектәр бирә. Ниңә шунан файҙаланып ҡалмаҫҡа? Ситкә китеп уҡыуҙың бер ғәйебе лә юҡ, бында иң мөһиме - уларҙың республикабыҙға әҙерлекле белгестәр сифатында кире ҡайтыуҙары төп шарт. Ләкин бына ошо юҫыҡта проблемалар башлана ла инде. Үкенескә, тыуған яғына эшкә ҡайтҡан йәш белгестәрҙе бында бер кем дә ҡушҡуллап көтөп тромай. Һәр хәлдә, йыш ҡына шулай килеп сыға. Үҙем белгән бер нисә егет менән, мәҫәлән, ана шундай күңелһеҙ хәл килеп



сыҡты. Мәскәүҙә гидрогеолог һөнәренә уҡып, республикабыҙҙа эшләргә теләк менән янып ҡайтҡан ике егеткә лә йүнле эш урыны табылманы. Ахырҙа, уларҙы был белгестәр эшмәкәрлеге өсөн бер ниндәй шарттар булмаған төпкөл районға ебәрәләр һәм бәләкәй генә эш хаҡы тәғәйенләйҙәр. Бындай мөнәсәбәт, тәбиғи, эшкә дәрт тә, дарман да тыуҙырмай. Егеттәр икеһе лә эш эҙләп ситкә сығып китергә мәжбүр булдылар. Тағы бер фекерем: йәштәр күпләп ситкә китмәһен өсөн эшсе абруйын күтәреү, уҡыусыларҙы мәктәп йылдарынан уҡ төрлө һөнәрҙәргә йәлеп итә башлау кәрәк. Артабан һөнәрселек-техник училищеларын, колледждарҙы тамамлаусылар араһынан иң көслөләрен һайлап, урындағы предприятиеларға эшкә урынлаштырыу мәсьәләһен ҡарарға кәрәк. Юғиһә, эш һорап килгән йәш белгестәргә: "Это ваши проблемы", - тип ултырған чиновниктар арҡаһында йәш кадрҙарға ҡытлыҡ килеп тыуа ла инде.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ИҒТИБАР!

# "ТАМЫР" САҠЫРА!

**"Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы был көндәрҙә 25 йыллыҡ юбилейын билдәләй.**

Күҙәтә барғанһығыҙҙыр, ошо айҡанлы тамырҙар бер ай дауамында бик күп ҡыҙыҡлы, күңелле, уникаль саралар ойошторҙо. Үҫмерҙәрҙең иҫендә ҡалған иң сағыу сараларҙың береһе - уҡ атыу буйынса "Уғатар" бәйгеһе булғандыр. "Тамыр"ҙа асыҡ ишектәр көнө лә юбилей йылына арналды. Ә бына 25-26 апрелдә "Башҡортостан" дәүләт концерт залында "Тамыр" үҙ тамашасыларын күркәм байрам концертында көтөп ҡала. Әлбиттә, бында тамырҙар кескәй дуҫтарына иҫтәлекле бүләктәр, мажаралы уйындар, бәйгеләр әҙерләй. Шулай уҡ тамашасыларҙы Телевидение һәм радио тапшырыуҙар алып барыусыларҙың милли ассоцияһынан, федераль каналдарҙан, Ҡаҙағстан, Татарстан, Саха-Яҡут, Удмурт балалар телеканалынан килгән ҡунаҡтар һәм кисәнең махсус ҡунағы "АБВГДейка" тапшырыуының художество етәксеһе, алыштырғыһыҙ алып барыусыһы Татьяна Черняева сәләмләйәсәк.



✓ ***Былтыр 148 мең кеше яҡшы тормош эҙләп, ситкә сығып китергә мәжбүр булған. 148 мең кеше республика өсөн эшкә һәләтле халыҡтың 8 процентын юғалтыуға тиң.***



ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ХАЛЫҠТЫҢ КИЛӘСӘГЕ...

## айыҡ кеше ҡулында!

***Закир ҒАРИПОВ, Учалы районы Наурыҙ ауыл биләмәһе башлығы:*** Үҙ халҡыма әйтер һүҙем күп, иң әрнеткәне, "йәшел йылан" ҡолона әйләнгәндәргә өндәшә торған һүҙҙәр. Һәр кем үҙ йүнен үҙе күреп, һәүетемсә генә йәшәй йәшәүгә, әммә ошо афәттән ҡотолоу юлдарын тапмай, ғәзиз ғүмерҙәре өҙөлгәндәр байтаҡ. Хөкүмәт тарафынан ҡабул ителгән закондар ярҙамында ғына кешеләрҙе эскелектән арындырып булмауын күреп торабыҙ. Был закондар теүәл үтәлә һымаҡ, әлбиттә, кешенең йәшенә һәм һатыу итеү ваҡытына ҡағылышлы ҡәтғи тыйыуҙар ҙа боҙолмай. Әммә барыбер табыш алыуҙы ғына уйлаған, кешенең һаулығына, ғаилә именлегенә, көнкүрешенә битараф бизнесмендар үҙҙәрен кешегә ағыу һатыуҙа ғәйепле итеп тоймай. Уға иң мөһиме - рөхсәт биргән ҡағыҙы булһын да, закон үтәлһен. Ә инде спиртлы эсемлектәр һатып алған кеше аҙаҡ өйөнә ҡайтып, ғауға ҡуптарамы, балаларын һәм ҡатынын йәберләйме, юл хәүефһеҙлеген боҙамы йәки башҡа берәй төрлө енәйәт эшләйме - былары алыпһатарҙың выжданын ғазапламай. Киләсәктә ошо мәсьәләне бер аҙға ғына булһа ла ыңғайға көйләү өсөн беҙ дәүләт закондарына ғына түгел, борондан килгән дини ҡанундарға ла нигеҙләнеп йәшәргә тейешбеҙ. Араҡыны эскән кеше генә түгел, араҡыны ҡойған, һатҡан, етештергән кеше лә берҙәй гонаһлы икәнен һәр кемебеҙ аңлаһаҡ ине. Спиртлы эсемлектәр һатып байығандар кешенең ауырыуынан, бәләһенән табыш алыусылар. Шуға ла улар гонаһлы һәм шуға ла бәхеттәре ташып тормай, дөрөҫөн әйткәндә.

Һәр беребеҙ туғандарыбыҙ өсөн генә түгел, күршебеҙ, ауылдашыбыҙ, танышыбыҙ өсөн дә яуаплылыҡ тойорға өйрәнһәк ине. Унан инде, үҙ ризалыҡтары менән ошо афәткә юлыҡҡан милләттәштәрҙең араҡы алып эсергә булған ихтыяжы, аҡсаһы, ваҡыты йәмғиәткә файҙалы эштәр башҡарыуға йүнәлтелһә, ниндәй шәп булыр ине. Мәҫәлән, бына беҙҙең Учалы районы Наурыҙ ауылы халҡы Өфөлә башҡорт халҡының йөҙөн билдәләгән "Урал батыр" эпосына бағышланған комплексты кисектермәй төҙөй башларға тигән тәҡдим менән БР Мәҙәниәт министрлығына, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетына һәм барлыҡ милләттәштәргә мөрәжәғәт итте. "Ил төкөрһә - күл була", ти халыҡ мәҡәле. Каруанһарайҙы төҙөгән ата-бабаларыбыҙҙан үрнәк алып, үҙ көсөбөҙ менән ошо халыҡ һәйкәлен төҙөһәк, бик тә яҡшы булыр ине. Киләсәк быуындар өсөн эшләнгән бындай масштаблы проекттарҙы тормошҡа ашырыуға битараф булмаған милләттәштәр генә ҡушылаһағы көн кеүек асыҡ. Ә кемдәр битараф түгел һуң? Әлбиттә, айыҡ тормош алып барған, фекерләгән, балаларының киләсәген ҡайғыртҡан кеше. Халҡыбыҙ мәнфәғәтендә эштәр башҡарылыуын теләһәк, тәү сиратта айыҡ булайыҡ, бер-беребеҙҙе "йәшел йылан" ҡолона әүерелдермәйек.

**Камила ҒӘЛИЕВА яҙып алды.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## *Башҡортостан халҡы тыуған ерен ташлап, күпләп ситкә китә. Был айырыуса һуңғы йылдарҙа нык күҙәтелә. Уның сәбәптәрен һәм мәсьәләне хәл итеү юлдарын нимә күрәһегеҙ?*

**(Башы 1-се биттә).**

***Ринат МАМАЕВ, "Йәнле ауыл" үҫеш проекты авторы:*** Республикабыҙ халҡының күпләп ситкә китеү сәбәбе ниндәйҙер кимәлдә тарихи аспектҡа ла нигеҙләнгән, тип әйтер инем. Бындай күренештәр элек тә булған. Әле лә йәштәр күбеһенсә ата-әсәһе, туғандары кәңәшен тотоп сығып китә, сөнки урында нимәлер эшләр, аҡса табыр өсөн күнегелгән ҡалыптарҙан арынырға, ауырлыҡтар кисерергә, тир түгергә тура киләсәк. Бер һүҙ менән әйткәндә, уңышһыҙлыҡ ҡурҡынысы өркөтә уларҙы. Ә ситкә китһәң, ҡушылғанды ғына эшләп тик йөрөйһөң, Себерҙә, мәҫәлән. Бында бөтәһе лә әҙер: тейешле эш шарттары булдырылған, ашаталар, йәшәр урын бар - йылдан ялға тиклем сыҙап эшләргә генә кәрәк. Шул уҡ ваҡытта республикабыҙ райондарында уңышлы ғына эшләп алып киткән ауыл эшҡыуарҙары барлығын да онотмайыҡ. Улар араһында ауылда тыуып үҫеп тә ҡалала эшләп йөрөгән ерәнән кире ауылға ҡайтып, эшҡыуарлыҡҡа тотоноп китеүселәр ҙә байтаҡ. Кемдер ваҡытында күреп алды: ауылда ерҙәр иркен, колхоз-совхоздан ҡалған биналар буш тора, һөт эшкәртеү заводы, тирмән кеүек етештереү объекттары, мәҫәлән. Ә ниңә шуларҙы файҙаланмаҫҡа? Ниндәйҙер ҡаҙаныштарға өлгәшкән ауыл эшҡыуарҙары бөгөн ауыл хужалығы продукцияһы етештереү, эшкәртеү һәм сауҙа йүнәлешендә эшләй. Ләкин бөгөнгө ҡатмарлы заманда уларҙы ла төрлө проблемалар һағалай. Беҙҙең "Йәнле ауыл" проекты ауыл эшҡыуарҙарын ана шундай хәүеф-хәтәрҙән иҫкәртеү, ҡурсалау маҡсатын ҡуя ла инде. Беҙ бизнес башлап ебәрергә тейешле аҡсаһы булып та, эште ниҙән башларға белмәгәндәргә лә, аҡсаһы булмаһа ла, ниәтләнеп, тәүәккәлләргә баҙнат итмәгәндәргә ярҙамға киләбеҙ. Улар өсөн дә махсус программа төҙөлгән, инвесторҙар йәлеп итеү ҡаралған. Әлеге көндә Ейәнсура, Ҡариҙел, Көйөргәҙе район-ара эшҡыуарлыҡ хеҙмәттәшлеге үҙәктәре ойошторолдо. Улар БР Эшҡыуарлыҡ һәм туризм буйынса дәүләт комитеты башланғысы һәм финанс ярҙамы менән бойомға ашырылды. Сиратта - Асҡын, Тәтешле, Балтас, Баймаҡ райондары. Ғаиләһен, йорт-ерен ташлап, ситтәге "ағайҙарға" бил бөгөргә теләмәгән, ә үҙ ауылында үҙ эшен асып ебәреү дәрте менән янған илһөйәрҙәрҙе беҙҙең проект буйынса хеҙмәттәшлеккә саҡырабыҙ. Бөгөнгө ябайҙан булмаған иҡтисади шарттарҙа эшҡыуарлыҡ итеү ысулдарын бергәләп өйрәнәйек.

***Фирүзә ИШБИРҘИНА, хеҙмәт ветераны:*** Шундай замана етте: халайыҡтар үҙ илен ташлап, тырымтырағай ҡаса башланы. Кемеһе - Себер китә, кемеһе - тура Мәскәүгә, кемеһе Питер юллана. Ҡаҙан, Силәбе, Екатеринбург, Төмән һәм башҡа шундай эре ҡалаларға барып урынлашыусылар ҙа байтаҡ икән. Шуныһы борсоуға һала: ситкә китеүсе ерҙәштәребеҙ һаны йылдан-йыл арта ғына бара. Сәбәбе бер генә - республиканың иҡтисади үҫеш темптары ҡырҡа түбәнәйеүе арҡаһында тормош хәленең насарайыуы, эш хаҡының түбән булыуы. Ошо сәбәпле Башҡортостан буйынса миграция кимәле күрше төбәктәрҙәгенә ҡарағанда 1,5-2 тапҡырға юғарыраҡ. Былтыр, мәҫәлән, 148 мең кеше яҡшы тормош эҙләп, ситкә сығып китергә мәжбүр булған. Әйткәндәй, улар араһында юғары квалификациялы белгестәр һәм эшселәр ҙә байтаҡ икән. 148 мең кеше республика өсөн эшкә һәләтле халыҡтың 8 процентын юғалтыуға тиң, тип билдәләнә. Был хәлде БР Башлығы Р. Хәмитов та рәсми кимәлдә танырға мәжбүр булды. Әйткәндәй, әле килтерелгән мәғлүмәттәр тап уның БР Иҡтисади үҫеш министрлығы коллегияһындағы сығышында яңғыраны ла инде. Айырыуса ауылдарҙа хөкөм һөргән эшһеҙлек ҡотолғоһоҙ күренешкә әүерелде. Республика етәкселеге бындай хәлдән ҡотолоу юлын крәҫтиән һәм фермер хужалыҡтарын берләштереүҙә, йәғни кооперация юлында күрә. "Эксперт-Урал" журналы хәбәрсеһе менән әңгәмәһендә БР Башлығы Р. Хәмитов ошо хаҡта ентекләп һөйләй. Европа хәҙер акционер һәм яуаплылығы сикләнгән йәмғиәттәрҙән баш тартып, яңы йүнәлешкә - уртаҡ милекселек - халыҡ предприятиеларына, кооперация формаһына күсә, ти ул. Әлеге ваҡытта 200 меңләп кеше вахта ысулы менән Себерҙә эшләй. Күпселеге - юғары квалификациялы механизатор, тракторсы, электрик һ.б.шундай һөнәр эйәләре. Ә бит улар үҙебеҙҙә эшләргә лә риза. Себерҙә, әйтәйек, бер айҙа 50 мең эш хаҡы ала икән, уның ҡарауы, бер ай өйөндә ял итеп, эшләмәй ята. Үҙебеҙҙә ай һайын 20-25 мең алып эшләһәләр ҙә был барыбер Себерҙә алған суммаға тиңләшә. Вахта менән эшләүселәрҙе Башҡортостан хеҙмәт баҙарына, республика иҡтисадына ҡайтарыу юлдары эҙләнә, тип әйтелә әңгәмәлә, тик был йәһәттән нимәләр күҙҙә тотолоуы, ниндәй эш урындары булдырыласағы хаҡында асыҡ бәйән ителмәй. Йәштәребеҙҙең дә тыуған ерәнән биҙеүе, бәхет эҙләп, сит-ят тарафтарға күпләп китеүе менән килешеп булмай. Уҡыуҙы тамамлап ҡайтҡандары өсөн эш булмауы ғына сәбәп түгелдер, тием быға. Дөрөҫөн әйткәндә, һуңғы йылдарҙағы оптималләштереү эҙемтәһе мәғариф учреждениелары нигеҙен дә ярайһы ҡаҡшатты. Икенсенән, төбәк уҡыу йорттарында белем биреү кимәленең Мәскәү, Санкт-Петербург вуздары программалары һәм йүнәлештәре сифатынан күпкә ҡалышыуы. Әлбиттә, балалар ҙа, уларҙың ата-әсәләре лә ҡайҙа яҡшыраҡ - шул вариантты эҙләй һәм үҙҙәре теләгән уҡыу йортонда белем алырға хоҡуҡлы. Ә инде уларҙың ҡайтыу-ҡайтмау мәсьәләһе әлеге лә баяғы бер нәмәгә - республиканың үҫеш кимәленә бәйле.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА яҙып алды.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтайҙа БР Башлығы Рөстәм Хәмитов республика Хөкүмәтенең 2016 йылдағы эш һөҙөмтәләре тураһында отчет тәҡдим итте. Билдәләнеүенсә, төп макроиҡтисади күрһәткестәрҙең ыңғай динамикаһын, финанс тотороҡлоғон нығытыуҙы, бөтә социаль йөкләмәләрҙе үтәүҙе уҙған йылдың төп ҡаҙанышы тип атаны. 2016 йыл йомғаҡтары буйынса, сәнәғәт етештереүе күләме 2,6 процентҡа артҡан, ауыл хужалығында үҫеш - 1% самаһы, төп капиталға инвестициялар индексы 104,2 процент тәшкил иткән (ошо күрһәткес буйынса республика Волга буйы федераль округында алдынғылыҡты яуланы).

✓БР Башлығы Рөстәм Хәмитов Мәскәүҙә Рәсәй Федераль Йыйылышының Федерация Советында уҙған Рәсәй-Ҡытай дуҫлығы йәмғиәте вәкилдәре менән осрашыуҙа сығыш яһаны. Башҡортостан Ҡытай Халыҡ Республикаһының дүрт провинцияһы (Хэйлунцзян, Ляонин, Цзянси, Аньхой) һәм Чунцин ҡалаһы менән килешеү төҙөнө, 2016 йылда республика менән Ҡытай араһындағы тышҡы сауҙа әйләнеше күләме 396,8 миллион доллар тәшкил итте, быйыл Башҡортостанда I Рәсәй-Ҡытай нейрохирургтар конгресы уҙа, тип хәбәр итте төбәк етәксеһе.

✓Өфө ҡала Советының алты депутаты "Йыл меценаты" исеменә лайыҡ булды. Улар - Филүс Ишбулатов һәм Анатолий Горячев, Юлиә Романчева һәм Артур Хажиғәлиев, Иосиф Марач һәм Андрей Носков. Йәмғеһе ҡалалағы 25 шәфҡәт күрһәтеүсе наградалар менән баһаланды. Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов иҫтәлекле билдәләр һәм дипломдар тапшырҙы.

✓Өфө ҡала хакимиәте башлығы Ирек Ялалов Мәскәү ҡалаһында үткән "Милләт сәләмәтлеге - Рәсәйҙең үҫеш нигеҙе" XI Бөтә Рәсәй форумы сиктәрендә ойошторолған "Милләт сәләмәтлеге факторы булараҡ уңайлы ҡала мөхите" тип аталған түңәрәк ҡор эшендә ҡатнашты. Ирек Ишмөхәмәт улы сарала "Рәсәйҙең иң йәшел миллионер ҡалаһы" докладына менән сығыш яһап, ҡаланы йәшелләндереү буйынса муниципалитетта тупланған тәжрибә менән уртаҡлашты.

✓Башҡортостандың Мәҙәниәт министрлығы ҡарамағындағы Республика халыҡ ижады үҙәгендә яңы етәксе менән таныштырҙылар. Хәҙер генераль директор вазифаһын Артур Айҙар улы Әлибәков башҡара. Ул Өфө ҡалаһы Киров районы хакимиәтенең Физик культура һәм спорт комитеты рәйесе булып эшләне.

✓ *Алдағы йылдарҙа илдә минималь эш хаҡын эшләүсенең йәшәү минимумы кимәленә еткереү күҙаллана. Дмитрий Медведев әйтеүенсә, минималь эш хаҡын һәм йәшәү минимумын тигеҙләү өсөн "бөтә мөмкинлектәр ҙә бар".*



*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

**Был донъялағы ҡатмарлы тормошобоҙ шулай ҡоролған: кемебеҙ менән булһа ла, әленән-әле төрлө хәлдәр булып тора. Һәр кешенең ғүмерен уңыштар һәм уңышһыҙлыҡтар оҙатып бара. Бизмәнгә һалып үлсәү мөмкин булған хәлдә, уларҙың сағыштырмаһы, ысынында, типә-тиң генә булыр ине. Сөнки Аллаһы Тәғәлә беҙҙең өсөн ваҡытлыса биргән ошо ғүмеребеҙҙә һис бер ғәҙелһеҙлек юҡ. Тик һәр әҙәм балаһы бар нәмәне фәҡәт үҙ үлсәме менән генә үлсәп, үҙ күҙлегенән сығып баһалай.**

# ЙӨЙҺӨҘ ЕРҘӘ...

## йөй эҙләү кәрәкме?



Һәр кемдең үҙ күлдәге үҙенә яҡыныраҡ, тигән әйтем дә йөрөй халыҡта. Шуның өсөн дә беҙ үҙебеҙгә Раббыбыҙ тарафынан бирелгән һанһыҙ ниғмәттәрҙе күпселек ваҡытта һиҙмәйбеҙ, күрмәйбеҙ, хатта күрмәмешкә һалышабыҙ. Үҙебеҙгә бирелгән ғүмеребеҙ, һаулығыбыҙ, балаларыбыҙ, яҡындарыбыҙ, эшебеҙ, дәрәжәләребеҙ, йортобоҙ, малмөлкәтебеҙ һәм башҡа бихисап байлығыбыҙ өсөн Уға шөкөр итеп, зекерҙәр әйтеп йәшәргә һәр саҡ онотабыҙ, шуның менән үҙебеҙгә үҙебеҙ золом (ғәҙелһеҙлек) ҡылабыҙ. Әммә, ниндәйҙер берәй юғалтыу кисерһәк, уның беҙгә ебәрелгән һынау икәнлеген дә күптәребеҙ танымай, шунлыҡтан, быны ифрат та ауыр кисерәбеҙ. Ул ғына ла түгел, берәй бәлә-ҡаза килһә, шунда уҡ "Кем быға ғәйепле?" тигән һорауға яуап эҙләй башлайбыҙ. "Бәлә-үн" һүҙе ғәрәпсәнән урыҫ теленә "испытание, беда", тип тәржемәләнә. Башҡа күп һүҙҙәр кеүек, был төшөнсә беҙҙең телебеҙгә шул көйө күскән. "Тапһаң - ҡыуанма, юғалтһаң - ҡайғырма" тигән мәҡәл дә бар. Быныһы һәммәбеҙҙең тәҡдиребеҙгә ышанып, яҙмышыбыҙ менән ризалаша белеү зарурлығын аңлаталыр.

Теге йәки был күңелһеҙ хәл булған һайын ғәйепләне һәр осраҡта ла мотлаҡ эҙләү кәрәкме икән? Бәлки, улай уҡ түгелдер? Кемдәргәлер ошо һорау сәйер йәиһә ғәжәп тә тойолоуы мөмкин, әммә мин ошо хаҡта йыш ҡына уйланып алам. Кемдер берәү икенсе кешенең әйберен урлаған, йорт-ҡаралтыһын үртәгән, йәиһә уны ҡыйырһытҡан һымаҡ аныҡ осраҡтар бар кешегә лә аңлашыла. Мәҫәлән, ошо араларҙа телевидение экрандарында күрһәткән ваҡиға: шуҡ малайҙы автомобиль менән төкөтөп "тәрбиәләгән" оло йәштәге бизнесмен, әлбиттә, был малайҙың йәрәхәтләнеүендә аныҡ ғәйепле! Бында һис икеләнеү юҡ... Бының һымаҡ осраҡтарҙа ғәйепле кешене табып, уны, һис һүҙһеҙ, тейешенсә яуапҡа тарттырыу мотлаҡ. Һәм шулай итәләр ҙә: аныҡ эш боҙоусыны, йә иһә енәйәтсене тейешле органдар кисекмәҫтән эҙләп таба. Ә ниндәйҙер бүтән төрлө, һис кемдә лә ғәйепләп булмаҫлыҡ бәхетһеҙлек килә икән, бына шунда килеп тыуа ла инде, урыҫтар әйтмешләй, "кто крайний?" тигән һорау. Халҡыбыҙҙа бындай күренеште "йөйһөҙ ерҙән йөй эҙләү"гә лә оҡшаталар...

Киң мәғлүмәт сараларында ла йыш ҡына теге йәки был күңелһеҙ ваҡиғалар өсөн "ғәйеплеләр"ҙе эҙләү осраҡтарын ишетергә, йәиһә күрергә тура килә. Телетапшырыуҙарҙы даими ҡарап барған кеше булараҡ, бына шундай күренештәргә аҙым һайын тигәндәй юлығам. Ниндәйҙер берәй районда ғәҙәттәгенән иртәрәк яҙ килгәнлектән көндәр кинәт йылынып, ҡар шәпләп иреп китә икән, яҙғы ташҡын һыу өйҙәрҙе, кәртә-ҡураны баҫыуы мөмкин. Әммә шул бәлә-ҡазаны алдан күҙаллап, хәстәрлек саралары күрмәгән "крайний" кешенең мотлаҡ табылыуы миңә, мәҫәлән, әллә ни аңлашылып етмәй. Ҡар күп яуған райондарҙың береһендә, көрттө соҡоп уйнап, ишелеп төшкән ҡар аҫтында ҡалып фажиғәгә юлыҡҡан бала өсөн дә кемделер ғәйепләргә йыйыналар ине, буғай. Бала сағыбыҙҙа ундай "ҡар мәмерйәләр"ен беҙ ҙә яһарға ярата инек. Барлыҡ илдәге ҡар өйөмөн ҡайҙалыр ҡырға ташып сығарып бөтөү һәр саҡ мөмкин дә булмайҙыр шулай ҙа, тип уйлайым. Уның менән генә кемдеңдер башына төшәсәк бәлә-ҡазаны ла күҙаллап булмайҙыр. Был өлкәлә иң тәү нәүбәттә атаәсәнең үҙ балаларына иғтибарлыраҡ булыуы зарур, минеңсә. Тәнгә һөртә торған "Энәлек" төнәтмәһен эскән һикһәнләгән кеше үлемендә ғәйепләп, һатыусыларҙы яуапҡа тарттырыуҙар ҙа илде баҫып алған эскелек һәм шуның арҡала йыш булып торған үлем осраҡтарын бөтөрөүгә булышлыҡ итмәйәсәге көн кеүек асыҡ. Уның ҡарауы, нормаль һәм сифатлы араҡы эсеп тә, йыл да әллә күпме меңәрләгән кешеләр үлә. Тик был, ни өсөндөр, нормаль күренешкә һанала. Мин, мәҫәлән, "Принимать внутрь - опасно!" тип тышына ҙур итеп яҙылған шыйыҡсаны эсеп үлгән кешеләр үҙ үлемендә фәҡәт үҙҙәре генә ғәйепле, тигән инаныуҙамын.

Элегерәк, оҙайлы хеҙмәт иткән дәүеремдә шундай күренештәр беҙҙең әрмелә генә булалыр, тип уйлай инем. Илебеҙ тәненең айырып алып булмаҫлыҡ бер ағзаһы булған әрмебеҙҙә лә бындай миҫалдар етерлек. Хәрби табип булараҡ, һәр саҡ тиерлек шундай хәл-ваҡиғаларҙың шаһиты булыу ғына түгел, уларҙың эсендә лә йөрөргә тура килә ине. Әммә, "күп тапҡырҙар килеп бәрелгән кирбескә өйрәнә алмаған баш" һымаҡ, сирек быуат дауамында ла "ғәйепһеҙгә ғәйепләүҙәргә" һис күнегеп китә алманым һәм быға гелән тәнҡит күҙлегенән сығып ҡараным. Шундай осраҡтарҙың бер нисәүһе хәтерҙә ҡалған.

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**
**(Аҙағы бар).**

*ӘЙҘӘГЕҘ, УҠЫЙЫҠ!*



# ИҢ ТОҒРО ДУҪЫМ...

**"Берәү һорай: "Әйтсе, зинһар,**
**Яҡын дуҫың кем һинең?"**
**Мин уға: "Иң тоғро дуҫым,**
**Саф намыҫлы, йор юлдашым -**
**Һөйөклө китап", - тинем".**

Ҡустым балалар баҡсаһына йөрөгәндә ятлаған ошо шиғыр юлдары һаман да хәтеремдә. Ысынлап та, беҙҙең ғаилә ағзалары өсөн әлегәсә асылып бөтмәҫ сер булып торған, ҡатырға тышлы, төрлө күләмдәге, бөткөһөҙ хазина һандығы ғына түгел, иң яҡын тоғро дуҫ та ул китап. Инәйем бар ғүмерен мәктәптә китапханасы булып эшләгәнгәме, уҡырға ингәнгә тиклем балаларға тәғәйенләнгән барлыҡ китаптарҙы уҡып бөткәйнем инде. Һуңынан ҙурыраҡ китаптарға ла "теш үтә" башланы. Китаптан айырылып торған ваҡытта өйгә килгән бер ҡосаҡ гәзит-журналдарҙы, талашып, бер-беребеҙҙән йәшереп уҡый торғайныҡ. Бала саҡта һеңгән ғәҙәт бөгөнгәсә оҙата килә һәм китап йәки матбуғат баҫмаһы уҡылмаған көн бушҡа үткән кеүек. Шуға ла әҙиптәрҙең яңы сыҡҡан китаптарын алып уҡырға, йәш яҙыусыларҙың ижад емештәре менән танышып барырға тырышам. Заман технологияларының тормошобоҙға үтеп инеүе лә был процесты еңелләштерә: хәҙер яңы әҫәрҙәр ҙә, элеккеләре лә, хатта йәштәр өсөн "боронғо" кеүек күренгәндәре лә интернет селтәренә һалына бара. Ә инде үҙеңде үҫтереү буйынса ниндәй генә китаптар юҡ хәҙер! Табиптар аҙым һайын: "Дарыуҙарҙы ҡабул итер алдынан табип менән кәңәшләшегеҙ!" - тип тылҡып торған кеүек, китаптың да рухи аҙыҡ, күңел дауаһы, үҫеш баҫҡысы булырҙай файҙалыһын һайларға кәрәк. Шул ваҡытта ғына ул ысын мәғәнәһендә "һыуһынды" ҡандырасаҡ.

Әлбиттә, бәхеттең һәр кемгә тап килгән әҙер рецебы булмаған кеүек, кешегә китап, матбуғат баҫмаһы уҡыу ләззәтен аңлатып булмайҙыр ул. Ә минең өсөн китап - ғүмер буйы оҙатып килгән тоғро дуҫ та, йор юлдаш та. Был йәһәттән "Киске Өфө" гәзитендә донъя күргән яңы шиғырҙар шәлкемдәре, яңы әҫәрҙәр, ҡыҫҡа анонстар минең өсөн юл күрһәтеүсе булып тора. Инде ауҙым, инде тубыҡландым, тигәндә, Мәрйәм Бураҡаеваның гәзит биттәрендә донъя күргән "Киҫәкбикә"һе ялҡын уртаһынан өнһөҙ генә шелтәле ҡараш ташлаһа, Лариса Абдуллина, Зөлфиә Ханнановаларҙың шиғриәте ике фәрештәләй ике яҡтан терәк булып иңдәрен ҡуя. Ошо гәзит биттәрендә донъя күргән әҫәрҙәре аша яҙыусы Фәрзәнә Аҡбулатова, Иҙрис Ноғоманов, Бөрйән районы "Таң" гәзитендә эшләүсе Таңһылыу Баһауетдинованы бөтөнләй икенсе яҡтан астым, повесть-хикәйәләре шауҡымында оҙаҡ йөрөнөм, уларҙың һүрәтләүҙәре аша башҡорт теленең байлығына тағы бер ҡат һоҡланып, ошо телдә уҡый алыуым өсөн атай-әсәйемә рәхмәтле булһам, һүҙ энергетикаһы ҡеүәтен тойоп тетрәндем. Юҡҡа ғына, иң әүәл һүҙ булған, тимәйҙәр. Ә һүҙҙең көсө-ҡеүәте уны аңлағанда, уны урынлы файҙаланғанда ғына арта барыуын әҙиптәр яҡшы аңлай икәнен төшөндөм.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Республика халҡына башҡорт теленән региональ диктантты Башҡортостандың халыҡ артисы, "Башҡортостан" ДТРК-һы алып барыусыһы Рәсүл Ҡарабулатов уҡый. Сара шәмбе, 22 апрелдә Башҡорт дәүләт университетының төп корпусында (01-се һәм 02-се аудитория), Хоҡуҡ институтында (Достоевский урамы, 131), Идара итеү һәм эшҡыуарлыҡ хәүефһеҙлеге институтында (Губкин урамы, 10 Б), университеттың филиалдарында, баш ҡала һәм ауыл мәктәптәрендә ойоштороla.

✓Мәжит Ғафури исемендәге Башҡорт академия драма театрында Башҡортостан Республикаһы Башлығы гранты иҫәбенә уҙғарылған "Театр яҙы" IX республика фестивален асыу тантанаһы үтте. Алты көн дауамында Өфөнөң төрлө сәхнә майҙансыҡтарында милли драматургия әҫәрҙәре буйынса 15 спектакль күрһәтеләсәк (15-се биттә "Сәнғәт көндәлеге"н ҡарағыҙ).

✓Башҡортостанда урындағы башланғыстарға нигеҙләнгән йәмәғәт инфраструктураларын үҫтереү проекттарын ғәмәлгә ашырыу дауам итә. Урындағы башланғыстарға нигеҙләнгән проекттар граждандарҙың әүҙемлеге менән айырыла: кешеләр улар өсөн мөһим булған объектты төҙөкләндереү йәки йүнәтеү проектын тәҡдим итә һәм уның өсөн үҙ аҡсаларын һала. Өфөлә быға оҡшаш программаны тормошҡа ашырыу сиктәрендә баш ҡала депутаттары 31 проект тәҡдим итте.

✓2017 йылда запастағы граждандарҙы ике айға тиклем хәрби әҙерлек үтергә саҡыралар. Тейешле указға Рәсәй Президенты Владимир Путин ҡул ҡуйған.

✓Рәсәй Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев 1 июлдән хеҙмәт хаҡының минималь күләме 7,8 меңгә тиклем күтәрелеүе тураһында хәбәр итте. Алдағы йылдарҙа илдә минималь эш хаҡын эшләүсенең йәшәү минимумы кимәленә еткереү күҙаллана. Дмитрий Медведев әйтеүенсә, минималь эш хаҡын һәм йәшәү минимумын тигеҙләү өсөн "бөтә мөмкинлектәр ҙә бар".

✓Башҡортостан Хөкүмәте халыҡтың килем кимәлен арттырыу өсөн минималь хеҙмәт хаҡын йәшәү минимумы кимәленә этаплап еткереү йәһәтенән саралар комплексын ғәмәлгә ашырасаҡ. Был турала Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары алдында сығыш яһағанда хәбәр итте.

**"Башинформ"дан.**

✓ Аҙнаның һәр шишәмбеһендә Өфө хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәләр яңы форматта ойоштороласаҡ. Хәҙер уларҙы реаль ваҡыт режимында ҡарарға мөмкин.



ҠЫҪҠАСА

# БЕР СМЕНАЛА УҠЫУ ЯҠШЫРАҠ...

✓**Башҡортостанда мәктәптәрҙә ике сменала уҡытыуҙы бөтөрөү буйынса эш дауам итәсәк.** 2017 йылға маҡсат - бер сменалы мәктәптәрҙең һанын 90 процентҡа тиклем еткереү. Был хаҡта республика Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары алдында сығыш яһағанда белдерҙе. 2016 йыл йомғаҡтары буйынса, бер сменала белем алыусыларҙың һаны артҡан һәм 88 процент тәшкил иткән. Быныҡ өсөн республикала реконструкцияларҙ һәм яңы мәктәптәр төҙөү иҫәбенә 2424 урын булдырылған. Башҡортостанстаттың һуңғы мәғлүмәттәре буйынса, әле төбәктә 1375 дөйөм белем биреү ойошмаһы иҫәпләнә. Уларҙа 444,4 мең бала белем ала.

✓**Быйыл Башҡортостанда торлаҡ төҙөү өсөн аҡса туплау системаһын ҡулланып, торлаҡ төҙөлөшөн финанслау буйынса пилот проектында ҡатнашыусыларҙы льготалы кредитлау эше ойоштороласа.** "Аҡса йыйыу осоро тамамланды, һәм хәҙер алты процентлыҡ льготалы ставка буйынса кредит алырға мөмкин", - тине Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры Рөстәм Мәрҙәнов. Программа алты йыл буйына банкта аҡса йыйыуҙы һәм һуңынан 6-7 процентлыҡ ставка буйынса ипотека алыуҙы күҙ уңында тота. Әле республика халҡы ете меңдән ашыу ошондай вклад асҡан. Был Рәсәйҙә бындай проекттар буйынса абсолют рекорд. Ҡатнашыусыларҙың иҫәбендә тупланған аҡсаның дөйөм күләме 1,2 миллиард һум самаһы тәшкил итә.

✓**Аҙнаның һәр шишәмбеһендә Өфө хакимиәтендә үткән оператив кәңәшмәләр яңы форматта ойоштороласаҡ.** Хәҙер уларҙы реаль ваҡыт режимында ҡарарға мөмкин. Оперативкаларҙы онлайн-режимда уҙғарыу - "асыҡлыҡты арттырыуға сираттағы аҙым", тип һыҙыҡ өҫтөнә алдылар мэрияла. Тура трансляцияны теләгән һәр кем Facebook социаль селтәрендә ҡарай ала. Кәнәшмә иртәнге 9-сы яртыла башлана. Бынан тыш, киләсәктә оперативкаларҙы "Бәйләнештә" селтәрендә лә күрһәтергә ниәтләйҙәр. Әлеге мәлгә Өфө хакимиәтенең рәсми төркөмөнә 83 меңдән ашыу кеше яҙылған.

✓**Башҡортостандың Күп функциялы үҙәгендә Миграция үҙәге эш башланы.** Унда сит ил граждандары дәүләт хеҙмәттәре менән файҙалана ала. Үҙәк Өфө районының Чесноковка ҡасабаһында урынлашҡан. Миграция үҙәге республика биләмәһендә хеҙмәт эшмәкәрлеген тормошҡа ашырырға рөхсәт иткән патентты рәсмиләштереү өсөн документтар ҡабул итә. Әзербайжан, Тажикстан, Үзбәкстан, Украина, Молдова граждандарына эш өсөн патент алыу мөһим, тип хәбәр итте Иҡтисади үҫеш министрлығының матбуғат хеҙмәте. Патентҡа йәмәғәт тәртибен, административ хоҡуҡтарҙы боҙмаған, судҡа тарттырылмаған, Рәсәй биләмәһендә рәсми рәүештә көн күргән сит ил граждандары эйә була ала. Шулай уҡ уларҙың урыҫ телен һәм Рәсәй тарихын яҡшы белеүе, һау-сәләмәт булыуы зарур.

✓**6-8 июндә Өфөлә халыҡ-ара экологик форум, экологик марафон һәм II "Экология. Технологиялар. Йәшәйеш" махсуслаштырылған күргәҙмә ойоштороласа.** Башҡортостан Хөкүмәте тарафынан тейешле бойороҡҡа ҡул ҡуйылған, тип хәбәр итә Тәбиғәттән файҙаланыу һәм экология министрлығының матбуғат хеҙмәте. Ҡурсаулыҡ биләмәләрен үҫтереү форумдың төп темаһы буласаҡ. "Ҡурсаулыҡлы Рәсәй - һаҡлау һәм үҫтереү" тигән пленар ултырыш ошо йүнәлешкә арнала. Программала экологик туризмдың торошо һәм мөмкинлектәре, сәнәғәт һәм ҡаты коммуналь ҡалдыҡтар менән эш итеү, ҡалаларҙы экологик яҡтан үҫтереү, һыуҙың һәм һауаның сифаты буйынса түңәрәк өҫтәлдәр, панель дискуссиялары ҡаралған. Рәсәйҙең геофондар һәм геопарктар буйынса халыҡ-ара ЮНЕСКО программаһы комитеты ултырышын уҙғарыу форумдың әһәмиәтле сараларының береһе булмаҡсы.

КӨН АУАЗЫ

**Йыл һайын, ер ҡарҙан әрселеп, оҙон ҡыш буйына ҡар аҫтында йәшеренеп ятҡан сүп-сар күҙгә күренә башлау менән ил буйынса өмәләр ойошторолоуы - совет осоронан ҡалған матур күренештәрҙең береһе. Ул дәүерҙә хәҙер ыңғай яҡтан бик иҫкә алырға тырышмаһаҡ та (ә бит уның да матур йолалары, күренештәре булманы түгел, булды), яҙғы өмәләр генә иҫкә төшөрөп ҡуя. Ошо изге традицияны дауам итеп, 15 апрелдә, һауа торошо боҙолоп, ямғыр һибәләп тороуға ҡарамаҫтан, дөйөм ҡала өмәһенә Өфөлә 17 мең кеше сыҡты һәм урамдарҙы сүп-сарҙан таҙалау, ҡар ташлау, уны ҡаланан ситкә сығарыу, юлдарҙағы боҙҙарҙы ваҡлау менән мәшғүл булды.**

# ТАҘАРТҠАН УРЫНДА ТҮГЕЛ...

## сүпләмәгән урында таҙа



Райондарҙың мәғлүмәт-аналитика бүлектәре хәбәр итеүенсә, Киров районында был сарала предприятие һәм ойошмалар, коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре һәм студенттар ҡатнашһа, Калинин районында райондың Торлаҡ хужалығы һәм төҙөкләндереү буйынса муниципаль учреждение идаралығы һәм шәхси идара итеү компаниялары белгестәре лә әүҙемлек күрһәткән. Бында ҡар өйөмдәре таратылған һәм һыу ағыу ҡоролмалары таҙартылған. Октябрь районының сауҙа предприятиеларының 800 хеҙмәткәре үҙҙәренең ҡарамағындағы территорияны таҙалаған. Шулай уҡ коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре лә өмәнең уртаһында булған. Ленин районының эре һәм урта бизнесы, муниципаль һәм шәхси фирмалар, юғары уҡыу йорттары, колледждар, мәктәптәр, идара итеү компаниялары, торлаҡ-коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре, шәхси эшҡыуарҙар һәм үҙе йәшәгән территорияны таҙа, матур итеп күрергә теләүсе халыҡ та был көндә таҙалыҡ акцияһына ҡушылған. Дим районында иһә белем биреү учреждениелары территориялары, ихаталар, балалар һәм спорт майҙансыҡтары, скверҙар һәм парктар тәртипкә килтерелгән. Совет районында был эшкә торлаҡ-коммуналь хужалыҡ эшселәре сыҡҡан. Ғөмүмән, бында территорияны таҙартыу һәм йәшелләндереү эштәре 20 марттан алып барыла. Дөйөм алғанда, ҡала өмәһендә барлығы 10 мең квадрат метр урам-юл территорияһы, кварталдар араһындағы һәм ихата алдындағы 1,7 мең квадрат майҙан таҙартылған. Ҡаланан 2,6 мең кубометр сүп-сар сығарылған, 870 берәмектән ашыу техника йәлеп ителгән.

Көндәр йылыныу менән территорияларҙы санитар төҙөкләндереүҙең икенсе этабы: газондарҙы ҡаҙыу, ағастарҙың олонон аҡлау, үлән сабыу, сүп-сарҙы йыйыу башланасаҡ. Бынан тыш, тиҙҙән "Йәшә, урман" һәм "Еңеү урманы" акциялары сиктәрендә Непейцевский дендропаркында, Иван Якутов исемендәге паркта, Еңеүҙең 50 йыллығы исемендәге скверҙа һәм Салауат Юлаев исемендәге баҡсала ла өмәләр үтәсәк, унда ҡороған һәм хәүеф тыуҙырған ағастар бысыласаҡ, территория ҡоро-һарыҙан һәм эре сүп-сарҙан таҙартыласаҡ. Өфө быйыл да ҡала халҡының урмандарҙа үҙен тотоу тәртибе мәҙәниәтен күтәреүгә һәм экологик тәрбиә биреүгә йүнәлтелгән "Бөтә Рәсәй урман ултыртыу көнө" акцияһына ҡушылды. Бындай өмәләр "Кашкаҙан" һәм Нефтехимиктар мәҙәниәт һәм ял парктарында, Баландин бульварының Максим Рыльский урамында үтәсәк. Сираттағы өмә 22 апрелдә ойоштороласаҡ.

Әлбиттә, ҡышын ер өҫтөндәге бысраҡты тәбиғәт ап-аҡ ҡары менән ҡаплап, аҡлыҡҡа сорнап ҡуя. Әммә ҡояштың нурҙары сағыуланыу менән ҡар аҫтынан Кеше тигән бөйөк исемде күтәреп йөрөүселәрҙең ҡылыҡтары эҙемтәһе яйлап күренә башлай. Ирекһеҙҙән, Бәләкәй принцтың: "Иртән торғас, йыуынып, үҙеңде тәртипкә килтерәһең - шунда уҡ планетаңды ла тәртипкә килтер", - тигән һүҙҙәре иҫкә төшә. Юҡҡа ғына, таҙартҡан урында түгел, сүпләмәгән урында таҙа, тимәйҙәр. Йәмғиәтте үҙебеҙ йәшәгән территорияларҙы таҙартып түгел, ә бысратмай, ҡыйламай таҙа тоторға - экология мәҙәниәтенә өйрәтергә кәрәктер, моғайын. Үйлап ҡараһаң, тәртип һәр ҡайһыбыҙҙан һәм йәшәгән йортобоҙҙан, подъездыбыҙҙан, ихатабыҙҙан башлана. Бында Рус география йәмғиәте рәйесе Камил Йыһаншиндың матбуғат конференцияһында һөйләгән бер ваҡиғаны миҫал итеп килтерергә мөмкин: "Төҙөлөштә эшләгән бер эшсе, ял итергә булған, күрәһең, бордюрға ултырып, ҡулындағы һыу шешәһен аҫҡайны ғына, ҡапҡасы әллә ҡайҙа тәгәрәп китте. Егет һыуын эсерҙән алда, урынынан тороп, тәүҙә ҡапҡасты барып алып, кесәһенә һалып ҡуйҙы һәм ултырып, тәмләп кенә һыуын эсә башланы". Уның икенсе миҫалы ла экология мәҙәниәтенең сағыу бер өлгөһө булып тора. Экспедиция менән улар ниндәйҙер тау башына менә һәм юлдаштарының береһе, тәмәке сығарып, тарта башлай. Тартып туҡтағас, ул төпсөгөн ситкә ырғытмай, ә һүндереп, ҡағыҙға төрөп, кесәһенә һалып ҡуя. Аҡыллыға ишара был: һәр ҡайһыбыҙ тәртипте үҙебеҙҙән башлаһаҡ, планетабыҙ ҙа таҙа булыр. Бында Бәләкәй принцтың оло мәғәнә һалынған һүҙҙәрен дә онотторға ярамай.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Башҡортостанда яҙғы баҫыу эштәре башланды, тип хәбәр итә республиканың Ауыл хужалығы министрлығы. Әбйәлил хужалыҡтары - дым ҡаплатыу, Учалы һәм Саҡмағош райондары ужымды туҡландырыу эштәренә тотонған. Әбйәлил, Дүртөйлө, Ҡыйғы, Учалы, Саҡмағош райондарында - күп йыллыҡ үләндәрҙе тырматыу, Дүртөйлө, Кушнаренко, Мәләүез, Учалы һәм Саҡмағош райондарында уларҙы туҡландырыу башланған.

✓Рәсәйҙең Үҙәк һайлау комиссияһы Башҡортостандың Үҙәк һайлау комиссияһы ағзалары итеп тәғәйенләү өсөн хәл иткес тауышҡа эйә кандидатураларҙы билдәләне. Рәсәйҙең Үҙәк һайлау комиссияһы республика Башлығына хәҙерге рәйес Хәйҙәр Вәлиевты яңы составтағы төбәк комиссияһы ағзаһы итеп тәғәйенләргә, Дәүләт Йыйылышына иһә ғәмәлдәге составтағы комиссия секретары Марина Долматованы тәҡдим итте.

✓Башҡортостандың дүрт ҡалаһы илдең Төҙөлөш һәм торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министрлығы ойошторған "Рәсәйҙең иң төҙөк ҡала (ауыл) биләмәһе" тигән исемгә конкурс еңеүселәре иҫәбендә. Улар: Октябрьский, Стәрлетамаҡ, Туймазы һәм Өфө ҡалалары. Рәсәй субъекттарының баш ҡалалары араһында Рәсәй Хөкүмәтенең II дәрәжә дипломы Өфөгә тапшырылды.

✓Башҡортостандың гидрометеорология һәм тирә-яҡ мөхит мониторингы идаралығы мәғлүмәттәре буйынса, 21 апрелдә иртәнге сәғәт 8-гә Дуҫлыҡ монументы эргәһендә Ағиҙел йылғаһының кимәле 47 сантиметрға күтәрелеп, 480 сантиметр тәшкил иткән. Шакша яғында Ҡариҙел йылғаһының кимәле 421 сантиметрға (+48 см) хәтлем артҡан. Бочкарев ауылы тирәһендә Дим йылғаһының кимәле 454 сантиметрға (+5 см) еткән.Өфө йылғалары киләһе аҙна башында һыу баҫа торған ергә сығасаҡ, тип көтә белгестәр. 2017 йылда ташҡын осороноң иң юғары кимәле май башында күҙаллана.

✓Бөгөн "Библиотөн" Бөтә Рәсәй акцияһы Башҡортостандың барлыҡ район һәм ҡалаларында уҙғарыла. Ойоштороусылар хәбәр итеүенсә, республиканың бөтә 1584 китапханаһы ла уҡыусылар өсөн бай программа әҙерләгән. Уларҙың күптәре Экология йылына арналған. Саралар киске сәғәт 6-ла башлана. Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге Милли китапхананың программаһы "Ҡыҙыл китап" биттәренән" девизы аҫтында уҙғарыла.

***✓ Хәйбуллала етештерелгән ҡымыҙ һәм ҡороттоң даны сит төбәктәргә лә таралған. Байғусҡар ауылының уңған килендәре баҙарҙа һатҡан ҡорот һәм майҙарын хатта Ырымбур өлкәһенән эҙләп килеп һатып алалар.***



ИЛ-ЙОРТ ХӘБӘРЕ

# ҮҘ РИЗЫҒЫҢ - ҮҘӘКТӘ

**Һәр кешенең һаулығы уның ниндәй аҙыҡтар менән туҡланыуына бәйләнгән. Ғалимдар иҫбатлауынса, тәүтормош осоронда һимеҙ кешеләр бөтөнләй булмаған. Был аңлашыла: улар йәшәгән дәүерҙә консерванттар, ароматизаторҙар ҡушылған ризыҡтар, газлы эсемлектәр, кондитер изделиелары булмаған бит инде. Кеше һунарҙа нимә таба, шуның менән көн иткән һәм, ғөмүмән, тәбиғәттең айырылғыһыҙ бер өлөшө булып йәшәгән.**









Беҙ бөгөн тәбиғәттән шул тиклем ситләшкәнбеҙ, хатта туҡланған ризыҡтарыбыҙ ҙа тәбиғи түгел, ә яһалма була бара. Шул арҡала аллергия, шәкәр диабеты, онкология һымаҡ замана сирҙәренең тамыр йәйеүен бик үк аңлап, ул хаҡта борсолоп та бармайбыҙ, ахыры. Ә борсолорға кәрәк ине. Һис юғы, яһалма ризыҡтарҙан йәш быуынды һаҡлау хәстәре күрелергә тейеш. Байғусҡар ауыл китапханаһы ошо проблемаларҙы күҙ уңында тотоп, иғлан ителгән "Эко-мин! Экобеҙ! Эко-донъя!" әҙәби-экологик конкурс сиктәрендә "Туҡланыу ризыҡтары: ыңғай һәм кире ҡараш" исемле сара үткәрҙе. Китапханасы Резедә Ҡолсонбаева консервантлы ризыҡтарҙың зыянын иҫбатлап, кока-кола эсемлеге менән тәжрибә эшләп күрһәтте һәм магазин кәштәләрендәге сағыу биҙәкле аҙыҡ-түлекте тышындағы яҙыуҙы ентекләп тикшергәндән һуң ғына һатып алырға кәңәш итте. "Кешелектең йәшәү тамырына ҡулдарыңды һуҙма, химия!" исемле күргәҙмәлә тап ошондай һаулыҡҡа кире йоғонто яһаған аҙыҡтар урын алғайны. Ә "Һөттә - һаулыҡ, майҙа - бәрәкәт, иттә - ҡеүәт" исемле күргәҙмәгә иһә тотош ҡына үҙебеҙҙең башҡорт милли ризыҡтары - сәк-сәк, ҡабартма, өшә, көлгә күмеп бешерелгән картуф, көлсә, талҡан, айран, буҙа, кипкән емеш-еләк, төрлө-төрлө емеш-еләк ҡағы, һөҙмә, ҡороттоң бер нисә төрө, эремсектәр, ҡаҡланған ит, ҡаҙы, тултырма, хатта ҡомалаҡ әсеткеһе лә ҡуйылғайны. Тамашасыларға талҡан эшләү, ҡымыҙ бешеү, ярма төйөү, ҡымыҙ һәм күбек май бешеү, һағыҙ ҡайнатыу ысулдары буйынса оҫталыҡ дәрестәре лә күрһәтелде.

Китапханасының Хәйбуллала етештерелгән иттең үҙенсәлеге тураһында һөйләгәндәре бигерәк тә фәһемле булғандыр. Ҡояш энергияһы менән байытылған дала ҡылғанын һәм әремен утлаған малдың ите ашап туйғыһыҙ татлы һәм һутлы була. Шуға күрә Хәйбуллала етештерелгән итте бренд кимәленә күтәрергә лә мөмкин. Ғөмүмән, Хәйбуллала етештерелгән ҡымыҙ һәм ҡороттоң даны сит төбәктәргә лә таралған. Байғусҡар ауылының уңған килендәре баҙарҙа һатҡан ҡорот һәм майҙарын хатта Ырымбур өлкәһенән эҙләп килеп һатып алыуҙары ошо турала һөйләй.

Байрам һуңында тамашасыларға "Ата-бабамдың аш-һыуы хазинаға торошло" исемле күргәҙмәгә ҡуйылған китаптарҙы алып уҡырға тәҡдим ителде.

**Рәмзиә ҠЫУАНДЫҠОВА.**
**Хәйбулла районы**
**Байғусҡар ауылы.**

БАШ ҠАЛАМ

# ДИМДӘР ЙОНСОМАНЫ...




**Быйылғы ҡыш халыҡтың да, етәкселектең дә түҙемлеген һынау миҙгеле булғандыр, моғайын. Ҡарҙан таҙартып өлгөрә алмай аптыранылар бит Өфөнө.**

Ә бына Дим биҫтәһендә ул ҡәҙәре көрткә батып йонсоманы халыҡ. Ни ғәжәптер, әммә ҡаланың үҙгәндә хасил булған ҡар тауҙарының бында эҙе-еҫе лә булманы, тау-тау көрттәр һалынманы, ҡар ваҡытында таҙартылды. Ҡаланың үҙәгендә ихаталар араһында һаман да ҡалын ҡар ҡатламдары ятһа, Димдә күптән инде ҡар юҡ. Коммуналь хужалыҡтың уңған хеҙмәткәрҙәре урамдарҙы ялтыратып һеперең ҡуя. Ихаталар ҙа һәр ваҡыт тәртиптә. Ағастар ултыртылһа, улар рәшәткәләнеп алына. Ҡышҡылыҡҡа үҫентеләрҙе ҡар-бурандан, ел-дауылдан һаҡлап, көпләп тә ҡуялар. Тәүге ваҡыттарҙа ҡыш көнө машина ҡуйып, үҫеп кенә килгән ағастарҙы имгәтеп бөтөрәләр ине. Хәҙер улар кәртәләнгәс, ундай ҡурҡыныс янамай. Тиҙҙән районыбыҙ гөл-сәскәгә лә күмелер.

Ҡыҫҡаһы, районда тәртип бар икән, тимәк, етәксе лә бар. Моғайын да был Димдә күберәк йорттар төҙөлөүе менән дә аңлатылалыр. Сөнки һәр кем уңайлы, таҙа, ошо ерҙә йәшәгән халыҡ тураһында хәстәрлек күрелгән урынды һайларға тырыша. Был йәһәттән, Дим районы халҡы бәхетле, тип әйтергә генә ҡала.

**Азалия МИРЗАЕВА.**

ҺОРАУ - ЯУАП



# КҮРШЕЛӘРҘЕ КӨЙЛӘЙЕМ...

**"Бер бүлмәле фатир һатып алдыҡ. Дөйөм коридор буйынса күршеләрҙең милкендә 4 бүлмәле фатир. Ошонан сығып, улар коридорҙың бер өлөшөн кәртәләп алып, хатта хосусилаштырып ҡуйғандар. Улар ошолай эшләргә хаҡлымы? Әгәр ҙә судҡа бирһәк, еңеп сығыу мөмкинлеге бармы?"**

- Күп фатирлы йорттарҙағы баҫҡыс биләмәләре дөйөм милек һанала. Күршеләрегеҙҙең был аҙымы РФ Торлаҡ кодексының 36-сы статьяһына ҡаршы килә. Шулай уҡ закон тарафынан баҫҡыстар араһындағы майҙансыҡтарҙа һәм этаж араларындағы коридорҙа келәт, тамбур һәм башҡа өҫтәмә бүлмәләр эшләү ҡәтғи тыйыла.

Судҡа ҡәҙәр идара итеү компанияһына яҙма ғариза тапшырығыҙ. Нәҡ улар дөйөм милек менән идара итеү тәртибен көйләргә бурыслы һәм күршегеҙҙән законһыҙ рәүештә ҡуйылған бүлмәне емертеүҙе сараһын күререгә тейеш. Әгәр ҙә идара итеү компанияһы ғаризағыҙҙы инҡар итһә, торлаҡ инспекцияһына мөрәжәғәт итегеҙ. Ялыу ҡағыҙында күршегеҙҙең хоҡуғыҙҙы боҙоуын ғына түгел, ә идара итеү компанияһының ғаризағыҙ буйынса бер нәмә лә эшләмәүен күрһәтегеҙ. Күп осраҡта торлаҡ инспекцияһы бындай мәсьәләләрҙе хәл итә. Ләкин был ысул да ярҙам итмәһә, судҡа мөрәжәғәт итеү генә ыңғай һөҙөмтәләргә килтерәсәк.

Хосусилаштырыуға килгәндә, һеҙгә яңылыш мәғлүмәт биргәндәрҙер, моғайын. Законға ярашлы, дөйөм коридорҙы бер нисек тә хосусилаштырып булмай.

# ИКЕ УРЫНДА ЭШЛӘГӘНДӘ

**"Төп эш урынымдан тыш, икенсе ойошмала ла хеҙмәт итәм. Сирләп киттем. Ауырығанлыҡ буйынса аҡсаны ике ойошмала ла түләргә тейештәрме, әллә тик төп эш урынына ғына тейешле ҡағыҙҙы алып барырға кәрәкме?"**

- РФ "Ваҡытлыса эшкә яраҡһыҙлыҡ һәм әсәлек менән бәйле осраҡта мотлаҡ социаль страховкалау тураһындағы" законның 13-сө статьяһына (2-се бүлек) ярашлы, әгәр ҙә ике эш урынында ла 2 йылдан ашыу эшләһәгеҙ, ауырыған өсөн түләү ике ойошмала ла башҡарыла. Бының өсөн дауалаусы табиптан ике дана бюллетень ҡағыҙы яҙҙырып алырға кәрәк. Икенсе хеҙмәт урынығыҙға бирелгән ауырыу тураһындағы ҡағыҙҙа мотлаҡ рәүештә "Өҫтәмә эш урынына" тигән билдә ҡуйылырға тейеш. Ләкин ике эш урынығыҙҙың береһендә (йәки икеһендә лә) эш стажығыҙ 2 йылдан кәм икән, ауырыу хаҡында ҡағыҙҙа бер генә ерҙә түләнәсәк. Уны ҡайһы хеҙмәт урынығыҙҙан түләтеүҙе үҙегеҙ хәл итәһегеҙ. Тәбиғи, ауырығанлыҡ ҡағыҙын эш хаҡы күберәк булған хеҙмәт урынына алып барыу отошлораҡ буласаҡ.

**Гөлназ МАНАПОВА әҙерләне.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Сәс ҡойолоу

❖ Пеләшләнеү - ир-егеттәргә генә хас күренеш түгел, ул ҡатын-ҡыҙҙарҙа ла осрауы мөмкин. Бындай күңелһеҙлеккә тарығанһығыҙ икән, сәс ҡойолоуҙы түбәндәгесә дауалап ҡарағыҙ. 1 балғалаҡ коньяк, 2-шәр ҡалаҡ яңы һығылған һуған һуты, дегәнәк төнәтмәһен (1 ҡалаҡ ваҡлап туралған дегәнәк тамырын 1 стакан һыуҙа ярты сәғәт ҡайнатырға һәм һөҙөргә) ҡушып болғатырға, баш тиреһенә һөртөргә һәм таҫтамал менән урап ҡуйырға. 2 сәғәттән йыуырға. Сәс ҡойолоу туҡтағансы аҙна һайын эшләргә.

## Шифалы сәй

❖ 1-әр ҡалаҡ мәтрүшкә, һары мәтрүшкә, бөтнөк алып, уларҙы болғатырға. 1 ҡалаҡ үлән ҡатнашмаһына 1 литр ҡайнар һыу ҡояйыҙ, 15-20 минут төнәтәбеҙ. Был сәйҙе даими эсергә кәрәк, шул саҡта уның шифаһын да тойорһоғоҙ. Ул нервыларҙы тынысландыра, баш мейеһе эшмәкәрлеге яҡшыра, эшкә һәләтлелек күтәрелә. Шулай уҡ инсульт һәм инфаркт хәүефе лә түбәнәйә.

## Панкреатит

❖ Өй шарттарында ашҡаҙан аҫты биҙҙәрен дауаларға мөмкин. 1 балғалаҡ укроп орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. 4 өлөшкә бүлеп эсергә.

❖ 1 ҡалаҡ әрем үләненә 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 45 минут төнәтергә, һөҙөргә. Ашарҙан 15 минут алда көнөнә 3 мәртәбә 1-3-әр ҡалаҡ эсергә. Ашҡаҙан аҫты биҙҙәре һәм үт сығарыу юлдары хроник сирҙәре мәлендә эсергә кәңәш ителә, шулай уҡ ауыртыныуҙар бөтә, аппетит яҡшыра, эсәк эшмәкәрлеге яҡшыра.

❖ Һолоно таҙартып, йыуып, йылы урынға ҡуйырға. Икенсе көнөнә һоло үҫә башлаясаҡ, йыуып, киптереп, ҡаһүә тартҡыста тартырға. Килеп сыҡҡан һоло онон һыуыҡ һыу менән изергә, өҫтөнә ҡайнар һыу ҡойорға һәм 1-2 минут ҡайнатырға. Уттан алып, 20 минут төнәтергә, һөҙөргә һәм эсергә. Һоло кеҫәле һәр ваҡыт яңы ғына әҙерләнгән булырға тейеш.

**Айбикә ЯҠУПОВА.**

ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# МӨХӘММӘТ БӘЙҒӘМБӘР

## Боронғо ғәрәптәр тураһында ҡыҫҡаса белешмә

Күп ҡатынлылыҡ рөхсәт ителһә лә ғәрәптәрҙең байтағы, ярлы булғанлыҡтан, бер генә ҡатын менән йәшәгән. Ҡанун тарафынан ҡатын-ҡыҙ хоҡуғы сикләнһә лә, асылда иһә, ғаиләлә ҡатындар ул саҡлы уҡ хоҡуҡһыҙ булмаған. Сөнки ҡатын-ҡыҙ яҙмышына ир туғандары ла битараф булмаған. Шуның өсөн ир кеше ғәйепһеҙгә ҡатынын айырырға ниәтләһә, уның ир туғандары менән килеп сығасаҡ мөнәсәбәт хаҡында ла уйлана. Шуға күрә быйындай аҙым яһар алдынан өс тапҡыр уйлап эш итергә кәрәк булғандыр. Ғаиләлә ир бала тыуһа, ҡатын-әсәнең ғаиләлә лә, ырыуҙа ла абруйы ҡырҡа артҡан, сөнки ул буласаҡ хеҙмәткәрҙе, яугирҙы баға, тип баһаланған һәм әсә мәнфәғәттәре ҡурсаланған.

Хужалыҡта ҡол хеҙмәте әллә ни файҙаланылмаған. Ҡол хеҙмәте, нигеҙҙә, йорт эштәрендә ҡулланылған. Ҡол ҡатындың балалары ирекле һаналған һәм аҙаҡ ырыу ағзаһы булып киткән.

Ғәрәптәр, аллалар күп була, тип фекер йөрөткән. Һәр ырыу үҙ Аллаһы ҡушҡандарҙы башҡарыу яғында булған, шуның өсөн ырыу-ара берҙәмлек ныҡ булған. Күп аллалыҡ һәм һындарға табыныу Юғары көс барлығын таныуға ҡамасау итмәгән. Юғары Аллаһы хәниф атамаһы алған кешеләр генә ысын мәғәнәлә һанлаған. Хәнифтәр һынға табыныуҙы кире ҡаҡҡан, теге донъя барлығына ышанған, шуның өсөн изгелекле эшкә ынтылған һәм ырыуҙаштарының ихтирамын ҡаҙанған.

Ғәрәптәрҙең яҙмаһы Көньяҡ Ғәрәбстанда яңы эраға тиклем мең йыл самаһы элек башлана. Бай телле, төрлө үлсәмле шиғриәт ныҡ үҫешә. Ғәрәптәрҙең шиғырҙары һәм ҡобайырҙары ғәжәп һәйбәт була. Кешенең шиғриәткә һәләте иң юғары ҡаҙаныш тип иҫәпләнә. Шағир барлыҡ ырыуҙарҙа ла иң ҡәҙерле ҡунаҡ һәм ҡағылғыһыҙ шәхес булып һаналған. Ғәрәптәрҙең һүҙ оҫталығын да юғары баһалаған. Шуныһы ҡыҙыҡ, матди байлыҡ тыуҙырыуҙа бер ниндәй өлөштәре булмаһа ла, ғәрәптәр иҫ китмәле бай әҙәби тел тыуҙыра һәм шиғриәттә ғәжәп уңыштарға өлгәшә. Тел мәҙәниәте ғәрәптәрҙең шул замандарҙа уҡ юғары цивилизацияға өлгәшеүҙәрен дәлилләй. Ә социаль, матди һәм рухи яҡтан цивилизацияға өлгәшеүгә ерҙең уңдырышһыҙлығы, сүллек ҡамасаулаған, был әле лә шулай.

Әммә көсмә тормош алып барыу ғәрәптәр өсөн шәхси яҡтан азатлыҡ ҡына түгел, ә зиһен хеҙмәте һәм рухи тормош өсөн ваҡыт яғынан ғәжәп киң мөмкинлек булдырған. Күсмә тормош алып барған ғәрәптең дә, сауҙагәр ғәрәптең дә хеҙмәте бер төрлө генә эс бошорғос булмаған. Уларҙың хеҙмәте физик көскә ҡарағанда ижад һәм оҫталыҡты күберәк талап иткән. Шуның өсөндөр ҙә, яңы эраның тәүге быуаттарында аң кимәле үҫеше буйынса хәйерсе ғәрәп күршеләге ҡеүәтле империяларҙың вәкилдәренә ҡарағанда күпкә юғары торған. Ә һәрби оһолоҡтарының өҫтөнлөктәре тураһында әйтеп тораһы ла юҡ.

Шулай итеп, Мөхәммәт бәйғәмбәрҙең тормошо тураһында яҙыр алдынан ул саҡтағы ғәрәп тормошона күҙ һалдыҡ. Шуныһы иғтибарға лайыҡ: ғәрәптәр тураһында яҙылған был өлөштө һүҙмә-һүҙ тигәндәй башҡорттарға ла ҡайтарып була. Шундай уҡ юғары кимәлдәге шиғриәт, һүҙ оҫталығы, сәсәндәр абруйы, ижад маһирлығы, яугирлыҡ һәләте һәм башҡа һанап үтелгән байтаҡ сифаттар башҡорттарға ла хас.

(Дауамы бар).

МАЖАРАЛЫ ДОНЪЯ

# БҮРЕНӘН ҠУРҠҠАН...

## урманға бармай, тиһәләр ҙә

**Үҙ ғүмерендә урманда йәшәүсе йәнлектәр менән осрашмайынса ҡалған Бөрйән кешеһен, моғайын да, бармаҡ менән генә һанарлыҡтыр. Ҡайны берәүҙәр өлөшөнә хатта йыртҡыстар менән күҙмә-күҙ осрашырға ла тура килгеләй.**



"Шүлгәнташ" ҡурсаулығына эшкә урынлашҡас, яҙҙан көҙгәсә аҙнаһына өс тапҡыр фенологик маршрутҡа сығыу минен төп бурыстарымдың береһенә әйләнде. Ботаникалағы фенологик күҙәтеүҙәр - ул үҫемлектәрҙең үҫеш фаҙаһын сезон буйына билдәләп барып, аҙаҡ шул яҙмалар буйынса һығымталар яһау. Был яҙмалар "Тәбиғәт йылъяҙмаһы" ("Летопись природы") отчет-китабында айырым бүлек булараҡ теркәлеп бара. Барлыҡ ҡурсаулыҡтар ҙа ошо йылъяҙманы йыл һайын эшләп, тапшырырға бурыслы. Шулай итеп, үҙемсә бик кәрәкле эш башҡарып йөрөгән булам. Ямғыр ҙа, әсе ел дә, аяуһыҙ ҡыҙҙырыусы ҡояш та мине был бурысымдан азат итә алмай. Дәртләнеп, Ырғыҙлы-Ғәзелгәрәй юлынан алыҫ түгел урынлашҡан маршрутым буйынса йөрөй бирәм. Маршрутҡа күберәк Шүлгәнгә эш буйынса барыусы ҡурсаулыҡ машиналарына ултырып сығам. Мәрәкәсел шоферҙар һәр ваҡыттағыса: "Аңғарып йөрө, бында айыу төйәге!" - тиеп, уйынлы-ысынлы шомландырырға тырыша. Ә мин уларға: "Айыуҙар Бөрйән ҡыҙҙарына теймәй ул", - тип шаяртып яуаплайым. Шулай ҙа ҡурҡырға һәм һаҡланырға кәрәклеген иҫкәртеп, кире ҡайтҡан саҡта алып ҡайтырға һүҙ биреп, коллегаларым ары китә. Шулай итеп, эшләүемдең беренсе йылы һәүетемсә, һиҙелмәйсә генә үтеп тә китте.

Ә икенсе яҙға аяҡ баҫҡас ошондай бер ваҡиға булды. Маршруттың аҙаҡҡы майҙансығы юл буйында - Бала Туғай тип йөрөтөлгән урында. Эшемде тамамлағас, йәйәүләп ҡайтырға сығам: кире әйләнеп киләсәк ҡурсаулыҡ машинаһын көтөп ултырып торорға һис кенә лә түҙемлегем етмәй. Ҡайһы берҙә юлда мәрхәмәтле кешеләр ултыртып ала. Бер нисә тапҡыр юлдаш ағайҙар бер үҙемә йөрөмәҫкә кәңәш итте итеүгә. Баҡһаң, бында бер бүре йөрөй икән. Бүреләр ҡартайһа, өйөрөнән айырылып, яңғыҙ көн итергә мәжбүр була, тигәндәрен ишеткәнем бар, шундай мәхлүктәр, күрәһең. Ысынлап та, бер иртәлә ҡалын булып төшөлгән юл сайында бүре эҙен күрҙем. Артыҡ иҫем китмәй генә ҡүйын дәфтәремә эҙҙең ҙурлығын төшөрөп, үлсәмдәрен билдәләнем дә, юлымды ары дауам итем. Бесән ваҡыты. Майҙансыкта яҙмаларымды теркәп торам, юл буйы яғынан үтеп киткән трактор тауышы алыҫлашҡандан-алыҫлашты. Бер аҙ ваҡыт үткәс, юлға сығып, тауҙан төшә башланым. Боролоштан ҡаршыма ҙур ғына эт килә. Бесәнселәрҙең ҡарт, әммә тоғро эте хужаларын юллап китеп баралыр, тип уйлайым. Ғөмүмән, ҙур эттәрҙән мин бер аҙ шөрләйем. Арабыҙ 20 метр тирәһе ҡалды. Юҡ, был эт бигерәк эре ҡылана - күҙгә ҡараған да, боҙҙай һалҡын ҡараштарын алырға ла уйламай. Киҫкен хәл тыуа ҡалһа, унан һаҡланырлыҡ бар ҡоралым - ручка һәм блокнот. Юлда, исмаһам, берәй таяҡ-фәлән дә күренмәй, эреле-ваҡлы таштар ғына. Шуларҙың бәләкәсерәк бер нисәүһен алдым да, барлыҡ батырлығымды йыйып, этҡә ҡаршы барыуымды дауам иттем. Арабыҙ бер нисә метр ҡалғас, аптырап туҡтаным. Ул да туҡтаны. Берберебеҙгә ҡарашып торабыҙ. Эт күҙ ҡарашын да алмай, китмәй ҙә. Шул ваҡыт ҡасандыр әсәйем һөйләгән ваҡиға "ҡылт" итеп иҫемә килеп төштө...

Ғәзелгәрәй ауылында клуб мөдире һәм китапханасы итеп тәғәйенләнгән әсәйем бер ялында ауылына - Яңы Усманға ҡайтып килергә була. Ҡыҫҡа көнлө ҡыштың кислөй башлаған сағында ҡаршыһына килгән эт күрелә. Юлсыларҙан бер үҙем түгел икәнмен, тип уйлай. Ә эт күҙенә туп-тура ҡарап килеүен дауам итә. Аралар яҡынайып, икеһе лә туҡтап ҡалғас та эт ҡарашын алмай. Шул ваҡыт йәш ҡыҙ был хайуандың бүре икәненә төшөнә. Сетереклe хәл тыуғанда ваҡыт туҡтап ҡалғандай була бит. Күпме ваҡыт торғандарҙыр күҙгә-күҙ ҡарашып, әсәйем яҡында ятҡан ағас ботағын йәшен тиҙлегендә эләктереп алып, йыртҡысҡа киҙәнә. Әммә йыртҡыс урынынан ҡымшанмай тора бирә. Ни эшләптер, бер аҙ тора биргәс кенә, бүре ситкә һикереп, юлдан аҫҡа төшөп китә...

Өнһөҙ тоткон булып торғо ла килмәй, кемдер килеп сығыуы ла икеле. Ҡыҫҡыры фәтүәһеҙ, быйы хайуанды, киреһенсә, асыуландырыуы ла бар бит әле. Ҡурҡып та өлгөрмәнем, бәлки, ул саҡта уның ысынлап та йыртҡыс булыуына ышанып та етмәгәнмендер. Теге таштарымды ташлап, бәхетемде һынап ҡарарға булдым. Киҙәнеүем булды, бүре юл ситенән ағастар араһына ырғып, күҙҙән юғалды.

Белгестәр быйындай киҫкен осраҡта тыныслыҡ һаҡларға, ҡурҡмаҫҡа, боролмайынса ғына артҡа сигенеп, ағасҡа менергә кәңәш итә. Ҡасыу файҙаһыҙ, барыбер ҡыуып етәсәк, тағы ла шуныһы - һунар инстинктын ҡабыҙып ебәреүегеҙ бар. Йыртҡыстың ҡоторған булыу ихтималлығын да бер кем инҡар итмәй. Быйындай хайуан агрессив була.

Беҙҙең төбәктәге барлыҡ эре хайуандар менән дә осрашырға тура килде, тиһәң дә була. Айыу, ғәҙәттә, тауыш сығарып, биләмә хужаһы ул икәнен иҫкәртә. Балалы хайуандар ситкә китергә, күренмәҫкә тырыша. Әммә бүре генә араны бик яҡын ҡалдырырға баҙнат итә, һаҡһыҙ ҡылана, кешенән ҡурҡмай, тиған һығымтаға килдем. Бәлки, кемдер икенсе төрлөрәк уйлайҙыр?..

**Ләлә ХӘЙБУЛЛИНА,**
**"Шүлгәнташ" ҡурсаулығы хеҙмәткәре.**

ҺАБАҠТАР

# КҮТӘРЕЛЕҮ МӨҺИМ

Бер танышым бар. Мин уны, әллә судья булмаған, тип ҡыуанам. Ни өсөн тигәндә, ул әүәлерәк бер нисә тапҡыр: "Минме һуң инде ошонда ултырыр кеше, мин бит судья булырға тейеш инем. Атай-әсәйем, үҙҙәре уҡытыусы булғас, мине лә педагог итеп күрергә теләне", - тип әйткәне бар. Уны судья итеп күрергә теләмәүемдең сәбәбе шунда: танышым һәр ваҡыт кеше йәки ниндәй ҙә булһа күренеш, ваҡиға тураһында тиҡ кире имидж булдырыусан. Мәҫәлән, береһе хаҡлы ялға сығып, мәҙрәсәгә уҡырға инһә, уразa тотһа, намаҙ уҡыһа, ул был ҡатындың ҡасандыр булған йәки булмаған элекке гонаһтары тураһында иҫенә төшөрә. Береһе таҡыя кейеп, йәмәғәт намаҙына йөрөгәнен ишетһә: "Комған тотоп йөрөүең менәнме, күңелең бысраҡ булғас..." - тип әрләй. Кемдендер улы өйләнеп, матур итеп туй үткәрһә, егеттең бәләкәй сағындағы шуклыҡтарын иҫкә төшөрә, ямаплай, ғәйепләй.

Судья булһа, моғайын да, береһенә лә мәрхәмәтлек күрһәтмәҫ ине. Иң ҡаты хөкөм яҙаһын бирер ине һымаҡ. Мин-минлеге, тәкәбберлеге шулай итә уны. Кешенең нисек түбәнселеккә төшөүенә түгел, ә, киреһенсә, уның йығылғандан һуң күтәрелеүенә ҡарарға кәрәк тә бит...

Икенсе бер танышымды, киреһенсә, адвокат итеп күргем килер ине. Ни өсөн икәнлегеен аңлап тораһығыҙҙыр. Эйе, ул бөтәһен дә яҡлай. Иң ҡурҡыныс енәйәтсене лә суд барышында ғәйепһеҙгә сығарып ҡуйыр ине, билләһи. Уның өсөн кешенең насары-яҡшыһы юҡ. Ул һәр ваҡыт кешенең хатаһын, етешһеҙлеген, хата аҙымын төрлө яҡлап баһалай, яңылышыуында уның йәшәгән мөхитен, тормош шарттарын ғәйепләй. Һөҙөмтәлә уға ҡарата йәлләү, ҡыҙғаныу тойғоһо ғына уята. Яңыраҡ ҡалала шау-шыу тыуҙырып алтын магазинын талау ваҡиғаһы тураһында һөйләшкәндә, талаусыларҙы яҡлап, бөгөнгө замандың аяуһыҙлығын, йәштәрҙе кредит һаҙлығына баҫтырған ысынбарлыҡты һүгепме һүкте.

Ошо ҡапма-ҡаршы холоҡло таныштарымдың тормошон сағыштырып ҡараным да, үҙем өсөн бик ҡыҙыҡлы асыш яһаным. Тышҡы яҡтан ҡараһаң, уларҙың көнитмеше бер төрлө кеүек. Икеһе лә үҙ йортонда йәшәй, әсәр балалары бар, хатта бәҡсәсәскә үҫтерергә яратыуҙары менән дә бер-береһенә оҡшаштар. Айырма шунда ғына: кешенең тиҡ яҡшы яғын ғына күргәне - бәхетле әсәй, һөйөклө ҡатын. Хатта бәҡсаһындағы сәскәләр ҙә тәүгеһенекенә ҡарағанда күберәк сәскә ата, оҙағыраҡ ултыра кеүек. Ә кешенең кире яғын ғына эҙләгәненең ғаиләһендә бер ҙә тыныслыҡ юҡ. Балалары, ире менән дә мөнәсәбәттәре көйлә түгел, хеҙмәттәштәре араһында ла абруйы юҡ.

Әйткәндәй, мин-минлек, көнсөллөк темаһына бер риүәйәт:

"Олатаһы ейәненә тормош мәғәнәһе тураһында шулай аңлата: "Һәр ваҡыт кешелә ике бүре алышына оҡшаған көрәш бара. Бүреләрҙең береһе изгелек, яҡшылыҡ, йомартлыҡ, ярҙамсыллыҡ, яҡтылыҡ, миһырбанлыҡ өсөн көрәшә. Икенсеһе - яуызлыҡ, көнсөллөк, ҡомһоҙлоҡ, мин-минлек, тәкәбберлек яҡлы". "Ә ҡайныһы еңә һуң?" - тип һорай ейән. Олатай мәғәнәле генә йылмая: "Ниндәй бүрене күберәк ашатаһың, шуныһы еңә..."

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ТАРИХ ТӨПКӨЛӨНДӘ

**Билдәле булыуынса, "юрматы" һүҙен иран (сармат) йәиһә, уғыр (дъярмат) этнонимдары менән бәйләргә мөмкин. Әммә вақытында күренекле тарихсы-этнограф Раил Ғүмәр улы Кузеев юрматыларҙы төрки сығышлы тип яҙҙы. Уның уйынса, иң иҫке шәжәрәләрендә лә юрматыларҙың уғыр йәиһә башҡа төрки булмаған халыҡтар менән бәйләнештәре тураһында әйтелмәй.**

# ЮРМАТЫЛАР - АҠҠОШТАР НӘҪЕЛЕНӘН



Юрматыларҙың төрки тамырлы булыуын иҫбатлаусы дәлилдәрҙең береһе, беҙҙең уйыбыҙса, уларҙа аҡҡош тураһындағы легенда һаҡланыуы. Уны 1953 йылда Кузеев яҙып алған: "Бер ваҡыт һунарҙа йөрөгәндә Юрмый хандың берҙән-бер улы, аҡҡош атып алайым, тип, уғын тоҫҡаған икән, теге аҡҡош бик сибәр бер ҡыҙға әйләнгән дә ҡуйған. Егет быға өйләнгән. Уларҙан үрсегән нәҫел Юрматы ҡәбиләһе булып ҙурайып киткән". Архивта был легенданың икенсерәк варианттары ла һаҡланған. Унда әйтелеүенсә, юрматыларҙың ханы Юрмый хандың дүрт улы булған. Икенсеһендә: Юрмый хандың бер генә улы булған, уның олатаһы ла иҫән булған әле. Егет ни эшләптер һөйләшмәгән. Олатаһы уны һунарға ебәргән, бәлки, унда һөйләшә башлар, тип өмөтләнгән. Һунарҙа бер ҡаҙ ҡағылдаған. Юрмыйҙың улы уны атып алған. Һәм ул әйткән (кем әйткәне аңлашылмай - **И. Ш.**): "Әгәр ҙә һөйләшмәһәң, тере ҡалырһың, һөйләшһәң, үләсәкһең". Шунан юрматы ырыуы киткән" (Әйтергә кәрәк, был легендаларҙы Кузеев Матрай районы (хәҙерге Йылайыр) Ишбулды ауылы кешеһе Ф. Моратовтан яҙып алған. Ул ауылда "юрмый" тигән ара булған).

Был легендаларҙың боронғо төрөктәрҙең килеп сығышы тураһындағы легендаларға яҡынлығы күҙгә ташлана. Ҡытай сығанаҡтары буйынса, боронғо төрөктәрҙең (ҡытайҙар уларҙы туюкэ тип йөрөткән) ата-бабаһы һунарҙан төньяҡта Со тигән ерҙә йәшәгән. Уларҙың башлыҡтары Апанбуның 70 (икенсе вариант буйынса, 17) туғаны булған. Ичжинишиду (был һүҙ "бүре улы" тигәнде аңлата) тигәненең дүрт улы булған. Өлкәнe Надулу-шад Төрөк тигән исем алған, ә өсөнсө улы аҡҡошҡа әйләнгән. Надулу-шадтың ун ҡатынынан тыуған улдары әсәләренең ырыу исемдәрен йөрөткән. Ҡытай сығанағы ла, башҡорт легендаһы ла борон әсә яғынан күскән туғанлыҡ мөнәсәбәттәре булыуы тураһында һөйләй.

Ике легенданың да бик оҡшаш булыуы (дүрт ул, аҡҡошҡа әйләнеү йәиһә аҡҡошҡа өйләнеү, ырыу исеменең (этнонимдың) әсә яғынан күсә килешлеге), беҙҙенсә, юрматыларҙың төрки сығышы тураһында һөйләй. Ҡайһы бер матриархаль күренештәр юрматыларҙа әле XVIII-XIX быуаттарҙа күҙәтелгән. Мәҫәлән, был турала Сытырман менән Моҡас ауылдары шәжәрәһен анализлағанда Р.Ғ. Кузеев әйтеп үтте. Был шәжәрәлә 18 ҡатын-ҡыҙ исеме осрай, уларҙың балалары, ейәндәре, тыуалары ла бирелә. Был традиция ырыу ата яғынан булыуына ҡарамай, йәшәп килгән. Бәлки, шәжәрәне төҙөүселәр үҙҙәрен атаһы ырыуына ла, әсәһе ырыуына ла ҡарай алған ваҡытты хәтерҙә тотҡандарҙыр, тип яҙҙы Кузеев. Әйтергә кәрәк, шул уҡ Сытырман менән Моҡас ауылдары шәжәрәһендә Юрматы бейҙең улы Аҡкусҡарҙың улы Аҡкош исемле. Был шәжәрә юрматыларҙың ата яғынан аҡкоштан килеп сығышҙары тураһында ла һөйләй. Икенсе шәжәрәлә, Юрматы менән Юрмый бейҙең нәҫел-нәсәбе хәҙерге Ишембай, Мәләүез, Стәрлебаш, Стәрлетамаҡ райондарындағы ауылдарҙа йәшәгән, тип әйтелә. Улар юрматыларҙың тәлтем һәм аҙнай ырыуҙарына ҡараған. Был ырыуҙарҙың тамырҙары боронғо төрөктәргә барып тоташа булһа кәрәк.

Боронғо төрөк телендә "ҡуу", "ҡува", "ҡуғу", "ҡоб" һүҙҙәре аҡҡошто аңлатҡан. Башҡорттоң "ҡыуаҡан", "ҡоҙай", "ҡубәләк", "ҡобау" этнонимдары ла ошо аҡҡошты аңлатҡан һүҙҙәр менән бәйле булыуы мөмкин. Билдәле булыуынса, аҡкошты аңлатыусы алда күрһәтелгән һүҙҙәр хәҙерге башҡорт телендә һаҡланмаған. Был ҡош "аҡкош" тип кенә атала. Профессор Ф.Ғ. Хисамитдинова яҙыуынса, аҡкоштың исеме борон табу булған. Шулай уҡ "аҡкош" һүҙенең килеп сығыуы башҡорт теленең ҡыпсаҡлашыуы менән бәйле булыуы мөмкин. Мәҫәлән, урыҫ йылъяҙмаларында 1190 һәм 1193 йылдарҙа ҡыпсаҡ (половецтар) ханы Акоуш (Аҡуш) телгә алына. Телсе ғалимдар билдәләүенсә, был антропонимдар аҡкошто аңлата.

Әлегә боронғо төрөк легендаларына иғтибар итәйек. Н.А. Аристов аҡкошҡа әйләнеү сюжетын хәҙерге алтай халҡының бер өлөшө булған "ҡуу-кижи"-лар ("аҡкош кешеһе") менән бәйләй. Был версия хәҙерге көндә барлыҡ ғалимдар тарафынан да ҡабул ителгән. Алтайҙағы Лебедь (Аҡкош) йылғаһы буйында йәшәгән "шалкандар" (йәиһә "аҡкоштолар") үҙҙәрен "ҡуу-кижи" (Аҡкош йылғаһы буйы кешеләре) тип атағандар. Хәҙерге көндә улар ҡоманды һәм тобалар менән бергә төньяҡ алтай халҡына ҡарайҙар. Шулай уҡ туваларҙа "хуулар" ("ҡуулар") ырыуы һаҡланған.

Боронғо төрөктәр аҡкошто изгеләштергән, уны тотем һынаған булһа кәрәк. Әлбиттә, аҡкош культы башҡорттарҙа ла булған. "Аҡкош"тарҙың көнбайышҡа табан күсенеүе тураһында ҡайһы бер риүәйәттәр һаҡланған. Мәҫәлән, сельҡуптарҙа борон уларға аҡкош ырыуы кешеләре һөжүм итеүе тураһында бәйән иткән легендалар һаҡланған. Себер татарҙары йәшәгән хәҙерге Төмән өлкәһенең Аромаш һәм Вагай райондарында Юрим йылғаһы, Юрмый һәм Юрминка ауылдары, Юрминское күле бар. Был топонимдар "юрмый" этнонимы менән бәйләнә.

Юрматы, юрмый - төрөктәрҙең Көньяҡ Уралға килеүен Беренсе Төрки ҡағанаты осорона ҡайтарып ҡалдырырға мөмкин. Был VI быуаттың икенсе яртыһына тура килә.

Билдәле булыуынса, Юрматы ырыуы шәжәрәһендә йылан-аждаһа менән һуғыш сюжеты ҙур ғына урын алып тора. Был турала "Дәфтәр-и Сыңғыҙ-нәмә"-лә, Таджетдин Ялсығоловтың китабында, "Бабсаҡ менән Күсәкбей" эпосының боронғо варианттарында ла һүҙ алып барыла. Сыуаштарҙағы шул уҡ легендала әйтелә: аждаһа яңы яу менән килгәс, Хузан ҡалаһының хакимы аҡкошҡа әйләнеп ҡасырға мәжбүр булған. Күренеүенсә, ҡала исемендә лә боронғо "хуу" ("ҡуу", аҡкош) һүҙе бар. Йылан-аждаһаларҙың һөжүмен ғалимдар ҡыпсаҡтарҙың (уларҙа "йылан", "ҡай", "уран" тигән ырыуҙар булған, был һүҙҙәр шулай уҡ йыланды аңлата) XI быуатта көнбайышҡа табан башланған күсенеүе менән бәйләйҙәр. Улар уғыҙҙарҙы ҡыуа барғандар. Уғыҙҙар менән бергә "аҡкош" халҡының ниндәйҙер өлөшө лә көнбайышҡа киткән, буғай. Сөнки, шул уҡ урыҫ йылъяҙмаларында XII быуатта Киев һәм Чернигов кенәздәренә уғыҙҙар менән бергә ҡоуей (коуев) тигән халыҡ та йәшәгән, тиелә. Улар урыҫ кенәздәренә хеҙмәт иткәндәр. Билдәле булыуынса, ҡоуейҙар кенәз Игорь Святославичтың 1185 йылдағы ҡыпсаҡтарға ҡаршы яуында ҡатнашҡан. Ҡоуейҙар тәүҙә айырым ҡәүем булған, һуңыраҡ уғыҙҙар, бәрәндәйҙәр менән ҡушылып, "черные клобуки" тип атала башлағандар. Был ҡоуей этнонимын телселәр "аҡкош" һүҙе менән бәйләй.

Юрматы шәжәрәһендә уларҙың XIV быуат аҙағы - XV быуат башында Камаһың уң яғына күсенеүҙәре тураһында бәйән ителә. Әммә был күсенеүҙең күпкә алдараҡ булыуы ла бик мөмкин.

Шулай итеп, юрматыларҙың аҡкоштан килеп сығыуын сағылдырған легендалары боронғо төрөк легендалары менән бик оҡшаш. Был хәл юрматыларҙың төрки сығышы икәнен дәлилләй. Әлбиттә, юрматы-юрмый ҡәбиләһе ваҡыты-ваҡыты менән үҙ эсенә башҡа ваҡ, йә иһә еңелгән ырыу вәкилдәрен дә алған булһа кәрәк. Бында "юрматы" һүҙенең килеп сығышына иғтибар итергә кәрәк. Әммә был инде икенсе тема.

**Шамил ИҪӘНҒОЛОВ,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Йәдкәр БӘШИРОВ*

# БӨЙӨК БАШҠОРТ ИЛЕ

**IV бүлек**

Шулай итеп, урта быуаттарҙағы Бөйөк Башҡорт иленең баш ҡалаһы - Башҡорт ҡалаһы урынында киң тикшереү эштәре, археологик ҡаҙылмалар алып барыу һөҙөмтәһендә фәндә тәүге тапҡыр башҡорт халҡының, уның V-XVI быуаттарҙа дәүләтселеге барлыҡҡа килеүе һәм үсеше мәсьәләләрен документаль нигеҙҙә билдәләргә мөмкин булды. Алда әйтелгәнсә, IX (XII) быуат уртаһында төрки ҡәбиләләр берләшмәһенең башында Башҡорт хан торғас, унда ингән бөрйәндәр, юрматылар, үҫәргәндәр, табындар, тамъяндар h.б. үҙҙәренең ырыуына ҡарауы менән бер рәттән, киңерәк Башҡорт берекмәһенә ҡарауын да, Башҡорт хан кешеһе булыуын да танырға тейеш булған. Монгол осоронан һуң башҡорттарҙың дәүләтселеге тарихи аренала Башҡорт иле төшөнсәһе менән алышына, был осраҡта болғарҙарҙың роле йәйләп кәмеп, "башҡорт-болғар" төшөнсәһе алға сыға. Был Әбелғази хандың татар тарихы хаҡындағы яҙмаһында сағылыш таба. Иҙел-Болғар менән асылда башҡорттар идара итә. Мәҫәлән, Бершөттән һуң Иҙел-Болғар, уның улы Хәлжә (ул олуғбек булып китә), уны улы Урмат, Урматты улы Бурат, Буратты улы Алат, Алатты улы Айбат, Айбатты улы Һаҡсы, Һаҡсыны улы Тулсы, Тулсыны улы Туҡ алмаштыра. Туҡ 32 йыл (833-865) хакимлыҡ итә.

Башҡорт ҡәбиләләренең ул саҡтағы идаралыҡ төҙөлөшө көнбайыш төркиҙәренеке кеүек. Миҫал өсөн, төньяҡ-көнбайыш башҡорттарының идаралыҡ төҙөлөшө, күрһәң, шулай булған: башҡорт ырыуҙары юғары сәйәси ойошмаға - конфедерацияға берләшкән, был асылда дәүләтселекте тәшкил иткән. Был берләшмәләрҙе һайлау юлы менән ҡуйылған бейҙәр етәкләгән. Берләшмәләр тиҫтәләрсә мең кешенән торған, мәҫәлән, турбаслы, кушнарен, бахмутин мәҙәниәтенә ҡараған һәм башҡа ҡәбиләләр ҡағанаттың дәүләт институттарын мираҫ итеп алып, үҙаллы дәүләт берләшмәләре булып киткән.

Башҡорт халҡының тарихы хаҡында яҙыусы ҡайһы бер авторҙар башҡорт халҡы составына тик айырым ырыу-ҡәбиләләрҙе генә индерә. Улар башҡа ырыуҙарҙың боронғолоғон иҫбатлаусы тәрән тамырына иғтибар ҙа итмәй. Ә дәүләтселекте тәшкил итеүсе башҡорт ырыу-ҡәбиләләре берләшмәләре тарихсыларҙың иғтибарынан ситтә ҡала килә, уларса башҡорттар тарихи процестарҙан ситтә торған.

1557 йылда Башҡортостан Мәскәү кенәзлеге менән килешеүлә мөнәсәбәт ҡорған саҡта башҡорт ере сикһеҙ киң майҙанды биләгән һәм унда халыҡ һаны бик аҙ булған. Йылъяҙмасылар теркәүенсә, Башҡортостанда башҡорттарҙан башҡалар булмаған. Әйткәндәй, Яйыҡ менән Волга араһында нуғайҙар күренгеләгән.

Доктор Д.П. Никольский башҡорттарҙың тормошон күп йылдар өйрәнгәндән һуң, шундай һығымтаға килгән: "Башҡорт халҡының тормошо ауыр шарттарҙа булыуға ҡарамаҫтан, ул үҙенең физик үсеше буйынса юғала барыусы халыҡ булып иҫләплӛнмәй. Был халыҡтың үсешеү өсөн ҙур көсө бар, аң үсеше йәһәтенән дә улар Рәсәйҙә башҡа халыҡтарҙан бик юғары тора". Ҡайһы бер ғалимдар башҡорт кешеһенең характер асылына, уның үҫеш тәбиғәтенә, фекерләү образы диалектикаһына, башҡалар менән мөнәсәбәткә инеү, азатлыҡҡа ынтылыу үҙенсәлегенә төшөнмәйенсә бик тәрән хаталана. Ысын башҡорт үҙенең позицияһында ныҡ тора, уны үҙ инаныуынан дундереүе, икенсе нәмәгә ышандырыуы бик ауыр. Был башҡорттоң тарихи үҫеше һуҙылмыла тормош тәбиғәте менән формалашҡан фиғеле.

**(Дауамы бар).**

✓ ***"Тамыр" телеканалына беҙ туған телебеҙҙә һөйләшә белгән өсөн барып эләктек. Өйҙә олатай-өләсәйҙәребеҙ беҙҙә һәр ваҡыт, башҡортса һөйләшергә кәрәк, туған телегеҙҙе белегеҙ, тип өйрәтте.***



**"Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы бына 25 йыл кескәйҙәрҙе генә түгел, уларҙың ата-әсәләрен дә рухлы, ҡыҙыҡлы, халыҡсан тапшырыуҙары менән ҡыуандыра. Ошо мөхиттә эшләгән, бәләкәйҙән ошо мөхиттә тәрбиәләнгән, "Тамыр" тормошо менән йәшәгән йәштәр менән әңгәмәләшәбеҙ бөгөн. Баш ҡалала йәшәп тә, бәләкәй саҡтан туған башҡорт телендә генә һөйләшеү, милли рухта тәрбиәләнеү, етмәһә, йондоҙ исемен күтәреп йөрөү нисегерәк була икән? Ошо хаҡта "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы режиссеры Ләйсән МӘЗИТОВА, бейеүсе Ильяс ҠАРАБУЛАТОВ һәм билдәле йырсы Лиана ХӘБИБУЛЛИНА менән әңгәмә ҡорҙоҡ.**

**"Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалына беренсе тапҡыр килгән мәлегеҙҙе иҫкә төшөрәйек әле...**

**Ләйсән Мәзитова:** Ул заманда бик күп артист ғаиләләре Өфө дәүләт сәнғәт институтының ятағында йәшәй ине. Был ғаиләләрҙә балалар ҙа байтаҡ ине, бергә-бергә аралашып йәшәнек. Мине тәүге тапҡыр Әхәт Мортазин 1989 йылда "Тамыр" студияһы исеменән әҙерләнгән радиотапшырыуға эфирға сығарған. Өфө сәнғәт училищеһының ҙур залында "Тамыр" студияһы асылыу айҡанлы үткәрелгән тамашала ла ҡатнаштым. 1994 йылда беренсе синыфта уҡып йөрөгәнемдә Гөлназ Ҡолһарина "Торомбаш" тапшырыуына алып барыусы эҙләп, беҙҙең 20-се башҡорт ҡала мәктәбенә килде һәм беҙҙең дәрескә инеп, тынлап ултырып сыҡты. Шунан бер туған ағайым Раян менән икебеҙ "Торомбаш" тапшырыуында ҡатнаша башланыҡ, мин Бумалабаш булып уйнай инем. "Тамыр"ға шулай ылығып киттек.

**Лиана Хәбибуллина:** Әсәйемдәр һөйләүе буйынса ғына беләм ул мәлдәге ваҡиғаларҙы, үҙем бигерәк бәләкәй булғас,



барыһын да иҫләмәйем. Бәхетиһәң, бәләкәйҙән әлеге лә баяғы шул Өфө дәүләт сәнғәт институтының ятағы коридорында гел йырлап йөрөгәнмен. Бер мәл эштән ҡайтып килешләй Венер Камалов мине ишетеп, иплән кенә тыңлап, артымдан беҙгә килеп ингән. Әсәйем менән һөйләшкәндәр ҙә, ул мине "Тамыр" студияһына саҡырған. Тәүге тапҡыр Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы сәхнәһендә сығыш яһауым иҫемдә, минә дүрт йәштәр самаһы ғына булған ул саҡта.

**Ильяс Ҡарабулатов:** Атай-әсәйем башта мине "Тамыр"ға йөрөтөргә уйламаған да булған ул, Гөлнур апайым үндағы тапшырыуҙарҙа ҡатнаша башлағас, өйҙә яңғыҙы моңайып ултырмаһын, тип кенә иптәшкә йөрөтә баш-

лағандар. Кеҫәгә ҡулды тығып, эре генә "Тамыр" студияһын тикшереп йөрөгәндә, Гөлназ Фәрит ҡыҙы: "Әйҙә, һине лә телевидениеға төшөрөп ҡарайыҡ", - тине. Шулай итеп мин дә "Сәнгелдәк"тең алып барыусыһы булып киттем. Үҫ кенә йәш ине минә ул саҡта.

**Ләйсән Мәзитова:** Гөлсәр Байғусҡарова ике йәш тә өс айлыҡ сағынан тапшырыуҙарҙа төшә башлағанға тиклем, "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалының тарихында Ильяс иң бәләкәй алып барыусы булды. Ғәҙәттә, балаларҙың телдәре дүрт-биш йәш сағында яҡшы асыла, матур итеп башҡортса һөйләшә башлайҙар. Беҙ ҙә шул йәштә килдек "Тамыр"-ға, балалар баҡсаһына йөрөмәнек. Хатта тапшырыу төшөргән көн булмаһа ла студияға бара торғайныҡ, апай-ағайҙарҙың башын ҡаңғыртып унда нимә эшләгәнбеҙҙер инде...

**Ошо телеканалда шөһрәтләнгән бар балалар ҙа "йондоҙ сире" менән ауырый һымаҡ тойолоп китә. Ә был сир һеҙгә йоҡманымы?**

**Ләйсән Мәзитова:** Беҙ әле лә унан арынмағанбыҙ. Шаяртам, әлбиттә, сөнки беҙгә ул сир менән ауырырға форсат бирмәнеләр. "Тамыр"ҙа эшләгән апайҙар бик тәжрибәле, яҡшы психолог һәм педагогтар булған. Иҫемдә, бер ваҡыт тапшырыу төшөргән саҡта "Был һүҙҙе әйтмәйем, улай эшләмәйем" тип еңмешләнгәс, бер ай буйына "Тамыр"ға саҡырманылар. Был минә мәңгелеккә һабаҡ булды. Күп

балалы ғаиләлә үҫкәс, өйҙә лә беҙҙе мыжыҡланмаҫҡа, яуаплы булырға өйрәтеп тәрбиәләнеләр бит.

**Лиана Хәбибуллина:** Бәләкәйҙән сәхнәлә сығыш яһап, тапшырыуҙарға төшөп өйрәнгәнгәме икән, сәхнә йондоҙо менән ябай кеше тормошо араһында ниндәй айырма барлығын белмәйем. Минә ҡалһа, ябай бер һөнәрсе лә, билдәле шәхестәр ҙә берүктәр. Әсәйем дә бәләкәйҙән шулай тип өйрәтте: алдыңда кем баҫып торһа ла, ул да һинең кеүек кеше. Үҙеңде кемдәндер юғары ҡуйырға, өҫтөн итеп тойорға ярамай, тигән тәрбиә алып үҫтем.

**Балалар баҡсаһына йөрөмәгәнһегеҙ, ә мәктәпкә уҡырға төшкәс, "Тамыр" телеканалындағы эш ҡамасау итмәнеме?**

**Ләйсән Мәзитова:** "Тамыр"ға йөрөгән балалар бөтәһе лә әүҙем, алдынғылар, өлгөрҙәр. Мәктәп сараларында ла әүҙем ҡатнашып, төрлө предмет олимпиадаларына, конкурс, ярыштарға ла йөрөп өлгөрә торғайныҡ. Хәҙер үҙем "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалында эшләгәс, беҙгә килгән балалар ҙа һәр яҡлап үҫешһен, уҡыуҙа ла юғары уңыштарға өлгәшһен, таланттары ла асылһын өсөн бөтәһен дә эшләргә, һәр береһенә иғтибарлы булырға тырышам. Ата-әсәләр менән даими рәүештә баланың мәктәптә алған билдәләре тураһында ла хәбәрләшеп торабыҙ, кемдер уҡыуына өлгөрмәй башлаһа, тапшырыуҙарға саҡырмайбыҙ, мөһим дәрестәрҙе ҡалдырмаһын өсөн кәрәкле ваҡыт билдәләйбеҙ. Тапшырыуҙа төшөүҙе һылтау итеп, дәрес ҡалдырыға яратыусылар ҙа юҡ түгел, әммә беҙҙең төп шарт - яҡшы өлгәшкән балаларға ғына "Тамыр"-

ға йөрөргә рөхсәт итәбеҙ. Кем дә кем сиреккә "өслө"ләр ала, уларҙы тапшырыуға төшөргә саҡырмаясаҡбыҙ, тибеҙ. Был да үҙенә күрә бер тәрбиә сараһы һәм күптәрҙе тырышлыҡҡа өйрәтә.

**Лиана Хәбибуллина:** Мәктәпкә барғас, "Тамыр"ға һирәгерәк йөрөй башларға тура килде. Элекке кеүек, көн дә студияға барыу онотолдо, айына бернисә тапҡыр ғына тапшырыуҙа төшә инем. Һуңынан эстрадала эшләй башлағас та төрлө тапшырыуға төшөргә, концерттарҙа сығыш яһарға саҡырып торҙолар. Әле лә онотмайҙар, шуға бик рәхмәтлемен.

**Ильяс Ҡарабулатов:** "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалында өс йәштән ун ике йәшкә тиклем эшләнем. Ҡыҙыҡ өсөн генә һанап ҡарағайным, бәхетиһәң, ошо арауыҡ эсендә һигеҙ концертта алып барыусы булғанмын, етмеш дүрт тапшырыу һәм биш фильмда төшкәнмен. Үҫмер йәшенә еткәс, "Тамыр"ҙан "пенсияға" киттем һәм иғтибарҙы уҡыуға йүнәлтергә тура килде.

**"Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы хеҙмәткәрҙәренең тәрбиәүи һабаҡтары тураһында телгә алып үткәйнегеҙ. Һеҙҙең шәхес булараҡ үҫешегеҙгә уның йоғонтоһо ниндәй булды? Ғаиләләге тәрбиәнән айырмалы инеме унда алынған һабаҡтар?**

**Ильяс Ҡарабулатов:** "Тамыр" телеканалына беҙ туған телебеҙҙә һөйләшә белгән өсөн барып эләктек. Өйҙә олатай-өләсәйҙәребеҙ беҙҙә һәр ваҡыт, башҡортса һөйләшергә кәрәк, туған телегеҙҙе белегеҙ, тип өйрәтте. Суверенитет яулағандың тәүге йылдары, халыҡтың милли үҙаңы терелгән мәл ине ул саҡ. Атайҙар ҙа "Карауанһарай" төркөмө ойоштороп, халыҡтың рухын күтәреү өсөн тырышып йөрөнө. Беҙҙе, ҡалала үҫкән балаларҙы, башҡорт мөхитенә ылыҡтырыу йәһәтенән ул заманда "Тамыр" студияһынан да ҡулайлыраҡ, яҡшыраҡ ысул булмағандыр. Нәҡ ошонда беҙҙең күңелдәрҙә башҡорт халҡының ауыҙ-тел ижадына, йыр-моңона һөйөү уяттылар. Туған телдә һөйләшеү оят түгел икәнен аңлаттылар. Ә бит ул заманда атай-әсәйҙәр балалар баҡсаһына йөрөтөр алдынан балаларын рус телендә һөйләшергә өйрәтә торғайны. Беҙҙең өлгө иҫбат иткәндәр тим башҡорт телен белеп кенә лә бик күп мөмкинлектәр асыла икәнен. Сөнки балаларын "Тамыр"ға йөрөтөргә теләүселәр бихисап булһа ла, туған телгә



өйрәтмәгәс, ундай теләктәрен тормошҡа ашыра алманы бит бик-бик күптәр.

**Лиана Хәбибуллина:** Әллә күпме сит илдәрҙә йөрөйөм, атай-әсәйемдең мине үҙ туған телемдә һөйләшергә өйрәткәненә сикһеҙ рәхмәтлемен. Берҙән, ике-өс телде иштеп үҫкән балаға төрлө телдәр өйрәнеүе еңел бирелә. Икенсенән, туған телен белгән кеше үҙенең кем, ҡайҙан булыуын таный. Ә инде туған телен белмәгән кеше, урыҫтар әйтмешләй, үҙенекеләр араһында ят, яттар араһында үҙ урынын тапмай юғалып ҡалыуы мөмкин.

**Ләйсән Мәзитова:** Тәрбиә тураһында бик күп һөйләргә була. Һәр ғаиләлә ул үҙенсә алып барыла. Ә беҙҙең ғаиләлә тәрбиә мотлаҡ туған телендә бе-

# "ТАМЫР"

## оҙон-оҙаҡ бәхетле





✓ *Балаларға бәләкәйҙән үҙебеҙҙең арҙаҡлы шәхестәр тураһында һөйләп үҫтерергә кәрәк. Юғиһә, "Арыҫлан Мөбәрәков, Рудольф Нуриев кем ул?" тип һораһаң да, күбеһе белмәй, ә Салауат Юлаев - ул хоккей командаһы, тип яуап бирәләр.*



леүҙән башланды. Ятаҡтан күсеп киткәс, урамда төрлө балалар менән бергә уйнап, аралашып ҡайтабыҙ ҙа, "Рөстәм ағай", тимәй, башҡаларға эйәреп "Рустик" тип өндәшһәк, әләгә торғайны. Атайҙың: "Һеҙҙең "папа"ғыҙ юҡ, атайығыҙ ғына бар", - тигән һүҙҙәре иҫтә. Тәрбиә мәсьәләһенә килгәндә, беҙҙе бәләкәйҙән өйҙә лә, "Тамыр"ҙа ла өлкәндәргә ҡарата ихтирамлы мөғәмәләлә булырға, кеше араһында үҙеңде нисек тоторға һәм үҙ көсөңә ышанырға өйрәттеләр, һәләттәребеҙҙе үҫтерҙеләр. Шуға ла "Тамыр" студияһына йөрөгән беҙҙең быуын балалары бөтәһе лә бөгөн был тормошта үҙ урынын тапҡан билдәле шәхестәрҙер тип уйлайым. Әле лә студияға килгән балалар һәм үҫмерҙәргә ошондай тәрбиә бирелә, улар тура эфирға сығыуҙы талап иткән тапшырыуҙа бер ҡурҡыуһыҙ төшә, тырышып сценарийҙарҙы ятлай, йырлай, бейей, туған телендә һөйләшә, КВН-да уйнай, киноға ла төшә, төрлө кешеләр менән уртаҡ тел таба белә, уҡыуҙа ла яҡшы өлгәшә.

**Лиана Хәбибуллина:** Эйе, Ләйсән менән килешәм. "Камера табыу, кассетаға яҙҙырыу ҙа ҙур сығымдар талап иткән булғандыр инде. Алып барыусылар халыҡ телендә "уазик", "буханка" тип йөрөтөлгән машиналарға ултырып, сюжет төшөрөргә сыға торғайны. Хәҙер генә ул кәрәкле сюжетты хатта кеҫә телефонына төшөрөп, телевизорҙа күрһәтергә була.

Шулай ҙа, әгәр ҙә яҙмыш икенсе төрлө яҙылһа, медицина өлкәһен һайлар инем. Яратҡан шөғөлдәремдең береһе - сәстәргә төрлө прическалар яһау, йә милли аш-һыу һатылған рестораннар эшен үҫтереү ҙә шәп идея, миненсә.

**Лиана Хәбибуллина:** Иҫкә алырлыҡ хәтирәләр күп. Бала саҡтан уҡ шулай бөтә ауырлыҡтарҙы енергә, үҙ көсөңә ышанырға, таланттарҙы үҫтерергә өйрәнгәс, ябай тормош һайлай алмаҫ инек барыбер. Ләкин атай-әсәйҙәр ҙә сәнғәт кешеһе булғас, башҡа тормошто күҙ алдына ла килтермәгәнмен. Махсус музыка мәктәбен тамамлағандан һуң, инглиз телен яҡшыраҡ үҙләштереү ниәтендә Башҡорт дәүләт университетының Башҡорт филологияһы һәм журналистика фа-

цирк"ын күргәс, нәҡ һауа гимнасы булыр инем, тигән уй килгәйне. Ысынлап та, мин бәләкәйҙән бейеклектән ҡурҡмаһым - циркта эшләр инем.

**▸ Ә һеҙ "Тамыр" студияһы менән үткән бала саҡ йылдарын һағынып йыш иҫкә алаһығыҙмы?**

**Ләйсән Мәзитова:** Бала саҡ хәтирәләренең шул тиклем күнелле, яҡты ваҡиғаларға бай булыуы нәҡ "Тамыр" студияһында эшләүемә бәйле. Бында йөрөмәгән берәйһенән бала саҡы тураһында һорашһаң, ул иң ҡыҙыҡлы хәтирәләрен ҡул һындырыу, ҡайҙандыр һикереп имгәнеү, һуғышыу йә башҡа хәл-ваҡиға менән бәйләп иҫләй. Күптәрҙең бала саҡтағы фотолары ла юҡ, ә беҙҙең тотош видео-тапшырыуҙар архивта һаҡлана хатта. "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы егерме йыллыҡ юбилейын билдәләгәндә архив материалдары менән эшләргә тура килгәйне. Ул саҡтағы декорациялар, өй йыһаздары, уйынсыҡтар, тапшырыуҙы төшөргәндә ҡулланылған махсус эффекттар - барыһы ла тарих биттәрендә ҡал-

ҡаҙерләп һаҡлана. Әлбиттә, ул йылдар һағындыра, өйҙә бер үҙем булғанда сығарып ҡарап алам. Тапшырыуҙарҙың тематикаһы төрлө булған, профессиональ актерҙар беҙҙең менән бергә эшләгән, Башҡортостан буйлап йөрөп төшөргән хатта. Бағыусылар күп булғас, ул йылдарҙа финанс мәсьәләһе лә еңелерәк хәл ителгән, күрәһең. Ә бына һөнәри оҫталыҡ йәһәтенән ул заманда әллә ниндәй шәп программалар, яҡшы техника булмаһа ла, тапшырыуҙарҙың сифаты юғары. "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы хеҙмәткәрҙәренең эшен сағыштырып ҡарап, әле лә шул кимәлдән төшмәүҙәрен күреү ҡыуаныслы.

**▸ Һеҙ - заман башҡорттары, милләттең аҫыл вәкилдәре. Милләттәштәргә әйтер һүҙегеҙ, теләгегеҙ ниндәй булыр?**

**Ләйсән Мәзитова:** Милләттең көсө - туған телендә. Һәр башҡорт балаһына туған телен өйөндә өйрәтһен ине. Асылыбыҙҙы юғалтмайыҡ, арабыҙҙа төрлө өлкәләрҙә уңышҡа өлгәшкән шәхестәрҙе күрергә теләр инем. Башҡорт халҡы тура-

лғанда республика, күрше өлкәләр буйлап гастролдәргә күп сыҡтыҡ. Концерттарға халыҡ һирәк йөрөй. "Мин башҡорт!" тип күкрәк һуғып йәшәгәнсе, бер-беребеҙгә хәлдән килгәнсе ярҙам итергә өйрәнәйек. Бизнес, сәйәсәт, иҡтисад, етештереү өлкәһендә лә ярҙам ҡулы һуҙырҙай үҙебеҙҙең белемле кешеләребеҙ булһын. Ни өсөндөр сит илдәрҙә йәшәгән милләттәштәргә ҡараһаң, уларҙың татыулығына иҫ китә, бер-береһенә терәк булыуын күрәбеҙ. Тыуған ерҙән алыҫта тормош көткән саҡта ғына түгел, бында ла фекерҙәш, арҡаҙаш, дуҫ булып йәшәһәк ине...

Тағы ла шуны өҫтәп әйтергә теләйем, балаларға бәләкәйҙән үҙебеҙҙең арҙаҡлы шәхестәр тураһында һөйләп, аңлатып үҫтерергә кәрәк. Беҙ мәктәптә уҡығанда "Башҡортостан мәҙәниәте" дәресендә ярайһы уҡ етерлек мәғлүмәт бирелә торғайны, хәҙер нимә уҡыталарҙыр, белмәйем. Ләкин ун йәштән алып бала башҡорт шәхестәрен белергә тейеш. Юғиһә, "Арыҫлан Мөбәрәков, Рудольф Нуриев кем ул?" тип һораһаң да күбеһе белмәй, ә Салауат Юлаев - ул хоккей командаһы, тип яуап бирәләр.

**Ләйсән Мәзитова:** Ильяс бик ҡыҙыҡ фекер әйтте әле, ысынлап та, беҙҙең халыҡ һыҡмыр. Төрлө мәҙәни сараларға инеү хаҡы артыҡ ҡиммәт булмаһа ла, саҡырыу ҡағыҙҙары һорап, бушлай килергә тырышып торалар. Буштың атаһы үлгән хәҙерге заманда, бөтәһе лә үҙ хеҙмәте өсөн тейешле хаҡ алырға теләй. Кемдер эшләй, кемдер ашай түгел, эшләгән кеше тешләргә лә тейеш тә баһа. Шуға, милләттәштәр киң кеҫәле генә түгел, киң күңелле лә булһын. Бынан тыш, әлбиттә, мотлаҡ "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалының тапшырыуҙарын ҡараһындар, беҙ тәүлек әйләнәһенә милләтебеҙҙең киләсәген ҡайғыртып эшләйбеҙ.

# ТЕЛЕКАНАЛЫНДА бала саҡ ҮТКӘН...

мыр" студияһында баһаңды күтәреүҙәрен тойоп, үҙең дә ағай-апайҙар һинән көткән юғары һөҙөмтәгә өлгәшергә тырышаһың. Үҙеңде бар ерҙә лә кәрәкле итеп тояһың. Был коллективта эшләгән балаларҙың комплекстары юҡҡа сыға, һәр кем үҙенең көслө сифаттарын үҫтерә ала.

**▸ "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы студияһына йөрөмәгән булһағыҙ, һеҙ әлегә көндә ниндәй өлкәлә эшләр инегеҙ, ошо турала фараз иткәнегеҙ бармы?**

**Ләйсән Мәзитова:** Был турала уйланғаным юҡ ине. "Тамыр" студияһын балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы кимәленә тиклем үҫтереүгә күп көс һалыусы оҫтаздарыбыҙ булмаһа, нисә быуын ҡала балалары тормошта бөтөнләй икенсе төрлө шәхестәр булып үҫер ине. Кемдер, "Тамыр" урынына башҡа берәй сара уйлап табылған булыр ине, тип тә әйтер. Ләкин бөтә ғүмерен ошо милли телевидение эшенә арнаған Луиза Фархшатова, Гөлназ Ҡолһарина, Хәбирә Хәмиҙуллина, Янис Рамазанов, Дилара Зарипова кеүек инициативалы хеҙмәткәрҙәр табылыр инеме икән? Иҫемдә, "Тамыр" студияһы яңы асылғанда тапшырыуҙар бәләкәй генә һыуыҡ бүлмәләрҙә төшөрөлдә, бөгөнгөләй шәп программалар, аппаратуралар ҙа юҡ ине. Видеока-

культетына башҡорт-инглиз теле йүнәлеше буйынса белем алдым. Әле уйланып ултырҙым да, моғайын, пластик хирург һөнәрен үҙләштерер инем.

**Ильяс Ҡарабулатов:** "Тамыр" студияһына йөрөү, ысынлап та, киләсәгебеҙҙе билдәләгән. Ваҡытында беҙҙе ошонда етәкләп килтермәһәләр, хәҙерге һөнәрем сәнғәт менән бәйле булмаҫ ине, бәлки. Бер нисә йыл элек Гия Эрадзеның "Королевский





ған, беҙ ҙә шул тарихтың бер өлөшө. Мин әле генә Бауырһаҡ апай ул, ул йылдарҙа Бумалабаш булғанмын, Лиана бәләкәй генә булып, бер тапшырыуҙа Ейәнсура таҡмаҡтарын йырлап тора, Ильяс та шул тиклем етди итеп тапшырыу алып бара. Быларҙы онотоу мөмкин түгел, бигерәк тә һаман да "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалына тоғро ҡалып, ошонда эшемде дауам иткәс.

**Лиана Хәбибуллина:** Былтыр телеканалға килеп, үҙем ҡатнашҡан тапшырыуҙарҙы, концерт видеояҙмаларын йыйып алдым. Һағынған һайын ҡуйып ҡарайым, хатта күҙҙәр йәшләнеп китә ошондағы мөхитте һағыныуҙан.

**Ильяс Ҡарабулатов:** Элек видеопроигрыватель була торғайны, шуға мин төшкән бөтә тапшырыуҙар видеокассеталарға яҙҙырылған һәм әсәйҙең һандығында

һында нишләптер ҡурай һәм ҡымыҙға бәйле стереотип һалынған, ысынында, борон ата-бабаларыбыҙҙың кәсептәре күп төрлө булған. Һәр кем ҡулынан килгәнде эшләп йәшәгән, күн эшкәрткән, балта оҫтаһы, тимерсе, малсылар ҙа булған араларында, сәйәсәт, иҡтисад, сәнәғәт өлкәһендә уңышҡа өлгәшкән уҡымышлы шәхестәр ҙә аҙ түгел. Элек ғәләмәт аптырай торғайным: йыр-бейеү конкурстарына меңәрләп кеше йыйыла, ә теүәл фәндәр буйынса ярыштарға балаларын алып килгән башҡорттар һирәк ине. Бына ошо хәлде үҙгәртергә ваҡыт еткән, беҙҙең йәштәр ҙә белемгә ынтылырға, етеш тормош көтөргә тейеш. Үҙемдән алып әйтәм, булғанына шөкөр итеп йәшәргә күнеккәнбеҙ, ләкин бирелгән мөмкинлектәрҙе лә файҙалана белергә кәрәк.

**Лиана Хәбибуллина:** Заман башҡортон ысынлап та туған телендә һөйләшкән, балаларында был телгә һөйөү тәрбиәләгән шәхес итеп күрәм. Ҡаны башҡорт булһа ла, аңында булмаһа, ул бала үҙ милләтен үҫтерергә бер ҡасан да теләмәйәсәк. Шуға, ҡайҙа ғына йөрөгәндә лә үҙеңде башҡорт тип, яҡшы яҡтан танытып, халҡына файҙа килтерерлек итеп тәрбиәләргә, үҙебеҙ ҙә ошо маҡсатҡа ынтылып йәшәргә кәрәк.

**Ильяс Ҡарабулатов:** Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһында эш-

хоккей командаһы, тип яуап бирәләр.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалының эше, хеҙмәткәрҙәре, үткәне һәм бөгөнгөһө, уңыштары тураһында бик күп һөйләшергә мөмкин. Бындағы хеҙмәткәрҙәрҙең эше күптәр өсөн йәшәү рәүеше, тәрбиә үрнәге, рухи ҡалҡанға әүерелгән булыуы һәр кемгә билдәле. Киләсәктә лә "Тамыр" балалар һәм үҫмерҙәр телеканалы бала йөрәгенә ут һалыр, башҡорт рухын уятыр, туған теленә һөйөү тәрбиәләр сара булып ҡалһын!**

**Сәриә ҒАРИПОВА әңгәмәләште.**

***✓ Сәғиҙәгә килгәндә, ул ҡыҙының йөрәге кем ҡулында икәнен күптән белә инде. Тик йәштәр үҙҙәре ҡабаланмағас, йөрөй бирһендәр, ҡамыт кейеп өлгөрөрҙәр әле, тип уйлай. Уҡытыусы Факиһаның Сәғитенә ғашиҡ бит уларҙың Хәтирәһе.***




## "Бәлшәүник" Хәтирә

Йәйге туҙандан ҡойон уйнатып килеп ингән һыбайлыларҙы, буталышлы замандарҙа һаҡ булырға өйрәнеп бөткән халыҡ, нисектер аңғармай ҡалды. Шунлыҡтан, ситән ҡапҡа янына туҡтап аттарын бәйләгән һалдаттарҙы яңы күреп ҡалған өйҙәге ҡатын-ҡыҙ, сар-сор килеп, этешә-төртөшә кеме баҙға, кеме урындыҡ аҫтына ташланды. Улар шул ҡәҙәр ҡурҡышып ашыҡты ки, хатта сәңгелдәктә яңы йоҡоһонан уянып ултырған ике йәштәрҙәге сабыйҙы ла онотто. Бала күҙҙәрен селт-селт йомғолап, бында ни булғанын аңлай алмай, һаман ойоп китеп ултыра бирер ине лә, ишек шар асылып, унан ике ят кеше килеп инде. Инеүселәр ҡараштары менән берсә буш өй эсен ҡапшаны, берсә күҙҙәре түймәләй булған балаға ҡараны. Әлбиттә, улар йорттағыларҙың йәшеренеп бөткәнен дә, яҡынса ҡайҙа булырға мөмкин икәндәрен дә белә, ана бит, хатта сәй табындарын ташлап ҡасҡандар: самауырҙары боһорап ултыра. Тик быларҙың эҙләнеп йөрөргә теләктәре лә, күрәһең, ваҡыттары ла юҡ. Ҡырағай ауыл бисәләре менән йәшенмәк уйнар саҡмы һуң? Арттан аҡтар эҙәрлекләп килә.

Ҡыҙылармеецтарҙың береһе, алан-йолан килеп, тәҙрә аша йылға аръяғындағы үҙәктән төшкән юлды күҙәткәнсе, икенсеһе урындыҡ һәм һике өҫтөндәге ашарға ярағандай аҙыҡ-түлекте тоғона һыпырып төшөрҙө, унан сығып, синдек ишеген тибеп асып, унан да нимәлер эләктерҙе.

Эстә, тәҙрә төбөндә ҡарауылда торғанына баланың шаңҡып ултырыуы ҡыҙыҡ булып киттеме, иңендәге күн сумкаһынан ҡағыҙ бите сығарып, унда сатай-ботай эре хәрефтәр менән нимәлер яҙып, артына шапылдата төкөрҙө лә, сабыйҙың маңлайына йәбештерҙе. Бала күҙен ҡаплаған нәмәне алып ташларға үрелмәй ҙә, өн дә сығармай, һаман шулай ташҡурсаҡ булып ултыра бирҙе. Ҡыҙылармеец был күренештән шарҡылдап көлә-көлә, иптәше артынан сығып йүгерҙе. Бер нисә минут эсендә ауыл халҡын талап өлгөргән ҡыҙылдар саң болото аҫтында ауылдан сығып та сапты.

Өйҙә һиллек урынлашҡас, улбыл ерҙән йәшеренеүселәр күренде. Урындыҡ аҫтында йәнен ус төбөндә ҡыҫып тотоп ятҡан Сәғиҙә иң беренсе сығып, балаһына ташланды.

- Балаҡайым, ҡолонсағымды! Ҡороғорҙар, ҡотон алды инде! Суҡынған урыҫтар, йәлсемәгерҙәр!

Уның артынан эйәргән өс ҡыҙ бала, нимә әйтергә белмәй, үгәй әсәйҙәрен тирәләп килеп баҫып торған булды.

- Нимә яҙғандар шул ҡороғорҙар, баламдың башына йәбештереп тороп, сәнселгерҙәр! - Сәғиҙә теге ҡағыҙҙы ҡыҙҙарға һондо. Ҡыҙҙарҙың олорағы яҙылғанды саҡ-саҡ ижекләп уҡыны: "Б-бо-о-л-л-л-ше-в-в-ви-ик".

- Бәлшәүник? Ҡыҙ бала бәлшәүник була микән, алйоттар, малай тип уйлағандар инде! Сәсе ҡырылғас ней, минең ҡыҙымды, бирермен мин уларға бәлшәүникте!

Сәғиҙә, туй артынан дөңгөргә тигәндәй, тегеләрҙең һыртынан әрләп-ҡарғап күңелен бушатҡас, тупылдатып һөйә-һөйә балаһын имеҙергә ултырҙы, үҙе ҡыҙҙарға күрһәтмәләр бирҙе:

- Йә, моғайын, инде килмәҫтәр, сәйҙе яңыртығыҙ. Ҡороғорҙар, бер нәмәне ҡалдырмағандар, бар, Ҡәнифә, һин баҙҙан май ман бал апсыҡ. Камилә, усаҡтағы көлсә өлгөргәндер, һөрәп ал, ярай, теге аран ауыҙҙар уныһын аңғармаған...

Бер-береһенә етеп килгән өс ҡыҙ бала, үҙе лә шуларҙан саҡ ҡына олораҡ сырайлы үгәй әсә һәм уның итәгендәге яңы ғына "Бәлшәүник Хәтирә" тигән ғүмерлек ҡушамат алған сабый яңынан урындыҡ өҫтөнә йыйылды.

### Ҡыҙ ғүмере

Хәтирә атаһының йәш ҡатынынан тыуған беренсе бала булды. Атаһы Саҙрытдин уның әсәһен, үтмәй ултырған егерме ете йәшлек Сәғиҙәне, ҡатыны ауырып үлеп киткәс алған. Инде ир төҫө күреүҙән өмөтөн өҙгән һәм өйөндә артыҡ тамаҡ булып һанала башлаған "ҡарт ҡыҙ" Саҙрытдиндың һоратыуын оло бәхет итеп ҡабул итеп, етем ҡалған өс бала өҫтөнә килгән һәм үҙе тағы ла ике бала тапҡан.

Хәтирә олоғайып, бала һөйөүҙең ҡәҙерен белә башлаған атаһының иркәһендә, апайҙарының ҡурсыуында ғына, һөт өҫтөндәге ҡаймаҡ булып, ирәүәнләнеп үҫте. Шуғалырмы, әллә тәбиғәтенәнме, сая, хатта еңмеш тә ине. Өс йәше тулыуға әсәһе ҡулына икенсе балаһын тотһа ла, апайҙары уны ергә баҫтырманы - ҡайҙа ла йөкмәп кенә йөрөттөләр. Бигерәк тә оло апаһы Ҡәҙриә ятатты. Имсәк ташлауҙан алып үҙе менән йоҡлатты, йыуындырып, сәсен үреп, һөйөп кенә торҙо. Теле асылыуға йыр-таҡмаҡтар ятлатып, күмер менән мейескә һүрәт төшөртөп, үҙе шуларҙан ирмәк табып уйнатты. Бына ошо ҡәҙерле апаһы менән ҡасандыр айырылышырға кәрәк булыр тип уйларлыҡ йәштә түгел ине ул әле. Бары биш йәш кенә ине бит әле үҙенә лә. Ә апаһына? Апаһына ла ни бары ун ете булған икән. Берҙән-бер көндө ғаиләләге оло ҡыҙҙы һоратырға ялан яғынан яусы килеп төштө. Байҙар иҫәбендә тормаһа ла хәлле генә кеше икән, яңы урынлашып килгән хөкүмәткә ярақлашҡан, шунда эшләп йөрөй. Ҡатыны ауырыуҙан ятҡан, ғүмере лә оҙаҡ ҡалмағандай, ике балаһы бар. Яусы киткәс, уйларға вәғәҙә биреп ҡалған йортта тауыш сыҡты.

- Йәш көйө икенсе бисәлеккә бирмәйек инде, үҙ тиңе табылыр, - тип үҙ фекерен әйтеп ҡалырға ашыҡты үгәй әсә.

Атай кеше быны оҡшатманы:

- Үҙ тиңен ҡайҙан алаң?! Бынау буталыш заманында егет-елән йә аҡтарҙа, йә ҡыҙылдарҙа йөрөп, ҡырылып бөттө. Ҡыҙҙы һоратылған урынына биреп ебәреү хәйерле, китеп ултырһын.

- Ҡабат һоратмаҫтар тейһеңме әллә? Булыр әле...

- Үҙең һымаҡ ҡартайғансы ултырһын тейһеңме?

Зитына тейгән был һүҙҙәрҙәнме, әллә ҡартының ҡыҙып барыуын һиҙепме, ҡатын өндәшмәҫ була. Ҡыҙҙар иһә аталарынан ҡурҡыуҙан һүҙ ҙә ҡата алмай. Ике бәләкәсерәге ҡашын төйөп, яман ҡарап торған апайҙарына йәлләп баҡтылар ҙа, шым ғына илашырға керештеләр.

Нишләп шул саҡта апаһы телгә килмәне икән, нишләп ҡарышманы ла, тауыш ҡуптарманы? Был хаҡта аҙаҡ, тиҫтәләгән йылдар үткәс, күп уйлағаны булды Хәтирәнең. Урамда бит егерме өсөнсө йыл ине. Ҡыҙ баланы көсләп кейәүгә биреүҙәр тыйылған. Тик һаман да кейәүгә сығыу түгел, ә кейәүгә биреү төшөнсәһе көслөрәк булғанмылыр, әллә ирке сикләнгән булыу мосолман ҡатын-ҡыҙының аңына шул тиклем һеңгәнме, апаһы ризаһыҙлығын бөтөн йөҙ-төҫөнә сығарып тумһайып, атаһына арҡыры ҡарап йөрөһә лә, бер ҡаршылыҡ та күрһәтә алманы. Бесән бөтөүгә уны алырға килделәр. Апаһын кейәүгә биреү күренеше Хәтирәнең йөрәгендә бала сағының иң йәмһеҙ, ҡараңғы көнө булып иҫендә ҡалһа, йәшәй бара ул быныың тағы ла аяныслы ла, ҡыҙғаныс та булыуын тағы ла тәрәнерәк аңлай барҙы.

Бәләкәй Хәтирә аласыҡ тишегенән эстә ҡоҙағыйҙарҙың ашһыу йүнәтеүен күҙәтә. Мискә кеүек йыуан бер ҡатын ҡаҙыларҙы нишләптер биленә урап үлсәп ҡарап ҡаҙанға һала. Икенсеһе был яҡҡа ят булғанса олоолоо шаҡмаҡ итеп һалма ҡырҡа. Шунан уларҙы тоҙлоҡта ғына ҡайнатып алып батмусҡа өйә. Был тәмле аштың татлы еҫе кескәй ҡыҙҙың танауын рәхәт ҡытыҡлап, эскә инергә әйҙәһә лә, ул таш булып ҡатҡан аяҡтарын тыңлата алмай.

Ҡәҙриә апаһын алып киткән ат арбаһы алыҫлаша башлағас ҡына эштең нимәлә икәнлеген аңланы, ахыры, Хәтирә. Уны яратҡан апаһынан айыралар бит! Бала, кескәй усын һыға ҡыҫып тотҡан Ҡәнифәнән ҡулын һелкетә тартып алды ла, йән фарман арба артынан ташланды:

- Апайымды ҡалдырығыҙ! Ҡалдырығыҙ апайымды! Апа-а-ай...

Ошоно ғына көткән кеүек, апаһы ла, тоторға ынтылған ҡулдарҙы этәреп, һикереп төшөп һеңлеһенә ҡаршы йүгерҙе. Ике яҡ та уртала осрашып һыға ҡосаҡлашҡан был икәүгә тын ҡалып ҡарап ҡалды. Ниһайәт, Саҙрытдин һушына килде:

- Нимә ҡарап торағыҙ? Алығыҙ баланы! Бисура! Кемегеҙ ебәреп тора шуны?

Ҡәнифә менән Камилә кемуҙарҙан тыпырсынып илаған Хәтирәне ҡайырып алғансы, апаһы һеңлеһенең тумалаҡ сикәләрен устарына ҡыҫып тотоп:

- Алтыным, матурым... Илама... илама... - тип алмаш-тилмәш үпте лә үпте. Ә үҙенең йәштәре субырлап ҡойолдо.

Тәгәрләп ятып, биҙунланып, үҙәге тартылғансы үкһене ҡыҙыҡай шул мәлде. Атаһы екереп тә, әсәһе әүрәтеп тә, сәпәкләп тә ҡараны - бала тынманы. Аҙаҡтан уға ҡушылып апайҙары, бәләкәй ҡустыһы, унан әсәһе буҙланы. Аталары ҡул һелтәне лә, сығып лапаҫ аҫтына йүкә ишергә ултырҙы. Өй эсенән әле оҙаҡ ҡына өҙөп-өҙөп үкһеүҙәр ишетелеп торҙо.

Ҡәҙриә апаһының яҙмышын шулай уҡ ҙурайғас ҡына белде Хәтирә. Апаһы барған ирҙең йәш ҡатыны йәшендәге ҡыҙы ла була. Улар әхирәт булышып ала. Кистәрен ҡайҙалыр оҙаҡлаһалар, атай һәм ир булған кеше, уларҙы йәшенеп кенә көтөп тора ла, ҡапыл килеп сығып, ҡамсылап ҡыуып алып ҡайта икән. Ҡәҙриә иренә өс бала таба. Уның нисек һәм ни рәүешле йәшәүен берәү ҙә һорамай, күңелендәген дә бер кем белмәй. Әммә егерме дүрт йәшендә генә иренән тол ҡалғас, уның да йөрәге асыла. Ҡырҙан хеҙмәттән ҡайтҡан ике туған ҡәйнешенә һушһыҙ ғашиҡ булып, унан бер ир бала таба ла, тыуған яҡтарына күсеп ҡайта. Аҙаҡ бар ғүмерен ошо кинйәһенә арнап, шуға бауырын баҫып, шуның төҫөндәге бәхетенә йыуанып йәшәй.

...Хәтирә бик сая ҡыҙ булып үҫте. Хәҙер уны "Бәлшәүник Хәтирә"һенә өҫтәп "Атаман Хәтирә" тип тә ебәрәләр. Икенсе йыл инде ауыл комсомол ойошмаһын етәкләй. Уйындарҙы ла башлап йөрөүсе, концерт-пьесалар әҙерләп, ауылдан-ауылға концерттар ҡуйҙырыусы ла, комсомолдарҙы йыйып алып, район-ара спорт ярыштарында ла ҡатнаштырыусы - ул. Әленән-әле район, өлкә комсомол комитеты ултырыштарына делегат итеп һайлана. Ҡыҫҡаһы, йәштәр өсөн күҙ өҫтөндәге ҡаш.

Атаһы Саҙрытдин ҡарт заманалар үҙгәреү сәбәплеме, әллә олоғайыуы етепме, күпкә йыуашайған, йәштәргә атаман булып йөрөгән ҡыҙына артыҡ бер ни ҙә өндәшә алмай. Шулай ҙа, бөтөнләй үҙенең барлығын онотоп ташламаһындар, типме, ураған һайын ҡатынын игәп, ҡыҙҙың кейәүгә сығырға йәше еткәнлеген, тауыш-маҙар сығармаҫ борон урынлашып ҡалырға тейешлеген тылҡып ҡына тора. Сәғиҙә ятлап бөткәндәрен ҡолаҡ аша үткәреп ултырһа ла, йөпләгәнен белдереп, баш ҡаға. Юғиһә, ҡойон ҡубып китәһен көт тә тор. Сыраһыҙ тоҡанып китә торған Саҙрытдин бит әле ул.

Сәғиҙәгә килгәндә, ул ҡыҙының йөрәге кем ҡулында икәнен күптән белә инде. Тик йәштәр үҙҙәре ҡабаланмағас, йөрөй бирһендәр, ҡамыт кейеп өлгөрөрҙәр әле, тип уйлай. Уҡытыусы Факиһаның Сәғитенә ғашиҡ бит уларҙың Хәтирәһе. Тегеһе лә ҡыҙҙың "һайт" тигәненә "тайт" итеп торғандай. Урамда килеп осрағанда әллә ҡайҙан ҡояш ише балҡып: "Сәғиҙә апай, һаумыһығыҙ!" - тип йөрәккә үтерлек итеп өндәшә. Сәғиҙә тура ҡарамай ғына "Шәппеҙ әле"һен шыбырлағас, ойоҡ ҡуңысын рәтләгән йәки итәк осон һыпырғылаған булып, егет артынан күҙәтә биреп ҡала ла, "Ҡупшы шул, суҡынған, күҙ-ҡашы ла, атлап китеүҙәре лә, төҫө барҙан төңөлмә, тип, ниндәй ҡыҙ бала быға ғашиҡ булмаҫ", тип уйлап ҡуя. Унан, Аллаға шөкөр, Хәтирәм дә төшөп ҡалғандарҙан түгел, һыуға һалһаң ҡалҡып сыҡҡандай ҡыҙ, тип, үҙен-үҙе һауаландырып, эйәген күтәрә биреп китә.

... Урып-йыйыу эше йомғаҡтарына бағышланған йыйылыш ярты төнгәсә дауам итте. Колхозсылар менән бер рәттән, алдынғы комсомолецтарҙы ла, хатта пионерҙарҙы ла бүләкләнеләр, маҡтанылар, райондан килгән түрәләр ҡат-ҡат ҡулдарын ҡыҫып, рәхмәттәрен белдерҙе. Хәтирә колхоз рәйесе Таһир ағай, бригадир Хәйҙәр, депутатка Мәлиха апайҙар һәм килгән хужалар менән бер рәттән, сәхнә түрендәге ҡыҙыл япма менән ҡапланған өҫтәл артында ултыра. Үҙенә һүҙ бирелгәндә ялҡынланып телмәр тотто, ауылдаштарын ҡотлап ҡулдарын ҡыҫты ул да. Әле Мәлиха апайҙың һөйләгәнен тыңлаған ваҡытта, янында яурынға-яурын терәлеп тигәндәй ултырған Ғимран Ғәлимович алдындағы ҡағыҙына ниҙер яҙҙы ла, Хәтирәгә ҡарай шылдырҙы. Уны-быны уйламаған ҡыҙ унда яҙылғанды эйелеп тороп уҡыны ла, "Хәтирә туташ, сез миңа оҡшайсыз" тигән юлдарҙан ҡаушап, керпектәрен леп-леп иттереп, күршеһенә боролоп уҡ ҡараны. Теге ерән сәсле, ерән ҡашлы, хатта аҡһыл күк күҙҙәрен уралтҡан йөн төктәре лә ерән булған әҙәм, күп тартыуҙан һарғая башлаған эре тештәрен ыржайтып йылмайҙы. "Аб-бау! Шөҡәтһеҙ..." Хәтирә бик етди төҫ алып, турайып ултырҙы ла, халыҡ араһынан быға тиклем күҙ яҙлыҡтырмай ҡарап ултырған ҡәҙерле һынға төбәлде.

**(Дауамы бар).**

ҠОРОЛТАЙ ЗЫҢҒЫРЫ

# МИЛЛӘТТЕ - ШӘХЕСТӘР,

## ә шәхесте илһөйәрлеге күтәрә

**Быйыл Свердловск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы өсөн юбилей йылы. Ошо көндәрҙә был йәмәғәт ойошмаһы үҙенең 20 йыллыҡ юбилейын билдәләне. Свердловск өлкәһе үҙәге Екатеринбург ҡалаһында үткән тантанала Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының төп белгесе Алһыу Сирғәлина, "Шәжәрә" Башҡортостандың тарихи мираҫын өйрәнеү үҙәге хеҙмәткәре, ғалим Илгиз Солтанморатов, Свердловск өлкәһе губернаторы хакимиәте башлыйы урынбаҫары Вадим Дубичев, Свердловск өлкәһе мәҙәниәт министры урынбаҫары Галина Головина, Рәсәй халыҡтары ассамблеяһы рәйесе урынбаҫары Карина Плясунова һәм башҡа абруйлы ҡунаҡтар ҡатнашты.**



Свердловск өлкәһе - борондо башҡорт ерҙәре. Был турала төбәктәге йылға, күл, тау исемдәре лә дәлилләй. Башҡорт халҡының 40-ҡа яҡын ырыуы Рус дәүләтенә ҡушылғандан һуң юридик йәһәттән беркетелгән үҙ ерендә үҙ-аллы улыс барлыҡҡа килтерә. Улар араһында бөгөнгө Свердловск өлкәһендә йәшәгән Ҡошсо, Һыҙғы, Өпәй ырыуҙары Оло Ҡошсо, Һыҙғы һәм Өпәй улыстарына атама бирә лә инде. Уларҙан тыш, был төбәктә Шигер, Терһәк, Һалйот улыстары билдәләре була, шулай уҡ Кама буйынан ғәйнә ырыуы башҡорттары күсеп килә.

Бөгөн был төбәктә яҡынса 40 мең башҡорт йәшәй, уларҙың 12 меңе - Екатеринбург ҡалаһында көн күрә. Шуныһы ҡыуаныслы, башҡа милләт вәкилдәре менән һөйләшкәндә, Уралдың төп халҡы - ҡунаҡсыл һәм изге күңелле башҡорттар икәнен беләбеҙ, ти уларҙың барыһы ла. Был - Свердловск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы һәм уның етәксеһе Нәфисә Фәсхетдин ҡыҙы Тюменцева алып барған эштең һөҙөмтәһе һәм баһаһы. Элекке аҫабалыҡ хоҡуғына эйә халыҡ булараҡ, ошо ерҙәрҙе файҙаланырға һәм унда үҙҙәренең мәҙәниәтен үҫтерергә хоҡуҡлы икәндәрен егерме йыллыҡ эшмәкәрлеге менән раҫлаған улар.

-Һәр йәмәғәт ойошмаһы эшенең уңышы уның етәксеһенә бәйле. Ул бурыстарҙы дөрөҫ билдәләһә генә ойошма маҡсатына ирешәсәк. Кеше үҙенең халҡын яратһын, уның иң аҫыл шәхестәре менән ғорурланһын, уларға ҡарап, мин дә башҡорт, тип әйтһен өсөн милли мәҙәниәтте һаҡлау һәм үҫтереү генә аҙ. Был бик ҙур яуаплылыҡ һәм төрлө йүнәлештә эшмәкәрлек алып барыуҙы талап итә. Өлкәнәйгәс кенә үҙ мәҙәниәтенә сумған кеше булараҡ, белеп әйтәм быларҙы. Мин үҙем дә башҡорт, атайымдарҙың ғаиләһе сәйәси торғонлоҡ йылдарында Башҡортостандан ҡыуыла. Свердловск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайы милли байрамдар ҙа үткәрә, мәғариф, спорт, йәштәр сәйәсәте өлкәһе менән дә хеҙмәттәшлек итә. Өлкәнең 16 муниципаль берләшмәһендәге башҡорт ҡоролтайҙарын берләштереү ҙә күп көс талап итә. Шулай уҡ Башҡортостан, республиканың Мәҙәниәт министрлығы, башҡа ойошмалар менән дә бәйләнештә улар. Свердловск өлкәһенең төп халҡын барыһы белә һәм бындағы башҡорттар үҙҙәрен яҡшы тоя, - ти Свердловск өлкәһе мәҙәниәт министры урынбаҫары Галина Головина.

Ғөмүмән, был көндә Нәфисә Тюменцева тураһында абруйлы кешеләрҙән күп маҡтау һүҙҙәре ишетелде. Власть менән дә, халыҡ менән эшләй белгән эшлекле замандашыбыҙҙы Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайының Башҡарма комитеты "Ал да нур сәс халҡыңа!" миҙалы менән бүләкләне.

Ысынлап та, Силәбе башҡорттары ҡоролтайынан тыш бер сара ла үтмәй бында. "Егерме йыл эсендә ойошма үҫте, көсләнде, матди базаһы ла нығынды. Башта милли костюмдарға ҡытлыҡ ине, хәҙер был йәһәттән проблемалар юҡ. Үҙебеҙ ҙә ҡамсат бүректәр тегергә лә, хатта ҡурай яһарға ла өйрәндек. Күмәкләгән - яу ҡайтарған ти бит халыҡ та, күмәкләһәк, бер нисә сәғәткә һуҙылған концерттар ҙа эшләй алабыҙ", - ти Полевской ҡала округы башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Рәмил Әфтахов та. Башҡортостандың сит өлкәләрҙәге башҡорттар яҙмышына битараф булмауын да тоябыҙ, ти улар. Рәсәй төбәктәре буйынса уҙған "Ҡурай байрамы"н һаман телдән төшөрмәй һөйләйҙәр, Башҡорт дәүләт филармонияһы коллективына, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайына рәхмәтләләр. Әйткәндәй, өлкәлә мәҙәниәтте һәм сәнғәтте башлыса Башҡортостандан сыҡҡан шәхестәр күтәрә. Ҡоролтай етәкселәренең күбеһе шулай уҡ сығышы менән Башҡортостандан. "Йырлап-бейеү, төрлө концерттар, спектаклдәр ҡуйыу ҙа күңел талабы, үҙ телебеҙҙә аралашыу мөмкинлеге лә", - ти Түбәнге Тагил ҡалаһында йәшәүсе Заря Шакирйәнова. Түбәнге Тагил башҡорттары ҡоролтайы етәксеһе Лилиә Хәлитова ла башҡорт теленә аралашыу даирәһенең тар булыуына әсенеүен белдерҙе: "Беҙ ситтә түгел, үҙ еребеҙҙә йәшәйбеҙ, телебеҙҙе лә онотмаңыҡ, әммә йәш быуын үҙ телендә һөйләшмәй хәҙер. Шуға ла телгә күберәк иғтибар кәрәк, ни тиһәң дә, халыҡты бит тел һаҡлай".

Ошо ерҙә тыуып-үҫеп, ошо ерҙә йәшәгән башҡорттарҙың был йәһәттән хәле тағы ла аяныслыраҡ. Ҡасандыр ҡыҫырыҡлауҙарға һәм үҙ ерҙәренән мәхрүм ителеүҙәргә дусар булған халыҡ бөгөн үҙенең башҡорт милләтенән икәнен онотоп, туғандаш милләттәр иҫәбен тулыландырып йөрөй. Шуға ла милләттең тарихи аңын уятыу - көнүҙәк мәсьәлә бөгөн. Үҙҙәрен башҡорт тип атамаһалар ҙа, урындағы халыҡ менән аралашҡанда ихласлыҡтары, ябайлыҡтары, хатта һөйләштәре лә уларҙың башҡорт икәнен танытып тора. Был сәфәрҙә Красноуфимский районы Һыҙғы ауылында йәшәгән 68 йәшлек Ғәйшә апай Айсина менән осрашырға насип булды. Уның ата-әсәһе ҡасандыр Башҡортостандан был төбәккә эшкә килгән. Ошонда ғаилә ҡороп, балалар үҫтереп, ошо ерҙә тамырланған Ғәйшә Имам ҡыҙы үҙ районында ғына түгел, тотош өлкәлә аңлатыу эштәре алып бара, шәжәрә төҙөй, төбәктең тарихын яҙа. Мәктәптә аҫҡан музейы ла ваҡытлыса уның өйөнә күскән әлеге көндә, сөнки мәктәп менән балалар баҡсаһын ҡушыу һөҙөмтәһендә музейға урын юҡ. Төньяҡ-көнсығыш костюмына хас күлдәктәр, алъяпҡыстар, киндер шаршау, сигеүле япмаларҙан алып бишек, карауаттарына тиклем бар. "Ауылыбыҙ бик боронғо, 467 йыл була, 700-ҙән ашыу кеше йәшәй, урыҫ ғаиләләре һирәк. Бөтәбеҙҙе лә башҡортҡа әйләндерեп бөттөн, тип асыуланғандар ҙа бар араларында. Бер архивты ла ҡалдырмайым, китап өҫтөндә эшләйем. Һәр милләт үҙенең үткәнен белергә тейеш", - ти Ғәйшә Имам ҡыҙы. "Башҡорт ырыуҙары тарихы" проекты сиктәрендә Свердловск өлкәһендә йәшәгән башҡорт ырыуҙарына арналған 17-се, өләшләтә 19-сы томды яҙыуҙа ла, халыҡ араһында таратыуҙа ла ярҙамы ҙур уның. Свердловск өлкәһе башҡорттары ҡоролтайының юбилей тантанаһында ла ҡеүәтле ғилми-методик нигеҙ булырҙай был китаптар менән таныштты халыҡ.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Екатеринбург ҡалаһы, йәки өлкә кимәлендә берәй сара әҙерләй башлаһаҡ, унда башҡорт тирмәһе буласаҡмы, тип һорай бөтәһе лә. "Була, башҡорттар ҙа, башҡорт йырҙары ла, башҡорт бейеүҙәре лә, башҡорт телендә аралашыу ҙа була", - тип яуаплайым. Беҙ үҙебеҙ ҙә хәҙер ҡайһы бер башҡорт һүҙҙәрен аңлайбыҙ, башҡортса бейей беләбеҙ. Тарихҡа әйләнеп ҡараһаҡ, башҡорттар һәр ваҡыт Рәсәй менән бергә булған, телдәрен дә, мәҙәниәттәрен дә һаҡлап ҡалған. Беҙ бөгөн дә бергә. Май башында Мәскәүҙә I Евразия халыҡтары съезы буласаҡ, унда ла һорайҙар: "Ә башҡорт ҡоролтайы буласаҡмы?" "Әлбиттә, буласаҡ!" - тип яуаплайым мин, - тигәйне Рәсәй халыҡтары ассамблеяһы рәйесе урынбаҫары Карина Плясунова. Урал төбәгенең йөрәгендә, Рәсәйҙең стратегик йәһәттән әһәмиәтле үҙәгендә башҡорттар тураһында ошондай фекерҙәләр һәм бындай абруйҙы улар үҙҙәренең эше менән яулаған.**

Ләйсән НАФИҠОВА.

---

АЛДАР МЕНӘН ЕРӘНСӘ ҠОРО

# БАЛАЛАР ҺӨЙЛӘЙ

### Эх-ма, война началась

Ауылда бәләкәй генә буйлы, һәр саҡ йүгереп йөрөгән, эшкә уңған Сәйет ағай булды. Тик өйөндә бола сығарыуҙы, ҡаңғырыуҙы, ҡатыны менән ирешеп-һуғышыуҙы өҫтөн ҡуйҙы. Уның был ҡылығына балалары ла өйрәнеп бөткән, ҡурҡмайҙар ҙа. Ата-әсәһе тас та тос һуғыша башлаһа, 8 йәшлек улдары Тимерғәли урындыҡ буйлап көлә-көлә йүгерә һәм үҙе: "Эх-ма, война началась, давай, атай, давай, әсәй", - тип һамаҡлай. Әле лә ауылда берәй ғаилә ҡаңғырһа, "Эх-ма, война началась", тип көләләр. Күп ҡабатланған хәлдән бала-саға ла ҡурҡмай икән.

### Наши ваших бьют!

Әбйәлил районында һуғыштан алда уҡ килеп төпләнгән немецтар йәшәй. Уларҙың тоҡом-заты Германияны күргәне лә юҡ. Телевизорҙан һуғыш тураһында кино бара, совет һалдаттары немецтарҙы ҡыра. Шул саҡ Исаак ағайҙың 6 йәшлек кенә улы: "Кара, ҡара, наши ваших бьют!" - тип һөрән һала. Атаһы немец, үҙе урыҫ, йәнәһе. Бала башы күп нәмәне аңлап етмәй шул.

### Карта янында

География дәресе бара, карта менән эшләйҙәр. Уҡытыусы Хәлитте картаға сығара һәм дүрт яҡты күрһәтә. Малай бер аҙ уйлап тора ла: "Аҫ яҡ, өҫ яҡ, уң яҡ, һул яҡ", - тип, һанап сыға. "Төньяҡ ҡайҙа һуң?" тигән һорауға ла "Өҫ яҡ", тип яуаплай. Был хәлде әле лә һөйләйҙәр, үҙен "аҫ яҡ-өҫ яҡ" тип йөрөтәләр. Өндәшмәй торғансы, нимә булһа ла һөйләүең артыҡ икәнен малай яҡшы аңлаған.

### Уҡымаһаң да кәләш алып буламы?

Йәмил беренсе синыфҡа уҡырға төштө. Мәктәп бер комбайнсының өйөнә ҡаршы ғына. Малай көн дә быларға инә, сумкаһын урындыҡ аҫтына бәреп ебәрә лә, комбайн "ремонтлаша" башлай. Бер-ике көн шулай үткәс, малай: "Олатай, уҡымаһаң да кәләш алып буламы ул?"- тип һорай. Олатаһы уға: "Булмай, наҙан егеткә ҡыҙҙар килмәй, анра һарыҡ тип атайҙар. Уҡыһаң, иң шәп ҡыҙҙы алаһың", - тип аңлата. Малай уйға ҡала. Иртәгеһенә уҡытыусыһы ла артынан төшә һәм малайыбыҙ уҡыуға йөрөй башлай. Юғары уҡыу йортон да тамамланы, кәләш тә алды, ҡыҙ үҫтерәләр.

Олатаһының етди аңлатыуы уға тәьҫир иткәндер, әлбиттә. Бала- сағаны алдамай, дөрөҫ һүҙ генә һөйләргә кәрәк икәнен бер дәлил был.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.
Әбйәлил районы
Байым ауылы.

*✓ Анар емешендә антиоксиданттар күп. Ғалимдар белдереүенсә, анар һуты ҡандағы шәкәр һәм холестерин күләмен нормала тота, йөрәк өйәнәге һәм инсульттан һаҡлай, гипертониянан дауаланырға ярҙам итә.*

ИНТЕРНЕТТАН



# ТӘМ-ТОМДО...
## киви алыштыра

■ Татлы эсемлектәргә организм тиҙ күнегә, сөнки шәкәр баш мейеһенең ҡәнәғәтлек үҙәгенә майға ҡарағанда ла көслөрәк тәьҫир итә. Орегона ғилми-тикшеренеү институты (АҠШ) тикшеренеүселәре 100 үҫмер ҡатнашлығында һынауҙар үткәргән. Шоколад өҫтәлгән һөтлө коктейль эскәндән һуң, уларҙың мейе әүҙемлеге баһаланған. Бар коктейлдәрҙең дә калориялары бер тигеҙ, әммә ҡайһыларында шәкәр, ҡайһыларында май күберәк булған. Асыҡланыуынса, ике төр коктейль дә баш мейеһенең ҡәнәғәтлек үҙәген әүҙемләштергән, әммә шәкәре күберәк булған эсемлектәр быны тиҙерәк башҡарған. Ғалимдар әйтеүенсә, шәкәрҙе ашаған һайын, күберәк ашағы килә башлай. Йәғни, уға өйрәнеү икенсе бер бәйлелекте - шәкәрһеҙ тора алмауҙы булдыра.

■ Британияның "Класадо" фармацевтика компанияһы ҡыҙыҡлы тикшеренеүҙәр үткәргән. Һорау алыуҙарҙа ҡатнашыусы ҡатын-ҡыҙҙарҙың 53 проценты үҙҙәренә иғтибар йүнәлтеү өсөн ирҙәр ауырыуҙары тураһында арттырып һөйләй, тип уйлай. Ир-егеттәрҙең 80 проценты иһә ауырыуҙарының етдилегенә ышана. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ирҙәрҙә йәлләү тойғоһо көслөрәк. Ауырыған саҡта ҡатын-ҡыҙҙарҙы бер аҙ йәлләһәң һәм ризыҡ әҙерләп ашатһаң, шул етә. Ә ир-егеттәр уларҙы кәрәкле дарыуҙар менән тәьмин итеүҙе, көнөнә өс тапҡыр яҡшы итеп ашатыуҙы көтә. Уларҙың 29 проценты ғына ауырыған саҡта яңғыҙ ҡалырға ярата.

■ Анар (гранат) емешендә антиоксиданттар күп. Ғалимдар белдереүенсә, анар һуты ҡандағы шәкәр һәм холестерин күләмен нормала тота, йөрәк өйәнәге һәм инсульттан һаҡлай, гипертониянан дауаланырға ярҙам итә. Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, анар һуты яман шеш күҙәнәктәре үҫешен туҡтата, анар яратыусыларҙың яралары тиҙерәк бөтәшә. Эдинбургтағы (Шотландия) Королева Маргарет университеты ғалимдары асыҡлауынса, 500 мл анар һутында фолий кислотаһының тәүлек нормаһы бар, ә был кислота етешмәүе депрессияға алып килеүе ихтимал.

■ Яңы Зеландия ғалимдары стресс менән көрәш ысулдары өҫтөндә эшләгәндә яңы асыш яһаған. Баҡтиһәң, гел яҡшы кәйефтә булыу өсөн көнөнә 2 киви ашау ҙа етә икән. Етмәһә, был емеш-еләк ҡәһүә һәм тәм-томды ла алыштыра ала. Кивиның составындағы биологик актив матдәләр яҡшы кәйеф сығанағы ғына түгел, ә стресс һәм депрессия менән көрәшеүҙә яҡшы ярҙам күрһәтә. Уның составындағы емеш-еләк кислоталары артыҡ ауырлыҡтан да ҡотҡара. Һомғол буйлы булыу шулай уҡ яҡшы кәйеф тәьмин итә, ти белгестәр.

■ Илау - сәләмәтлекте нығыта ала, тип иҫәпләй Миннесота (АҠШ) һәм Ланкастер (Бөйөк Британия) ғалимдары. Улар илауҙың физиологик тәьҫирен өйрәнгән һәм стресс организмдан күҙ йәше менән сығыуын раҫлаған. Ауыр саҡта илап барған кешеләрҙең 88,8 проценты балауыҙ һығып алғандан һуң еңеллек тоя икән. Күҙ йәше менән организмдан йөрәк өйәнәгенә килтереүсе матдәләр сыға, икенсенән, илаған саҡта кеше тәрән итеп тын ала, был үҙ сиратында кортизол - стресс гормоны кимәлен түбәнәйтә.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

# ҺАУ ЙӘМҒИӘТ...
## һау ғаиләнән башлана



**Башҡа табиптарға бер ниндәй икеләнеүһеҙ, шикләнеүһеҙ йөрөһәк тә, психиатр, психотерапевт, нарколог кеүек белгескә барыусылар хаҡында ишетеү менән кемдер был категория менән аралашыуын туҡтата, кемдер уларҙы урап үтә башлай, халыҡ араһында шыш-быш китә. Ә бит уйлап ҡараһаң, берәү ҙә бер нәмәнән дә һаҡланмаған һәм иртәгә шундай һынау үҙеңә булмаһа ла, яҡындарыңа килеүе бик ихтимал. Икенсе яҡтан, әгәр бындай белгестәргә мохтажлыҡ бар икән, тимәк, йәмғиәттә уларҙың пациенттарына бәйле проблема ла юҡ түгел. Тел төбөнән төшөнә башлағанһығыҙҙыр, моғайын, - бөгөнгө әңгәмәсебеҙ психотерапевт-нарколог Ксения БОБКОВА.**

➔ **Бөгөн күптәр психологтар менән психотерапевтарҙы бутай. Һүҙҙе ошо ике белгес араһындағы айырманы асыҡлауҙан башлаһаҡ, яҡшыраҡ булырҙыр...**

- Психиатрия һәм психиатрия-наркология - улар психиатрик һәм наркологик тайпылыштарҙы дауалау менән шөғөлләнеүсе медицина тармағы. Әммә беҙ пациенттарҙың торошон аңлайбыҙ, һәм улар уңайһыҙлыҡ кисермәһен өсөн, белгестәрҙе психотерапевтар тип атайбыҙ. Бында бер ниндәй ҙә алдашыу юҡ, сөнки һәр психиатр, нарколог-психиатр психотерапевт ул. Бары тик медицина күҙлегенән ҡарағанда ғына уларҙың ҡылыҡһырламалары төрлө. Бик йыш психолог менән психиатрҙы бутайҙар. Ғәмәлдә, был дөрөҫ түгел, сөнки психолог, нигеҙҙә, психологик проблемалары булған сәләмәт кешеләр менән эшләй, шул иҫәптән квалификациялы психолог медицина проблемалары булған кешеләр менән дә эшләй ала. Ә психиатр - барлыҡ табип функцияларын башҡарыусы белгес, йәғни ул пациентты тулыһынса ҡарай, уны төрлө ысулдар ҡулланып тикшерә, тикшереү билдәләй һәм медикаментоз, шулай уҡ физиотерапия, психотерапия һ.б. дауалау билдәләй.

➔ **Наркология - психиатрияның бер өлөшө инде...**

- Уҙған быуаттың 70-се йылдарында наркология айырым дисциплина булып торманы һәм табип-нарколог квалификацияһы бөтөнләй юҡ ине. Наркология пациенттары психиатрия стационарҙарында дауаланды. Нигеҙҙә улар киҫкен осраҡтарға ҡағылды: мәҫәлән, эскелек зәле (похмелье), аҡ биҙгәк (белая горячка), алкоголизм һәм наркомания менән сирләүселәр. Һуңынан хөкүмәт наркологияны профилле пациенттарға ярҙам күрһәтеү буйынса айырым учреждение итеп, социаль әһәмиәтле тармаҡҡа әйләндерҙе. Барлыҡ профиль белгестәре лә был бүленештең шартлы ғына икәнен аңлай, сөнки психик пациенттарҙың наркологик тайпылыштары һәм, киреһенсә, бар. Шуға ла наркологты психиатр-нарколог, тип атайҙар. Нарколог булырҙан алда табип тәүҙә психиатр белемен алырға тейеш, һуңынан өҫтәмә белем алып ҡына нарколог сертификатына эйә була. Психотерапияға килгәндә инде, ул да психиатр белеменә нигеҙләнгән специальность, йәғни табип башта психиатр белемен ала, артабан инде белемен үҫтереп, психотерапевт булып китә.

➔ **Кешенең психиатрик тайпылышын нисек асыҡларға мөмкин?**

- Был медицинаның тотош ҙур тармағы һәм ул төрлө кешелә төрлөсә, еңелдән алып йылдарға һуҙылған ауыр осраҡтарғаса (шизофрения, психоз) булыуы ихтимал. Әгәр еңел осраҡта минималь ҡатнашлыҡ кәрәк булһа, ауыр осраҡта инде дауаханала ятып, оҙайлы дауаланыу, ҡайһы берҙә ғүмер буйы дарыуҙар ҡабул итергә кәрәк була. Психик тайпылыштар ғәҙәти кеше ҡәҙимге тормошта үҙен тота алмай башлағас, беленә. Уға һөнәри, социаль бурыстарын үтәү (атай булыу, ҡатын булыу һ.б.) ауырлаша. Уның эшкә барғыһы килмәй, тирә-яҡ мөхит менән мөнәсәбәте шул тиклем боҙола, быны башҡалар күрә, ә ул үҙе күрмәй. Был - дөйөм һыҙаттар менән әйткәндә, психик тайпылыш сиге.

➔ **Ике тиҫтә йылдан ашыу ошо тармаҡта эшләйһегеҙ, тимәк, сағыштырыу мөмкинлегегеҙ ҙә бар: йәмғиәтте алкоголләштереү кәмейме, әллә, киреһенсә, артамы?**

- Илебеҙҙә алкоголгә, тәмәке тартыуға, наркотиктарҙың законһыҙ әйләнешенә ҡаршы федераль программалар тормошҡа ашырыла һәм хәҙер был кире күренештәр кәмей, тиер инем. Әммә шуны ла оноторға ярамай - был программалар алкоголь һәм наркотиктарҙан бәйле булыуы ихтимал, әммә булырға тейеш түгел кешеләргә йүнәлтелә, уларҙың маҡсаты - иҫкәртеү. Ошо тайпылыштар менән яфаланыусыларға артабан дауаланырға һәм реабилитация үтергә ҡала. Хәҙер илдә ғәҙәти тормош алып барырға теләге булғандарҙы реабилитациялауҙың ҡеүәтле системаһы эшләй.

➔ **Уҙған быуаттың 80-се йылдарында илдә "ҡоро закон" индереп ҡаранылар...**

- Был сәйәсәткә ҡараш ике төрлө булды һәм әле лә шулай ҡала: бер яҡтан, ысынлап та, алкоголь ҡулланыусылар һаны ҡырҡа кәмене. Бында шуны ла асыҡлап китергә кәрәк - йәмғиәттә алкоголь ҡулланыу кимәле күрһәткесенә ҡатын-ҡыҙҙарҙың, балаларҙың сирләүе, алкоголь психоздары инә һәм улар йәмғиәттең эскегә бирелеү кимәлен күрһәтә. Шул уҡ ваҡытта илдә "сәмәй" ҡыуыусылар артты, суррогат ҡулланыусылар күбәйҙе. Йәғни эскелек кимәленең түбәнәйеүе ваҡытлы ғына күренеш булды.

➔ **Алкоголизм йәки наркомания - улар сирме, әллә ғәҙәтме? Собриологтар уларҙы кире ғәҙәткә индерә...**

- Ысынлап та, улар - ғәҙәт. Әммә ошо ғәҙәт ваҡыт үткәс, ауырыуға әйләнә. Сөнки кеше тәүҙә психологик йәһәттән, һуңынан - психик, аҙаҡ инде физик йәһәттән бәйлегә әүерелә. Ләкин барыһы ла ғәҙәттән, ғаиләлә һалынған йолаларҙан башлана. Бәйлелек хаҡында шуны билдәләп китергә кәрәк - уларҙың барыһы ла 100 процент тиерлек ғаиләнән башлана. Сөнки бала тыуғандан алып ғаиләлә ниндәй мөхит хөкөм һөрөүен күреп үҫә: кәйеф-сафа ҡороуҙан башҡаны белмәгән ғаиләлә тәрбиәләнгән бала һуңынан да шул юлды ҡыуа, ә инде алдына маҡсат ҡуйған, хыялдарын тормошҡа ашырған ата-әсә эргәһендә үҫкән балаларҙа шундай уҡ һыҙаттар формалаша. Артабан инде генетика тора. Әгәр кеше сиргә һабышҡанға тиклем уның нәҫелендә төрлө спектрҙағы тайпылыштар, шизофрения, психопатия күҙәтелһә, беҙҙең пациент та шундай һөҙөмтәгә килеп етеүе ихтимал.

➔ **Хәҙер генетика ҙур үҫеш алды. Хатта кешенең теге йәки был ауырыуға бирешеүсәнлеген генетика буйынса алдан асыҡларға мөмкин. Һеҙҙең эшмәкәрлектә бындай алым ҡулланыламы?**

- Әлеге ваҡытта ундай тестар юҡ. Ә совет заманында алкоголгә бирешеүсәнлек гены булған кешеләрҙе һәм балаларҙы асыҡлап, профилактика программаһы эшләргә хыялланғайнылар, әммә ул тормошҡа ашырылманы. Сәбәптәрен әйтә алмайым, бәлки, алкоголизм бер генә түгел, ә бер нисә ген менән кодлана тигән фекергә килгәндәрҙер, бәлки, иҫәпләп ҡарап, ҡиммәт, тигәндәрҙер. Был - бары тик минең фекерем генә. Бөгөн ундай тикшереүҙәр юҡ. Хатта наркотиктар, алкоголь буйынса үткәрелгән тестар ҙа бирешеүсәнлекте, ауырыу ихтималлығын түгел, ә булған ауырыуҙы асыҡлауға йүнәлтелгән. Шулай уҡ кешенең алкоголь бәйлелеге бармы, юҡмы икәнен лаборатория диагностикаһы аша билдәләргә мөмкин.

➔ **Алкоголизм - дөйөм атама булһа ла, йәмғиәттә ҡулланылышҡа ҡатын-ҡыҙҙар, балалар һәм үҫмерҙәр алкоголизмы тигән һүҙбәйләнештәр килеп инде. Уларҙың айырмаһы нимәлә, һәм, ғөмүмән, ҡатын-ҡыҙ, балалар алкоголизмы бармы?**

- Айырым ҡатын-ҡыҙҙар, балалар алкоголизмы юҡ, уларҙың барыһында ла алкоголь бәйлелеге, йәғни ошо ике категорияла алкоголь бәйлелегенең үҙенсәлектәре тураһында һүҙ бара. Был инде икенсе мәсьәлә. Балаларҙа алкоголизм бик тиҙ барлыҡҡа килә һәм нейротоксик тәьҫире һөҙөмтәһендә уларҙың үҫешен тотҡарлай, баш мейеһе функцияларын ҡыҫа һәм уны йәмғиәттең тулы хоҡуҡлы ағзаһына әйләндереп алғансы бик күп аҡса түгергә, кеше ресурстарын эшкә егергә тура килә.

Ҡатын-ҡыҙҙарға килгәндә инде, уларҙың алкоголгә бәйлелеге хис-тойғололого менән аңлатыла. Уларҙың тормошо эмоциялар менән билдәләнә, тиергә лә мөмкин. Һәм ошо өлкәгә алкоголь килеп ҡыҫыла. Шуға күрә ҡатын-ҡыҙға алкоголь бәйлелеге менән көрәшеүе ауырыраҡҡа тура килә. Ҡатын-ҡыҙ алкоголизмының үҙенсәлеге нимәлә - гүзәл зат был сирен оҙаҡ ваҡыт йәшереп йөрөй һәм ул һуңлап ҡына асыҡлана. Һөҙөмтәлә уның ҡиәфәте, репродуктив функциялары ғына түгел, балалары, ғаиләһе зыян күрә. Сөнки ҡатын-ҡыҙ - ул әсә, хужабикә һәм уның психологик-физик торошона йәм-

*✓ - Һәр кем донъяны нисек теләй, шулай күрә. Ниңә мин уларға ҡаршы килергә тейеш? Уларҙың береһе яуызлыҡты күрә, икенсеһе - изгелекте. Һин үҙең, икеһененең береһе яңылыш әйтте, тип раҫлай алаһыңмы?*



ғиәттең башҡа ағзаларының яҙмышы бәйләнгән. Ләкин айырым ҡатын-ҡыҙ алкоголизмы юҡ - ул шул уҡ бер, әммә үҙенең үҙенсәлектәре булған сир.

**➔ Кеше үҙенең алкоголик йәиһә наркоман икәнен таныһа, уны дауалауы еңелерәк, тиҙәр. Ләкин тап ошо категория үҙенең сирен танырға теләмәй...**

- Эйе, уныһы ла бар. Хатта медицинала шундай термин ҡулланыла - анозогнозия, йәғни кеше үҙенең ауырыу икәнен танымай. Был тап ошо бәйлелектең асылы ла инде. Кеше тормошоноң ниндәйҙер этабында үҙенә кәрәкле агентты йышыраҡ ҡуллана башлай, ә инде ҡулланмаһа, үҙен уңайһыҙ тоя, кәйефе булмай, йоҡлай алмай, асыуы ҡабара. Саҡ ҡына доза спиртлы эсемлек эстеме - үҙен яҡшы хис итә башлай. Әммә бының бары тик ваҡытлыса ғына икәнен аңламай, сөнки алкоголь психотроп матдә һәм ул тәү сиратта мейене зарарлай.

**➔ Медицинала алкоголизмдан дауалауҙа код ысулы ҡулланыла, тиҙәр. Ул пациенттың сәләмәтлегенә, уның организмына кире йоғонто яһамаймы?**

- Кодлау термины артында алкоголь бәйлелеген дауалауҙың бик күп ысулы тора. Уны дөйөмләштереп, психотерапия, тиергә мөмкин. Ә психотерапияның ысулдары күп төрлө: гипнотерапия ла, психотерапевтик ышандырыу менән лазер дауалауы берлеге лә, энә менән дауалау ҙа. Бик йыш улар бер тапҡырҙан ғына дауаламай, табипҡа ике-өс тапҡыр килергә кәрәк. Медицинала рәсми рәүештә кодлау тигән термин юҡ. Ул билдәле нарколог Довженко эшләгән осорҙан килә. Рәсәй Федерацияһының баш наркологы Евгений Брюн табиптар ошо ысул менән пациенттарҙы хаталандыра, ти һәм был дауалау ысулына ҡырҡа ҡаршы. Уның бойороғона ярашлы, Мәскәү өлкәһендә һәм Мәскәүҙә табиптарға кодлау менән шөғөлләнеү тыйыла. Был дауалау ысулдары онотолдо тип уйларға ярамай, хәҙер улар психотерапия тип аталасаҡ. Пациент табипҡа килгәс, ул үҙе дауалау ысулын һайлай һәм ул ниндәй препараттар менән дауалаясаҡтар, ниндәй ышандырыу ҡулланасаҡтар, ниндәй эҙемтәләргә килтереүе бар икәне тураһында тулы мәғлүмәт алырға хоҡуҡлы. Йәғни был медицинаның заманса стратегияһына - асыҡлыҡҡа тап килә.

**➔ Элекке наркомандар йәки элекке эскеселәр булмай, тиҙәр. Был ысынлап та шулаймы?**

- Бында медицина критерийҙары күҙлегенән сығып фекер йөрөтөлә һәм түбәндәге мәғәнә һалына - әгәр кешелә ниндәйҙер бәйлелек булып, ул дауаланған йәки үҙе туҡтай алған һәм оҙаҡ йылдар инде был матдәләрҙе ҡулланмайынса, күпмелер ваҡыттан һуң үҙен һынап ҡарарға уйлап ҡына ҡулланып ҡарай икән, бәйлелек бик ҡыҫҡа ваҡытта барлыҡҡа килә. Йәғни беренсе бәйлелек барлыҡҡа килһен өсөн оҙайлы ваҡыт кәрәк, кеше уның үҫешенең барлыҡ стадияларын да үтергә тейеш. Ә инде икенсе осраҡта был стадияларҙы үтеп тороу ҙа кәрәкмәй, сөнки баш мейеһендә элекке мәғлүмәттәр һаҡлана. Хатта 10 - 20 йыл элек тәмәке тартыуын ташлаған кешеләрҙе тыңлаһағыҙ, улар хәҙер ҙә төштәрендә тәмәке тартыуын күреүҙәрен һөйләр. Тормоштағы бер нәмә лә эҙһеҙ үтмәй. Ләкин ташламалар булыуы ихтимал: теләге булған кеше мәңгелеккә эсеүен дә, тартыуын да, наркотик ҡулланыуын да ташларға һәм тулы ҡанлы тормош менән йәшәргә мөмкин.

**➔ Бер кем дә тыуғанда уҡ эскесе йәки наркоман, тәмәкесе булып тыумай, тимәк, ул ғәҙәти тормошҡа ла кире ҡайтырға һәләтле, әммә бының өсөн нимә талап ителә: теләкме, маҡсатмы, ихтыяр көсөмө?..**

- Кешенең ниндәй старттан сирләүе мөһим роль уйнай. Әгәр ул шәхес булып өлгөргән, имен ғаиләнән, быға тиклем тормошонда етди проблемалары, затында психик сирле туғандары булмаған икән, ундайҙарҙың үҙ теләге менән бер нисә этаптан торған дауаланыу курсы алып, ғәҙәти матур тормошҡа кире ҡайтыу мөмкинлеге юғары. Әгәр кеше тулы булмаған ғаиләлә үҫә, психопатия менән яфаланған, тыуғандан алып эмоциональ йәһәттән тороҡһоҙ, ихтыярһыҙ икән, ундай кешегә алдына етди маҡсат ҡуйыуы бик ауыр буласаҡ. Ләкин бәхетле булыуҙың һәр кемгә тап килгән формулаһы булмаған кеүек, бөтөн кешегә лә бер үк тура килгән математик модель юҡ, әммә һәр кемдең мөмкинлеге бар.

Йәмғиәттә шундай ҡараш йәшәй, йәнәһе лә, ҡатын-ҡыҙҙар алкоголизмдан тулыһынса дауаланмай. Эш тәжрибәмдән сығып әйтәм: дөрөҫ түгел! Әгәр ҡатын-ҡыҙ дауаланырға теләй, эргә-тирәһендәгеләр уға ярҙам итә, терәк була, һуңынан табип ҡушҡандарҙы теүәл үтәй икән, ҡатын-ҡыҙҙар ҙа яҡшы дауалана һәм ҡәҙимге тормош менән йәшәй башлай. Әммә бының бары тик дауаланыу ғына икәнен онотторға ярамай: теге йәки был ағзабыҙҙы дауалағанда табипҡа ваҡыты-ваҡыты менән барып тикшерелеп торған кеүек, алкоголизмдан дауаланыусыға ла табипҡа даими күренеп торорға, ярҙамсы дауаланыу, психотерапия сеанстары алырға, ниндәйҙер өҙлөгөүҙәрҙе иҫкәртеү кәрәк.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Йәмғиәттә бөгөн, булғандарына өҫтәп, тағы ла ниндәй профилактика эштәре алып барырға кәрәк тип уйлайһығыҙ?" - тигән һорау ҙа бирҙем әңгәмәсемә. Яуап тәү ҡарашҡа бик ябай тойолһа ла, сәпкә тейҙе - барыһы ла ғаиләгә бәйле: "Юҡҡа ғына ғаиләне йәмғиәттең ячейкаһы тимәйбеҙ. Барыһы ла сәләмәт ғаиләнән башлана. Ул бала үҫтереү, уны тәрбиәләү өсөн барлыҡҡа килә. Шуның өсөн ата-әсәнең икеһенең дә айыҡ булыуы төп шарт. Үҙҙәренең хеҙмәтен, ялын планлаштыра белгән, маҡсаттары, ынтылыштары булған, кешелек идеалдары системаһы булған, балаларын мөхәббәттә һәм татыулыҡта табып үҫтергән ғаилә генә сәләмәт шәхес тәрбиәләй ала. Бала өсөн атай менән әсәй - донъялағы иң мөһим кешеләр. Шуға күрә, әгәр атай кеше эштән спиртлы эсемлек эсеп, алкоголь йәки тәмәке еҫе борҡотоп ҡайтып, балаһын ҡулына ала икән, был сабый күңелендә мәңгелеккә атай кеше шундай булырға тейеш тигән фекерҙе нығыта. Һуңынан уға киреһен иҫбатлау бик ауыр буласаҡ".**

**Шәрифә САЛАУАТОВА әңгәмәләште.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# ЕҢЕЛ ЙӘШӘ!

## Әгәр мине яҡшы кешеләр уратып алһа...

Тормошта шундай мәлдәр була: "Иң яҡшы йылдарымды йүнһеҙ иргә һәм балаларға әрәм итмәһәм, шәхси үҫешемә иғтибар тупларға ваҡытым ҡалыр ине..." - тип әйтке килә. Был хата ҡараш, сөнки тап улар һеҙҙең шәхси үҫеш сығанағы ла инде.Тормошобоҙҙа осраған барлыҡ кешеләр - остаздарыбыҙ: йоҡлағанда хырлаған һәм бер ваҡытта ла шкаф ишеген япмаған ирҙәребеҙ ҙә, "рәхмәтле була белмәгән балаларыбыҙ" ҙа, өйгә инә торған юлға машинаһын аҡыры ултыртып ҡуйыусы күршебеҙ ҙә... Һәм әгәр улар бөтөн нәмәне дөрөҫ эшләргә өйрәнһә, тормошоғоҙ бәхетлерәк булырына үлгәнсе ышанып йәшәргә мөмкин. Әгәр ҡатынығыҙ асыуығыҙҙы килтерә икән, үҙегеҙгә ошо асыу менән һөҙөмтәле эш итеү маҡсатын ҡуйығыҙ. Ә идеаль ярҙамсы эргәгеҙҙә генә, үҙ йортоғоҙҙа. Проект буйынса партнер! Бына уңыш! Әлбиттә: "Айырылам һәм проблема үҙенән-үҙе юҡҡа сығасаҡ!" - тиергә була. Әммә ул ҡабаттан өйләнгәнгә тиклем генә юҡҡа сығасаҡ. Яңы ҡатының тағы ла асыуыңды килтерә башлаясаҡ. Ҡыҫҡаһы - тормошобоҙға килеп ингән кеше - остаз. Хатта беҙҙе ярһыу сигенә килтереп еткереүселәр ҙә, түҙемлегебеҙҙең сиген күрһәтеп, һабаҡ бирә. Әммә кешенең нимәгәлер өйрәткәне өсөн генә беҙгә оҡшарға тейешлеге мотлаҡ түгел.

## Аҙым артынан аҙым

Тормош күп осраҡта баҫҡысҡа оҡшаған. Үргә менеү өсөн сираттағы күтәрмәне нығытырға кәрәк: эш булһынмы ул, шәхси мөнәсәбәттәрме, аҡсамы һ.б. Әлеге баҫҡыста ныҡ баҫып торғанда ғына икенсеһенә күтәрелергә мөмкин. Әммә кешеләр үҙ баҫҡысынан менеүҙе төрлөсә ҡабул итә: "Ошо баҫҡысты яратмайым... икенсеһе булһын ине". Шулай итеп үҙебеҙҙе көрсөккә терәйбеҙ."Күршенеке кеүек баҫҡыс булһын ине". Был - көнсөллөк. "Ҡаҙалып китһен баҫҡысы... Төшөп ҡалам!" Был үҙ-үҙеңә ҡул һелтәү була.Көрсөккә терәлгәнһең икән, иң яҡшыһы үҙеңә: "Нимә тәртиптә түгел, нимәне көйләй алмайым?" - тигән һорау бирергә кәрәк.

## Ҡасан йәшәү ябайлашыр?

Бер ҡасан да! Ләкин тормош менән яҡшыраҡ идара итергә өйрәнергә була. Ерҙә йәшәү үҙе үк беҙҙең "тормош мәктәбе"нә ҡабул ителеүебеҙҙе аңлата. Тимәк, йәшәйһең икән - бер ниндәй ҙә каникул юҡ һәм булмаясаҡ.Барыбыҙ ҙа тәүҙә балалар баҡсаһынан мәктәпкә күсергә, һуңынан артабан белем алырға, үҙебеҙ аҡса эшләй башларға хыялланабыҙ. Йәнәһе лә, шул саҡта йәшәү әкиәткә әйләнер. Башҡаларға ҡарайбыҙ ҙа, ситтән уларҙың тормошо матур кеүек күренә. Әммә уларға ла бихисап проблемаларҙы хәл итергә тура килә. Һәр ҡайһыбыҙҙың үҙ проблемаһы һәм улар һәр саҡ буласаҡ.

## Тормош бер ваҡытта ла еңел түгел...

Йәшәү еңелләшә башлау менән үҙ башыбыҙға проблемалар уйлап таба башлайбыҙ. Йәнәһе лә, еңел эште атҡарыуы ҡыҙыҡ түгел, ауырыраҡ мәсьәлә кәрәк. Тормош еңелләшә башлаһа, ғаилә ҡорабыҙ. Ипотеканы түләп бөтөү менән ҙурыраҡ йорт алғы килә! Донъя түгел, үҙебеҙ тормошобоҙҙо ҡатмарлаштырабыҙ.

**Эндрю МЭТЬЮЗ.**
**(Дауамы бар).**

*КИНӘЙӘНЕ КИҢӘЙТЕП*

# ХӘҠИҠӘТТЕҢ

## өлөшө генә



Башҡорттоң "Улым, һиңә әйтәм, киленем, һин тыңла", тигән мәҡәле бар. Тураһын әйтеп, туғаныңа ярамағанда кинәйәләп әйтеү, берәй фәһемле ваҡиға йә тарих һөйләү, ишаралау күпкә отошло. Гәзитебеҙҙең алдағы ике һанында "Ғалим һәм дөйә ҡыуыусы", "Табип бәйғәмбәрҙән айырыламы?" кинәйәләрен баҫтырҙыҡ. Уларҙың йөкмәткеһен, кинәйәһен һәр кем үҙенсә аңлағандыр, үҙенсә ҡабул иткәндер. Бер төрлө аңларға, йөҙ проценты менән бер иш ҡабул итергә беҙ бит биороботтар түгел - бер-беребеҙгә шул тиклем оҡшаш заттарбыҙ һәм шул тиклем үҙенсәлеклебеҙ, сөнки тәбиғәтебеҙ шулай ҡуша, күңелебеҙ шулай теләй. Кинәйәләрҙең тағы бер отошло яғы шунда: улар бер кемгә лә көсләп тағылмай, әхлаҡи ҡанун кеүек тә ҡабул ителмәй - уҡыһаң да, уҡымаһаң да, фәһем алһаң-алмаһаң да - үҙ ихтыярыңда.

Яңы кинәйә тәҡдим итәбеҙ. Тәүге икеһе кеүек, ул да дини темаға бәйле. Шаңдау-яуаптар килеүенә өмөт итәбеҙ.

**ШУЛАЙ ИТЕП, РИҮӘЙӘТ!**

Мөхәммәт бәйғәмбәр юлдашы менән бер ҡалаға дини тәғлимәткә өндәргә килгән. Ислам дине яҡлы бер кеше уға былай тип өндәшкән: "Әфәндем! Был ҡалалағы алйотлоҡто бөтөрөп булмай. Бындағы кешеләр шул тиклем тиҫкәре, уларҙы бер нәмәгә лә өйрәтеп булмай. Һин дә был йәнһеҙ әҙәм заттарын дөрөҫ юлға баҫтыра алмаҫһың".

Бәйғәмбәр уны тыныс ҡына тыңлаған да: "Һин дөрөҫ әйтәһең", - тигән.

Тиҙҙән Бәйғәмбәр янына шат йылмайып, икенсе бер кеше килгән. "Әфәндем! Һин иң бәхетле ҡалаға килдең. Бындағы кешеләр һинең ғәҙел тәғлимәтеңде тыңларға һәм һәр һүҙеңде күңеленә уйырға ынтылып тора", - тигән ул. "Һин дөрөҫ әйтәһең", - тигән Бәйғәмбәр, илтифатлы йылмайып.

- О, әфәндем! - тип ҡысҡырып ебәргән Бәйғәмбәрҙең юлдашы. - Һин ҡапма-ҡаршы фекерле кешеләрҙең икеһенә лә бер төрлө яуап бирҙең. Аҡты ҡара тип әйтеп булмай ҙа инде.

- Һәр кем донъяны нисек теләй, шулай күрә. Ниңә мин уларға ҡаршы килергә тейеш? Уларҙың береһе яуызлыҡты күрә, икенсеһе - изгелекте. Һин үҙең, икеһененең береһе яңылыш әйтте, тип раҫлай алаһыңмы? Бөтөн донъялағы кеүек, бындағы кешеләр ҙә яуыздарға һәм изге күңеллеләргә бүленә. Әлеге икәүҙең береһе лә яңылыш һөйләмәне, бары тик тулы булмаған хәҡиҡәтте әйтте, - тип яуап биргән Бәйғәмбәр.

**Исмәғзәм ИСМӘҒИЛЕВ әҙерләне.**

БАШ ЭШЛӘТМӘК

# БАЙМАҒЫМ - БАЙ ЯҒЫМ




Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА төҙөнө.

**15-се һандағы сканворд яуаптары. Горизонталь буйынса:** Муйынса. Лөғәт. Урындыҡ. Намиб. Тирмән. Идаралыҡ. Миәс. Яҫы. Шаҡмаҡ. Ефрем. Андыҙ. Шомбай. Теҙләнеү. Ҡарбабай. Аҡса. Элмә. Балл. Игәт. Азат. Атыш.

**Вертикаль буйынса:** Инсебикә. Алағарай. Матур. Убалар. Бабсаҡ. Йылҡысыҡҡан. Аэлита. Дарья. Нейл. Туҡтамыш. Шүлгәнташ. Ҡомоҡа. Мәсем. Нахаҡ. Йома.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1438 һижри йыл.*

| Апрель (Рәжәб - Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 24 (27) дүшәмбе | 4:24 | 5:54 | 13:30 | 19:05 | 20:35 | 22:05 |
| 25 (28) шишәмбе | 4:22 | 5:52 | 13:30 | 19:07 | 20:37 | 22:07 |
| 26 (29) шаршамбы | 4:20 | 5:50 | 13:30 | 19:09 | 20:39 | 22:09 |
| 27 (1) кесе йома | 4:18 | 5:48 | 13:30 | 19:11 | 20:41 | 22:11 |
| 28 (2) йома | 4:15 | 5:45 | 13:30 | 19:13 | 20:43 | 22:13 |
| 29 (3) шәмбе | 4:13 | 5:43 | 13:30 | 19:14 | 20:44 | 22:14 |
| 30 (4) йәкшәмбе | 4:11 | 5:41 | 13:30 | 19:16 | 20:46 | 22:16 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

*ИҒТИБАР!*

## "АЛТЫН АЙ"ҘАР - ӨФӨЛӘ!



**29 апрелдә баш ҡаланың Йәштәр һарайында Мәскәүҙең "Алтын ай" башҡорт бейеү ансамбле үҙенең 5 йыллыҡ юбилей концертына саҡыра.** Сағыу концерт программаһында һеҙҙе ҡыҙыҡлы бейеүҙәр, фронтовик яҙыусыларҙың һәм шағирҙарҙың һуғыш тураһындағы хикәйәттәре, шиғырҙары, театрлаштырылған тамашалар, ТНТ каналы уҙғарған "Танцы" Бөтә Рәсәй проектында ҡатнашҡан "Гүзәл-данс" ансамбле, БДАУ-ның "Шатлыҡ" ансамбле сығыштары көтә.

"Алтын Ай" бейеү ансамбле Мәскәү ҡалаһында ойошторолған, башҡорт бейеү сәнғәтен пропогандалау менән шөғөлләнгән йәш коллектив, "Байыҡ" республика телевизион бейеү конкурсы лауреаты, Мәскәү ҡалаһы конкурстары еңеүсеһе. Биш йыл инде был ансамбль үҙенең етәксеһе Нәзир Байегетов менән Мәскәү башҡорттарын сағыу сығыштары менән ҡыуандыра.

**29 апрелдә 17 сәғәттә Йәштәр һарайында (Октябрҙең 50 йыллығы, 21-се йорт) башланасаҡ концертҡа рәхим итегеҙ! Инеү - бушлай.**

СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ

### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**22 апрель** Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе **"Люксембурға барып ҡайҡансы"** (М. Ҡунафин), фантасмагория 12+

**23 апрель "Мин - ҡатын-ҡыҙ"** (Т. Миңнуллин), бишек йыры 12+

**25 апрель "Хыялға ҡаршы"** (А. Ишбулдина, А. Баймөхәмәтовтың "Ҡалдырма, әсәй!" повесы буйынса) 12+

**26 апрель "Театр яҙы"** IX Респубика фестивален ябыу тантанаһы

**27 апрель "Мин һинең ҡәйнәң булам"** (С. Белов), комедия 12+

**28 апрель "Ул бит кисә ине"** (А. Әхмәтғәлиева), лирик комедия 12+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**23 апрель** Сибай дәүләт концерт-театр берләшмәһе **"Йәнкисәк"** (Т. Килмөхәмәтов), бер ғүмер тарихы 12+

**24 апрель "Ҡарт кейәүҙәр, йәки Шомбай ҡоҙа"** (Ф. Бүләков), фольклор комедия 6+

**26 апрель "Диләфрүзгә дүрт кейәү"** (Т. Миңнуллин), музыкаль комедия 12+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**25 апрель "Күңелемдә һин генә"** Рөстәм Шаһыбаловтың концерты

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**22-23 апрель "Девочка и пришелец"** (Б. Хан). Башлана 12.00, 14.00 0+

**24 апрель "Урал батыр"** (В. Аношкин), легенда. Башлана 19.00 6+

*ИҒТИБАР!*

## ҺАҠ БУЛЫҒЫҘ - ТАЛПАН



**Башҡортостанда әлегә талпан тешләү осраҡтары теркәлмәгән, тип хәбәр итә Роспотребнадзор. Әммә көндәр йылыныу менән талпандар әүҙемләшә башлаясаҡ.**

Былтыр медицина учреждениеларына 10 меңгә яҡын кеше ярҙам һорап мөрәжәғәт иткән, уларҙың 32 проценты - балалар. БР Гигиена һәм эпидемиология үҙәге лабораторияларында һәм филиалдарында яҡынса 7 мең талпан тикшерелгән. Уларҙың араһында вируслылары 6,1 процент тәшкил иткән (2015 йылда - 5,7 процент).

БР буйынса Роспотребнадзор белгестәре билдәләүенсә, талпан энцефалитын профилактикалауҙың төп сараһы - иммунизация, уны йыл дауамында яһатырға була. Әммә күптәр табиптарға яҙын ғына мөрәжәғәт итә башлай. Ике инъекция 3 айҙан 5 айға тиклем интервал менән яһала, өсөнсөһө - икенсеһенән һуң йыл үткәс, артабан өс йылға бер тапҡыр ҡабаттан вакцина эшләнә. Вакцина яһауҙың төп шарты - эпидемия миҙгелендә прививканан һуң ике аҙна тәбиғәткә сығыуҙан һаҡланырға.

Әгәр ҙә талпан ҡаҙалған икән, яҡындағы медицина учреждениеһына, травмпунктҡа, талпан ҡаҙалыу менән мөрәжәғәт итә торған пункттарға барырға кәрәк. Унда белгестәр талпанды алып, иммуноглобулин менән тиҙ ярҙам күрһәтеү кәрәклеге мәсьәләһен хәл итәсәктәр. Ул талпан тешләгәндән һуң өс көн дауамында яһала.

ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# ҮҘЕНДЕ СИТТӘН КҮРГЕҢ КИЛҺӘ...

## өйөңдән сыҡ



**Бынан бер нисә йыл элек оҙон юлда йөрөп ҡайтҡандан һуң тап шундай фекергә килгәйнем. Был бәләкәй генә хәҡиҡәттең бөгөн булһа әһәмиәтле булыуына иғтибар итәм. Әлбиттә, яңы юл йә сәфәр һәр кемдә яңы ҡараштар уята, үҙебеҙҙең көнитмештән ары донъя һулышын тойорға мөмкинлек бирә.**



Күптән түгел республикала киң башланғыс алған традицион уҡ атыу буйынса йүнәлештең әүҙем ағзалары Юлай Ғәлиуллин, Азамат Юлдашбаев, Рушан Хәсәнов, Артур Батыршин, Фидан Сәғитовтар Пермь ҡалаһында үткән А.И.С.Т. традицион уҡ атыу турнирына барып үҙ мәргәнлектәрен һынап ҡайтты. Мәғлүм, ятып ҡалғанса, атып ҡалыуҙы хуп күргән башҡорт мәргәндәре, быға хәтлем ил эсендә үткәрелгән бәйгеләрҙән тыш, Ҡырғыҙстанда төрки халыҡтарының милли уйындарында ҡатнашып ҡайтҡайны. Белгән юлда тигәндәй, йөрөй-йөрөй белем-оҫталыҡ та арталыр, моғайын. Илләмәгәр үҙ ҡаҙаныбыҙҙа ғына ҡайнап түгел, күрше-күлән менән аралашып, яңы таныштар менән күрешеп, фекер-тәжрибә туплана. Икенсе яҡтан, башҡа төбәктә йәшәгән ҡәрҙәш халыҡтарҙың йәиһә икенсе милләт мәргәндәренең дә һулышын тойоу әҙерлек-оҫталығыбыҙҙы самаларға, мәҙәни кимәлебеҙҙе тойорға ярҙам итә. Бәйгеләрҙең төрлө төбәктә үткәрелеүе һәм мөмкинлек булғанда уларҙа ҡатнашыу ҙа үрҙә әйтелгәндәр менән әһәмиәтле.

Ә яңы ойошторолған бәйгегә килгәндә, уны Пермь ҡалаһының тарихи үткәндәр менән ҡыҙыҡһынған "Урал тейендәре" тарихи клубы йыл һайын апрель айында уҙғара икән. Был юлы бәйгелә Рәсәйҙең төрлө төбәктәренән хәрби-патриотик клубтарҙа шөғөлләнгән алты команда ҡатнашты. Мәргәндәр ир-егеттәр һәм ҡатын-ҡыҙҙар - шәхси беренселектә һәм шулай уҡ командалар араһында көс һынашты. Ҡабул ителгән дөйөм ҡағиҙәләрҙән тыш, турнирға ҡуйылған төп талап - бәйгелә ҡатнашыусылар 12 йәштән өлкән булып, тарихи милли кейемдәрҙә һәм үҙ ҡоралдары менән сығыш яһау. Командалар араһында Башҡортостандан "Мәргән уҡсы" командаһы өсөнсө урын яуланы.

Батырлыҡ яуҙа беленһә, мәргәнлек ауҙа беленер тип юҡҡа әйтмәгәндәрҙер. Төрлө милли бәйгеләрҙә үҙ көстәрен һынап өлгөргән Өфө мәргәндәре бер йыл ғына шөғөлләнеүҙәренә ҡарамаҫтан, ата-олаталарының мираҫын ҡәҙерләп, был эште тергеҙергә ярҙам итә. Шундай егеттәрҙең береһе **Артур БАТЫРШИНдан** Пермдәге бәйге тураһында бер нисә һүҙ әйтеүен үтендек.

**➔ Беҙҙең республикала үткән ярыштарҙан айырыламы бәйге? Нимәһе менән?**

- Башҡортостанда бәйгеләр башланғыс алып яңы күтәрелеп килә. Пермдә традицион уҡ атыу ярыштары даими үткәрелә. Был сараға ҙур реклама ла эшләмәй 40-ҡа яҡын ҡатнашыусыны йыйҙылар. Бөтәһе лә, бәйге шарттарына ярашлы, XIX быуатҡа тиклемге осорҙарҙағы уҡсыларҙың милли кейемдәрендә ине. Бер ниндәй ҙә аңлашылмаусылыҡ юҡ, ойоштороу бик юғары кимәлдә булды. Алып барыусы хөкөмдар һәр бер этап буйынса тейешенсә аңлата, һөҙөмтәләрҙе сәркәтип яҙып бара, техник ярҙамсылар айырым билдәләнгән.

**➔ Ә бәйге һынауҙарына килгәндә...**

- Ярыш этаптарында ла айырма ҙур - һынауҙар бик ҡыҙыҡ, төрлө, биатлон һымаҡтары ла булды, кеше маһекендарына ла аттыҡ, өйрәләп торған бәләкәй сәптәргә лә тейҙерергә маташтыҡ, тиҙлеккә ярышҡанда өс төрлө мәрәй иҫәбе буйынса билдәләнгән сәптәргә һайлап атыу мөмкинлеге бирелде. Тамашасыларға ла ундай уйындарҙы күҙәтеү бик ҡыҙыҡ. Ә беҙҙә әлегә ябай олимпик сәптәргә генә атыу ғәҙәткә ингән. Ҡомар әҙерәк, ә мәргән булғас, ул төрлө үҙенсәлекле һынауҙарҙы оҫта үтергә тейеш. Беҙҙә үткән бәйгеләрҙә ябай атыш, шуға ла тамашасыға кем мәргәнерәк икәнен аңлауы ҡыйын.

**➔ Ҡайҙан килгәйнеләр бәйгегә һәм командаларҙың әҙерлек кимәлдәре ниндәй ине?**

- Өфөнөң "Мәргән уҡсы"ларынан тыш, Пермь, Ижевск, Киров, Глазов, Березники ҡалаларынан, Көньяҡ Кама ҡасабаһынан хәрби-патриотик һәм тарихи клуб командалары һәм шәхси беренселектә спорт мәктәптәренән егеттәр булды. Командалар ныҡлы әҙерләнгән, көнө-төнө күнекмәләрҙә булғандыр тип әйтеп булмай. Унда барыһы ла атыуҙан кинәнес ала, уға ҡыҙыҡлы, үҙенсәлекле бер сәнғәт төрө йәки яратҡан шөғөл итеп ҡарай. Спорттан айырмалы рәүештә, бында енеү иң мөһим маҡсат түгел. Бәйгелә булыу, аралашыу, кейемдәрҙе ҡарау, танышыу, тәжрибә менән уртаҡлашыу мөһимерәк. Әйткәндәй, команда уйындары ла бик ҡыҙыҡ ойошторолған ине, оҡшаны. Үҙебеҙҙә үткән "Мәргән уҡсы" фестивалендә ҡулланып ҡарау өсөн тәжрибә лә булды.

**➔ Турнирҙан һуң, Өфө командаһы булараҡ, үҙегеҙ өсөн ниндәй һығымта яһанығыҙ?**

- Ни тиклем ярыштарға күберәк йөрөйһөң, шул хәтлем һине, берҙәм команда аша һинең халҡыңды уҡсы халыҡ, мәргәндәр тип таный башлайҙар. Ә һин шәхсән үҙеңдең оҫталығыңды арттыраһың, башҡа уҡсылар менән тәжрибәңде бүлешәһең. Беҙгә күнекмәләрҙә ныҡыраҡ шөғөлләнергә, һынауҙарҙың төрлөләгән арттырырға, шул иҫәптән һыбай килеш атыу оҫталығын камиллаштырыу мотлаҡ, тигән фекерҙәмен.

**Эйе, тамырҙарыбыҙ менән көслө халыҡ беҙ. Данлыбыҙ - тарихыбыҙҙа, бөйөклөгөбөҙ ҙә - тарихтан. Үткәндәребеҙ менән бергә бөгөнгөнөң дә, киләсәктең дә яйлы бәйләнеше булырға тейештер, моғайын. Һәр хәлдә ил алдында ла, үҙ намыҫың алдында ла лайыҡлы булып өсөн һынау юлдары үтергә, тәжрибә туплап, үҙеңдекеләр менән бүлешергә, һәр көн бирелгән мөмкинлектәрҙән яҡшы ниәттән файҙаланырға кәрәктер, моғайын. Шул саҡта беҙгә кеше булараҡ та, халыҡ булараҡ та бер нәмә лә ҡамасаулай алмаҫ. Маҡсат итеп ҡуйған үҙ сәбәбең төбәп ат ҡына...**

**Розалия МӨҘӘРИСОВА.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҺӨНӘРЛЕ КЕШЕ -

## ҡоралды кеше

Йомшаҡ ағасты ҡорт баҫыр, йомшаҡ кешене һүҙ баҫыр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Балаһы өйҙә саҡта әсәнең елкәһе ауырта, балаһы урамда саҡта унын йөрәге ауырта.

**(Ральф Эмерсон).**

Ҡыҙыҡ бит: һәр быуын һайын балалар насарая, ата-әсәләре яҡшыра бара. Бынан шундай һығымта яһарға мөмкин: тимәк, насар балаларҙан яҡшы ата-әсәләр барлыҡҡа килә.

**(Веслав Брудзиньский).**

Ғүмерҙең тәүге яртыһын - ата-әсәләр, икенсе яртыһын балалар ағыулай.

**(Кларенс Дарроу).**

Ата-әсәләр шул тиклем ябай ҡоролмаға оҡшаш, улар менән хатта балалар ҙа идара итә ала.

**(Питер Устинов).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер саҡ батшаға ҡарсыға ҡошсоғон тотоп килтерәләр. Батшаның хеҙмәтсеһе ҡошсоҡто тәрбиәләп үстерә, ләкин осорға өйрәтә алмай. Ҡарсыға ҡошсоҡ сағында уҡ ҡундырылған ағас ботағынан айырылырға теләмәй, тик кенә ултырыуын белә. Батша йыш ҡына хеҙмәтсеһенең башҡа ҡоштарҙы осорға өйрәтеүен, ә был ҡарсығаны урынынан ҡуҙғата алмай яфаланыуын тәҙрәнән күҙәтеп ултыра. Хеҙмәтсеһен йәлләп китә бер саҡ батша һәм илгә хәбәр ебәрә: кем дә кем ҡарсығаны осорға өйрәтә... Иртәгәһенә иртән тәҙрә аша ҡарсығаның осоп йөрөгәнен күргән батша был мөғжизәне тормошҡа ашырған кешене эргәһенә килтерергә бойора. Бер крәстиән икән ул. "Һөйлә, һин нисек ҡарсығаны осорға мәжбүр иттең?" ти уға батша. "Уның бер ауырлығы ла булманы, батшам, - ти крәстиән. -Мин ҡарсыға ултырған ботаҡты бысып ташланым. Шунда ҡарсыға үҙенең ҡанаттары барлығын аңлап, осоп китте..."**

**Ә бит кешеләр ҙә шулай. Береүҙәр үҙҙәрендә ҡанат барлығын белмәй, ултырған ерендә ултыра бирә. Тормош ошо ғәҙәт ботағын һындырып ташлаһа ғына улар ҡанаттары барлығын иҫкә төшөрә һәм осоп китә. Икенселәренең бөтөн нәмәһе бар, улар быны шул булғанды юғалтырға теләмәй, бер урында ултыра ла ултыра. Бәлки, улар ултырған ботаҡты ла бысырға кәрәктер, улар ҙа осоуҙың ни икәнен татып ҡарарға тейештер бит? Ҡайһы саҡта тәүҙә бик насар булып тойолған көтөлмәгән ваҡиғаларҙың да осоу мөмкинлегенә биреүе ихтимал бит. Осайыҡ!"**

“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идарағында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррират:**
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зөйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Гөлназ МАНАПОВА,
Илгиз ИШБУЛАТОВ,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» яуаплылығы сикләнгән йәмғиәте типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
**Баш мөхәррир** 253-25-44
**Баш мөхәррир урынбаҫары** 246-03-24
**Бухгалтерия** 246-03-23
**Хәбәрселәр** 252-39-99
Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 21 апрель 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44, 246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.
«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**
Тиражы - 5107
Заказ - 793/04